Муса Мортазиндың
тыуыуына 120 йыл тулыуға бағышлана

Азат ЯРМУЛЛИН

# Комбриг Мортазин
# һәм уның яуҙаштары

ӨФӨ – 2011

УДК 94 (470.57)
ББК 63.3 (2 Рос.-Баш.) 6-8
Я 78

Рецензент:
Тарих фәндәре докторы, профессор
Салауат Фитрат улы Ҡасимов.

**Ярмуллин А.Ш.**

Я 78

Комбриг Мортазин һәм уның яуҙаштары. – Өфө, 2011. – һүрәттәре менән 105 бит.

Китапта башҡорт халҡының арҙаҡлы улдарының береһе, ҡаһарман сардар, милли хәрәкәт һәм дәүләт эшмәкәре Муса Лут улы Мортазин һәм уның яуҙаштарының тормошо һәм эшмәкәрлеге бәйән ителә. Шулай уҡ бында М. Мортазин командалыҡ иткән Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының хәрби юлы, Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән яугирҙары хаҡында мәғлүмәт, Мортазин һәм уның бригадаһы тураһында иҫтәлек, фотографиялар бирелде.

УДК 94 (470.57)
ББК 63.3 (2 Рос.-Баш.) 6-8

© А.Ш. Ярмуллин, 2011

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Исеме ил тарихында........................................................4
Комбриг Мортазин һәм уның атлы бригадаһы..............................6
Уралтау осорған бөркөттәр..............................................32
Йырлап килә Мортазиндың эскадрондары..............................66
1918 йылдағы “Ҡыҙыл террор”..................................................75
Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән яугирҙар....................81

# Исеме ил тарихында

Муса Мортазин – Салауат Юлаев кеүек халыҡ өсөн ҡатмарлы һәм аяныслы осорҙа башҡорт халҡының мәнфәғәттәрен ҡулына ҡорал алып яҡлаған, Башҡортостан автономияһы идеяһын ныҡлы терәге булған шәхестәрҙең береһе. 1920 йылда Зәки Вәлиди хөкүмәте Башҡортостандан киткәс, автономияның яҙмышы ҡыл осонда эленеп торған осорҙа, Польша фронтынан ҡайтып, үҙенең абруйы менән республикалағы боларышты туҡтатыуға булышлыҡ итә. Әйткәндәй, Польша фронтында 4 ай ғына булыуға ҡарамаҫтан, ҙур батырлыҡтар күрһәтеп, ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ булып өлгөрә. Артабан Муса Мортазин ҡылысын ҡынына ҡуйып, йәш автономияның дәүләт эше менән булыша. 1921–1922 йылдарҙа, республика өсөн иң ауыр, аслыҡ осоронда Башҡортостан менән етәкселек итә.

1917–1920 йылдарҙағы милли-азатлыҡ хәрәкәте осоронда үҫеп сыҡан башҡорттоң милли элитаһын тотошлайы менән тиерлек юҡ иткән Сталин репрессияһы ҡаһарман, баш бирмәҫ сардар Мортазинды ла урап үтмәй. 1937 йылда 27 сентябрендә ул СССР Юғары судының хәрби коллегияһы ҡарары менән иң юғары язаға – үлемгә хөкөм ителә. Шул уҡ көндө атыла.

Сталин үлгәндән һуң, 1956 йылда реабилитацияланыуға ҡарамаҫтан, Муса Мортазиндың исеме Зәки Вәлиди менән бер рәттән Башҡортостанда партия власы тарафынан ҡаты тыйыу аҫтында булды. Партия Мортазиндың 1918 йылда аҡтар яғында йөрөүен ғәфү итмәй. Уның исемен телгә алыуҙы ҡырҡа тыя. Бигерәк тә партия эшмәкәрҙәре Мортазиндың 1918 йылдың йәйендә Блюхер отрядына ҡаршы һуғышыуын ғәфү итә алмай. *“...в период рейда Блюхера, когда белорецкие полки с боями пробивались к Уфе на соединение с регулярными частями Красной Армии, особенно жестоко преследовала их башкирская конница под командованием Муртазина”*, – һөрән һала улар.

Совет осоронда Блюхер етәкселегендәге партизан отрядтарының Ҡыҙыл Армияға барып ҡушылыу тарихын ниндәйҙер бер ҙур ҡаһарманлыҡ, “героик поход” итеп һүрәтләнеләр. Ә бына 1918 йылдың йәйендә Блюхерҙың отрядтары башҡорт ауылдары аша үткәндә ябай халыҡҡа ҡарата ысын мәғәнәһендә террор ойошторғандары хаҡында архив документтары яҡшы һөйләй. Был турала –се биттәге “1918 йылдағы “Ҡыҙыл террор” исемле мәҡәләмдә таныша алаһығыҙ.

Бөгөн дә төрлө уйҙырмалар менән Муса Мортазиндың исемен бысратырға, уға яла яғырға тырышыусылар әҙ түгел. Был йәһәттән, бигерәк тә “Уфагуб” сайты әүҙем эшләй. Зәки Вәлиди менән бер рәттән Муса Мортазиндың исемен ҡарайтыу буйынса эҙмә-эҙлекле эш алып барыла. Уларҙың төп маҡсаты республика йәмәғәтселегендә ошо шәхестәргә ҡаршы кире ҡараш тыуҙырыу һәм шуның менән бергә Башҡортостандың милли республика булыу хоҡуғын шик аҫтына

ҡуйыу өсөн эшләнә. Бындай эш, үҙ сиратында, ниндәй һөҙөмтәләргә килтереүен һәр кем яҡшы һәр кем яҡшы аңлайҙыр, тип уйлайым. Шуға күрәлә тарихыбыҙ, арҙаҡлы шәхестәрҙең яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү йәһәтенән уйланырға урын бар. Был китабым Башҡортостан дәүләтселегеге өсөн ҡулына ҡорал алып көрәшкән ҡаһарман сардар Муса Мортазин һәм уның яуҙаштарының исемдәрен мәңгеләштереү эшендә бер кескәй генә өлөш булыр, тип ышанам.

Азат ЯРМУЛЛИН.



# Комбриг Мортазин
# һәм уның атлы бригадаһы

Граждандар һуғышы осоронда Ҡыҙыл Армия составында өс башҡорт ғәскәри берәмеге ойошторола – Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы, Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы һәм Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы. Ошо ғәскәрҙәрҙең тәүге икәүһенән айырмалы рәүештә өсөнсөһө күп архив документтарында Муса Мортазиндың кавалерия бригадаһы, тип телгә алына. Был Муса Мортазиндың сардар булараҡ тотҡан урыны, абруйы тураһында һөйләй. Ошондай уҡ дәрәжәгә легендар комбриг Котовский ҙа лайыҡ була. Әйткәндәй, Мортазин менән Котовский 1920 йылда Польша фронтында ингә-иң терәшеп, бергә һуғышып йөрөй.

Башҡорт ғәскәренең данын алыҫ тарафтарға тараткан сардар 1891 йылдың 20 февралендә элекке Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Күбәләк-Тиләү улысына ҡараған Көсөк ауылында, хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Учалы районы Көсөк-Маяҡ ауылы донъяға килә. Ауыл мәҙрәсәһендә белем ала. 1912 йылда 21 йәшлек егетте әрме хеҙмәтенә алалар. Уны Алыҫ Көнсығыштағы 9-сы Себер артиллерия

бригадаһына ебәрәләр. 1913 йылда уҡыу командаһын тамамлап, Муса Мортазин бомбардир-наводчик (батша армияһы артиллерияһындағы ефрейтор) званиеһын ала.

Ике йыл хеҙмәт итеүенә, 1914 йылда Германия менән һуғыш башланып китә. 9-сы Себер артиллерия бригадаһы фронтҡа ебәрелә. Бомбардир Мортазин 1917 йылдың майына тиклем Көнсығыш, Румыния фронтарында немец, австреецтар һәм румындарға ҡаршы һуғышып йөрөй. 1914 йылдың сентябрендә вице-фейерверкер (кесе унтер-офицер) званиеһы ала. 1916 йылда июлендә ҡаты алыштарҙың береһендә артиллерист Мортазиндың башы яралана. Яуҙарҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн Мусаны унтер-офицер итеп үрләтәләр. Шулай итеп, Мортазин илдәге үҙгәрештәр осорон дары еҫен татыған һалдат булараҡ ҡаршылай.

1917 йылдың Февраль революцияһынан һуң фронтта һалдаттар араһында революцион агитация киң ҡолас йәйә. Был йәһәттән большевиктар, эсерҙар бик әүҙем була. Муса Мортазинға бигерәк тә коммунистарҙың агитацияһы ныҡ тәьҫир итә. Уларҙың сәйәси ҡарашын яҡын күрә. Мосолман һалдаттары араһында абруй ҡаҙанған унтер-офицерҙы 1917 йылдың майында Мәскәүҙә үткән I Бөтә Рәсәй мосолмандары съезына делегат итеп ебәрәләр. Ошо осорҙан башлап, Муса Мортазин башы-аяғы менән сәйәси эшмәкәрлеккә сума.

Съездан һуң Мортазин тыуған яғына ҡайтып төшә. Был осорҙа башҡорттар араһында автономия өсөн хәрәкәт ҡолас йәйә. Сәйәси яҡтан өлгөргән фронтовик егет мөстәҡиллек яулау идеяһынан ситтә ҡалмай, әлбиттә. Халыҡ араһында абруй ҡаҙанып өлгәргән Мортазинды яҡташтары Ырымбурҙа үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайына делегат итеп һайлай.

1917 йылдың декабрендә Каруанһарай бинаһында үткән халыҡ йыйынында 15 ноябрҙа иғлан ителгән Башҡортостан автономияһы раҫлана, Башҡорт хөкүмәте ойошторола. *“Сәйәси яҡтан Ҡоролтай өс төркөмгә бүленде. З. Вәлидов менән Ш. Манатов етәкселек иткән беренсе төркөм башкорт халкының ниндәй ҙә булһа билдәле бер иҡтисади төркөмөнөң мәнфәғәттәрен түгел, ә башҡорттарҙың милли бойондороҡһоҙлоҡҡа дөйөм ынтылыштарын сағылдыра ине… Икенсе төркөм – фронттан ҡайтҡан һалдаттар һәм башҡорттарҙың хеҙмәтсән интеллигенцияһы – большевиктарға тартылды…”*, – тип яҙа

Мортазин үҙең китабында. Ул ошо икенсе төркөмдә була. Ҡоролтайҙа күпселек тарафынан ҡабул ителгән ҡайһы бер ҡарарҙар менән (ер мәсьәләһе буйынса) килешмәһә лә, Мортазин Башҡортостандың тупраҡлы мөхтәриәтен ҡуш ҡуллап хуплай.

Ҡоролтайҙан һуң, 1918 йылдың ғинуарында инде Муса Мортазин башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәре менән бер рәттән, башҡорт делегацияһы составында Өфөлә үткәс төрки-татарҙарҙың Милли мәжлесе йыйылышында ҡатнаша.

Бында башҡорттар Башҡортостан автономияһына ҡаршы сығыш яһаған татарҙар менән ҡыҙыу бәхәстәр алып бара. Ошо арала Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте губерна мосолман комитеты тарафынан ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Башҡорт вәкилдәре Муса Мортазин, Хафиз Ҡушаев, Зекериә Айытбаев, Усман Ҡыуатов һәм Мөхәмәтхан Ҡулаев Ырымбурға ҡайтып, власты үҙ ҡулына алған Башҡортостандың ваҡытлы революцион советына бара. *"Хотя делегаты разъяснили цель их прибытия к Временному революционному совету… но в тот день они не смогли получить ясного ответа"*, – яҙа Зекериә Айытбаев. 1 март көнө делегаттар менән Ваҡытлы революцион советтың берлектәге йыйылышы була. Делегаттарҙың ни өсөн Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынған?, – тигән һорауына, Ырымбур мосолман комитеты рәйесе Ғәли Шәмиғолов: *"Они получили от дутова 60 тысяч рублей денег и 300 винтовок. А также Дутовым засланы в пределы Башкирии несколько офицеров и инструкторов. К тому же члены предпарламента работали рука об руку с Дутовым и хотели присоединить Башкирию к Юго-Востоному союзу"*, – тип аңлата. *"Делегаты, собравшиеся на Башкирский учредительный съезд, были все буржуи. …все их постановления, принятые на учредительном съезде, были буржуазными…"*– тип өҫтәй Бәхтигәрәй Шәфиев. Берниҙә хәл итә алмағас, делегаттар таралыша. Һул ҡарашлы Мортазинды большевиктар Ваҡытлы революцион советҡа эшкә саҡыра. Әммә улар Мортазинға бер аҙ шик менән ҡарай. *"Из вновь введенных (конце марта) членов ревкома Муртазин иногда показывал себя левым, но только на словах; у нас было подозрение, что он – сторонник Валидова в ревкоме"*, – тип яҙа Башҡортостандың ваҡытлы революцион советы рәйесе Ғабдулла Дәүләтшин.

Әммә Совет платформаһында Башҡортостан автономияһы идеяһы Татар-Башҡорт Совет Республикаһы өсөн сығыш

яһаған татар эшмәкәрҙәренә бер ҙә оҡшап етмәй. 1918 йылдың 30 мартында Ғәли Шәмиғолов ваҡытлы революцион советты ябып та ҡуя. Ошоноң менән Башҡортостан автономияһы өсөн көрәш бер-нисә айға һүрелеп тора.

Башҡортостандың ваҡытлы революцион совет таратылғас Муса Мортазин тыуған яғына ҡайтып, совет власы урынлаштырыу менән мәшғүл була. Тамъян-Ҡатай кантонында милиция ойоштора.

Ләкин большевиктарҙың тантанаһы оҙаҡҡа бармай. 1918 йылдың майында Чехословак корпусы Урал-Иҙел буйында совет власын бер һуғыуҙа юҡҡа сығара. 1914 йылда урыҫ армияһы составында ойошторолған Чехолословак корпусы (60 мең һалдат) 1917 йылға тиклем Герман һуғышында немецтарға ҡаршы һуғыша. Власть большевиктар ҡулына күскәс, улар чехлословактарҙан тиҙерәк ҡотолорға уйлай. Килешеү буйынса 60 меңлек корпус тимер юлы аша Алыҫ Көнсығышҡа барып, унан диңгеҙ юлы менән Францияға китергә тейеш була. Чехословактарҙың эшелондарға тейәлгән ғәскәрҙәре Пензанан алып Чита ҡалаһына юлда килә. 1918 йылдың майында большевиктар Чехословак корпусын ҡоралһыҙландырырға тигән әмер бирә. Быға ҡаршы тегеләре баш күтәрә һәм 1918 йылдың июненә Урал-Иҙел буйында власть большевиктарға ҡаршы көстәр ҡулына күсә.

Быға тиклем апрель башында ҡаһарман сардар, Зәки Вәлидиҙең яҡташы, арҡадашы Әмир Ҡарамышевтың партизан отряды атаман Дутов тың казактары менән берлектә Ырымбурға сапҡын яһап Башҡорт хөкүмәте ағзалары төрмәнән ҡотҡара. Май аҙағында Башҡорт хөкүмәте етәкселәре Силәбелә Чехословак корпусы командалығы менән осрашып, килешеп, башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшенә тотона.

Июнь айында Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлеге янында Башҡорт хәрби шураһы (рәйесе Зәки Вәлиди). Ул Башҡорт ғәскәре штабы ролен үтәй. Хәрби шураның мобилизация планына ярашлы 2 кавалерия һәм 7 пехота полкынан торған Башҡорт корпусын төҙөү ҡарала. Ошо планға ярашлы Башҡортостандың төрлө кантондарында ғәскәр туплау эше башлана. Тамъян-Ҡатай кантонында Әмир Ҡарамышев етәкселегендә 5-се Башҡорт пехота һәм 1-се Башҡорт кавалерия полкы төҙәлә башлай. 1-се кавалерия полкына Ә. Ҡарамышев етәкселек итә,

ә эскадрон командирҙары итеп, атаман Анненковтың талабы буйынса казак офицерҙары ҡуйыла.

1-се Башҡорт кавалерия полкын ойоштороу эшенә Муса Мортазин да әүҙем ҡушыла. Яңы-яңы ойошторолоп ятҡан тәүге башҡорт кавалерия полкына Белоретта тупланған Блюхерҙың отрядтарына ҡаршы һуғышырға тура килә. Был осорҙа, тарихсы Рөстәм Таймасов яҙыуынса, 1-се Башҡорт кавалерия полкында ни бары 100 кеше тирәһе була. Әмир Ҡарамышев етәкселек иткән 1-се полк Блюхер һәм Кашириндың йыйылма отрядтары менән Белорет, Верхнеуральск, хәҙерге Ишембай районы территорияһында аяуһыҙ һуғыша. “Тәүге һуғышта уҡ казак офицерҙары (эскадрон командирҙары) сафтан сыҡҡас, полктың иҫән ҡалған өлөшө 1-се эскадронға ҡушылды. Эскадрондарҙы аяҡҡа баҫтырыу өсөн полк командиры (Ҡарамышевтың) бойороғо менән 1-се эскадронға командир итеп М.Мортазин, 2-се эскадронға корнет Эглер билдәләнде”, - тип яҙа Мортазин.

1918 йылдың 7 авгусында полк командиры Әмир Ҡарамышев үлеп ҡала. Уның урынына аҡ командование казак офицеры хорунжий Ганаганы ҡуя. Әммә сентябрь айында Башҡорт хәрби шураһы 1-се полка командир итеп Әмир Ҡарамышевтың ҡустыһы прапорщик Мөхтәр Ҡарамышевты тәғәйенләй. Йәйге һуғыштарҙан һуң 1-се Башҡорт кавалерия полкы ялда тора. 1918 йылдың көҙөндә полкка ҡаһарман сардар Әмир Ҡарамышевтың исеме бирелә.

Ялда торған сағында Муса Мортазин тыуған яғы Тамъян-Ҡатай кантоны эшендә әүҙем ҡатнаша. Архив документтары ошо хаҡта һөйләй. Ул 1918 йылдың 15 ноябрендә уҙғарылған кантон думаһы йыйылышына саҡырыла. Бында Мортазин бер тауыштан йыйылыш президиумы рәйесе урынбаҫары итеп һайлана. Йылыштың тәүге көнөндә Мортазин башҡорт ғәскәрҙәре исеменән сәләм күндерә, большевиктарға ҡаршы һуғыш барышы тураһында һөйләп үтә. 17-19 ноябрҙәрге ултырыштар Муса Мортазин рәйеслегендә үтә. Йыйылышта ҡанташыусылар Мортазинға оло рәхмәтен белдерә: *“М. Муртазин участвовая на собрании своею опытностью, как зам. пред. собрания оказал большое содействие думе, почему собрание выражает ему благодарность и просит его передать 1-му кавалерийскому полку от имени думы привет”.*

1918 йылдың декабренә Ҡыҙыл армия ғәскәрҙәре Башҡортостан автономияһы (Бәләкәй Башҡортостан) сиктәренә килеп етә. Башҡорт ғәскәрҙәре Ырымбур менән Стәрлетамаҡ ҡалалары араһында ҡыҙылдарға ҡаршы фронт тота. Зәки Вәлиди фарманы менән бында Стәрлетамаҡ фронты ойошторола. Был осорҙа башҡорт уҡсы полктары Дутовтың ҡарамағында Аҡтүбә фронтында һуғыша, шуға күрә Стәрлетамаҡ фронтында бөтә ауырлыҡ 1-се Башҡорт кавалерия полкы һәм башҡорт ирекле отрядтарына төшә. *“На Стерлитамакском фронте действует 1-й кавалерийский имени Карамышева полк 400 человек при 152 винтовках и 400 конях. Юрматинский отряд 150 человек, Табынский отряд 200 человек. Туда же двигается Кипчакский отряд 160 человек, Джетировский отряд 120 человек, Тамъян-Катаевский 400 человек, Усерганский отряд 180 человек. Бурзянский 300 человек остается на охране Правительственных учреждений в Баймакском районе.*

*Руководство Башкирским конным полком и отрядами Стерлитамакском районе объединяется в руках командующего Башкирскими силами Стерлитамакского района, которым назначаю ротмистра Карамышева. Только эти части полуголодные так как не имеют денег и без патронов, пулеметов и недокомплект оружия”*, - тип яҙа Зәки Вәлиди 30 декабрь көнө войсковой старшина Богдановҡа.

1-се Башҡорт кавалерия полкы менән ирекле отрядтар Колчак фронтының стратегик яҡтан мөһим урынында оборона тотоп тороуҙарына ҡарамаҫтан, аҡтар башҡорт ғәскәрҙәренә ҡорал менән ярҙам итергә теләмәй. Ауыр хәлдә булыуҙарына ҡарамаҫтан 1-се Башҡорт кавалерия полкы һәм ирекле отрядтар ҡыҙылдар менән аяуһыҙ һуғыша. *“Богоявленский участок полк Карамышева имеет стычки в районе Стерлитамака но не имея оружия и патронов всегда бывает вынужденно отступать на исходный пункт. Полк категорически требует винтовки, шашки, патроны и пулеметы заявляя, что они не получив их далее не будут в состоянии оказывать абсолютно никакого сопротивления. Мелеузовский участок 23 часа 6 января. Зирган занят нашим отрядом устанавливается телеграфная связь. Красные бежали при появлении дозоров. По рассказам жителей у красных были два пулемета. По непроверенным сведениям под Аллагуватовым идет бой полка Карамышева.*

*Разведчики красных стали появляться по близости Мелеуза”*, - тип хәбәр итә 1919 йылдың 7 ғинуарында Зәки Вәлидиҙең адъютанты подпоручик Әбдрәшитов Ырымбур ҡалаһына, Дутовтың армияһының штабына.

10 ғинуар көнө Зәки Вәлиди һуғыштарҙа үҙен яҡшы ҡыйыу сардар итеп күрһәткән эскадрон командиры корнет Муса Мортазинды 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры итеп тәғәйенләй, Мөхтәр Ҡаармышев Башҡорт ғәскәрҙәренең баш интенданты вазифаһына күсерелә. Ошо уҡ осорҙа Вәлиди бойороғо буйынса, Дутов ҡулы аҫтында булған башҡорт уҡсы полктары Аҡтүбә фронтынан ҡайта. 26 ғинуар бер урынға йыйылған ғәскәрҙәрҙән ҡабаттан Башҡорт корпусы тергеҙелә. Мортазиндың полк 1-се Башҡорт дивизияһын составына инә. Архив мәғлүмәттәре буйынса 1919 йылдың ғинуарында Мортазин полкының составы түбәндәгесә була:

“Состав 1-го кавалерийского полка 4-х эскадронного состава.

Командир полка корнет Муртазин.

Вр. помощник командира полка штаб-ротмистр Ямбулатов

Командир 1-го эскадрона поручик Измаилов

Командир 2-го эскадрона прапорщик Муртазин

Командир 3-го эскадрона поручик Ганера

Командир 4-го эскадрона штаб-ротмистр Ямбулатов

Около 350 сабель, 2 пулемета.

Солдат в полку:

1-й эскадрон – 80 чел.

2-й эскадрон – 80 чел.

3-й эскадрон – 70 чел.

4-й эскадрон – 105 чел. Всего 335 человек”.

1919 йылдың 19–20 февралендә Башҡорт корпусы ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, башҡорт полктарынан аҡтарға ҡаршы төркөм ойоштороло. Ошо төркөмгә 1-се Башҡорт кавалерия полкы ла инә. Әммә оҙаҡламай, 1-се Ҡыҙыл Армия командованиеһы башҡорт полктарын Пенза уҡсы дивизияһының тылына күсергә бойора. Фронт һыҙығында Муса Мортазиндың ғына полкы тороп ҡала. Ул ҡыҙылдарҙың Смоленск полкы менән бергә Тамъян-Ҡатай кантонында аҡтарға ҡаршы фронт тота. Ләкин тиҙҙән башҡорт полктарын көсләп ҡоралһыҙландыралар, ҡар-

шылыҡ күрһәткәндәрен аталар, тигән хәбәр фронт һыҙығындағы Мортазин егеттәрен лә килеп етә. Ҡыҙыл Армияның яман ҡыланышына ҡаршылыҡ күрһәтеп, ҡайһы бер башҡорт частары (2-се Башҡорт кавалерия полкының эскадроны, 1-се Башҡорт уҡсы полкының батальоны) кире актар яғына сыға. Йыйын әтрәғәләмдән торған Ҡыҙыл Армия һалдаттары, башҡорттарҙан үс алырға тотона – ябай ауыл халҡын талай, ыҙа сиктерә башлай. Бер һүҙ менән әйткәндә, ҡөһөрҙө ябай башҡорт халҡына төшөрә. Ошо мәлдә Муса Мортазиндың полкы башҡорттарҙың берҙән-бер яҡлаусыһы, терәге була. Тиҙҙән ярһыу сардарҙың түҙер әмәле ҡалмай.

*“Башҡорт кавалерия полкы сигенергә теләмәһә лә бригада командованиеһы уға тылға күсергә бойороҡ бирҙе, һәм, шул әмергә буйһоноп, полк 28 мартта Билал ауылына, Смоленск полкы торған тирәгә, барып урынлашты. Полкты смоленсылар хас дошман һымаҡ күреп ҡаршыланы. Башҡорт отряды бында уларҙың урындағы халыҡты йәберләүенең бик күп миҫалдарына шаһит булды. Тағы ҡотороноп конфискация үткәреүҙәр, контрибуция һалыуҙар башланды. смоленсылар, бәйһеҙ шашынып, халыҡты ҡан илатты”*, – тип яҙа Муса Мортазин.

Түҙемлеге ҡалмаған Башҡорт кавалерия полкы 23 март



көнө ҡыҙылдарҙы туҙҙырып, ҡоралһыҙландыра. Мортазин был турала бригада командованиеһына хәбәр итә. Ҡото алынған бригада штабы 40 саҡырым тылға – Кананикольскийға һыпыртыу яғын ҡарай. Башҡорт кавалерия полкы тарафынан ебәрелгән делегация атыла. Бер нисә көндән 20-се дивизияның 1-се бригадаһы частары, бергә тупланып, Башҡорт кавалерия полкына һөжүм башлай. Аҡ казактар, фронт һыҙығының был яғында низағлашыу, хатта ҡораллы бәрелеш барыуын тиҙ генә һиҙеп ҡалып, башҡорт полкын үҙҙәре яғына сығарыу тураһында һөйләшеү өсөн Мортазинға делегация ебәрә. Ике ут эсендә ҡалған полк ирекһеҙҙән аҡтар яғына сығып китә.

Аҡтар 1-се полкты ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡа индерергә тырыша, Стәрлетамаҡ яғына сигенгән ҡыҙылдарҙың юлын киҫергә бойора. Ләкин Мортазин төрлө һылтауҙар менән бойоroҡтарын үтәүҙән баш тарта. Ул үҙ полкы менән Белорет ҡалаһына барып урынлаша. Бында аҡтар яғындағы башҡорт һалдаттарын эҙләп үҙ полкына туплай башлай. Муса Мортазин Белорет ҡалаһында апрелдең урталарынан алып майҙың аҙағына тиклем тора, йәғни үҙенең һалдаттарына ай ярым буйынса ял итергә, полкты яңы яугирҙар тулыландырырға мөмкинлек ала.

1919 йылдың июнь башында улар Стәрлетамаҡҡа ҡалаһына күсә. Һамар ҡалаһында Көнсығыш фронттың Көньяҡ төркөмө штабында Башревкомдың вәкиле булып торған Муллайән Хәлиҡов *“По сведениям помплитпреда Фахретдинова, двумя башкирскими отрядами Узбеков и Муртазин действуют против 20-й дивизии, всего тысячи штыков…”*, – тип хәбәр итә Вәлидигә. Тимәк аҡтар яғында Муса Мортазин бер үҙе генә түгел, февраль айында ҡыҙылдар яғына сыҡмай ҡалған башҡорт офицеры, поручик Шаһибәк Үзбәков менән бергә булған (аҙаҡ Ш.Узбәков Урал казактары менән Ҡырымға китеп, Врангель армияһында хеҙмәт итә һәм 1920 йылда һәләк була).

Стәрлетамаҡта Мортазин полкы тағы 15 көн тирәһе әҙерлек үтә, һалдаттар һәм ҡоралдар менән тулыландырыла. Күпләп башҡорттар йәшәгән районда айырым фронт һыҙығында урынлашыуҙан файҙаланып, Мортазин үҙ полкына тағы күберәк һалдаттар тупларға мөмкинлек ала. Күрше казак частарындағы башҡорт һалдаттары Мортазиндың полкына күсә башлай. Ошо рәүешле 1919 йылдың июнендә ғәййәр сардар үҙенең полкын

бригада кимәленә үҫтереп ебәрә.

*“Июнь аҙағына бригаданы ойоштороуҙы тамалап һәм йәйәүле дивизион да төҙөп алып, 4000 самаһы кешеле Башҡорт кавалерия бригадаһы 10 июлгә тиклем Ағиҙел буйында һаҡта торҙо, был тирәнән ҡыҙылдарҙың разведкаһын үткәрмәне”*, – тип яҙа Мортазин.

Сағыштырып ҡарағыҙ: ошо осорҙа, ҡыҙылдар яғында Көньяҡ фронтта һуғышҡан Башҡорт кавалерия дивизияһының иҫәбе өс мең кешегә лә тулмай. Ә Муса Мортазин аҡтар яғында 4000 тирәһе кешенән торған бригада ойоштороуға өлгәшә. Ошоноң менән ул Колчак армияһы частарында һибелгән башҡорт һалдаттарының байтағын бер ғәскәргә туплауға өлгәшә.

Бригада кимәленә үҫеп еткән Мортазин полкы хәҙер аҡтарҙың фармандарын бөтөнләй һанға һуҡмай башлай. 1919 йылдың июлендә ҡыҙылдар һөжүмгә күскәс, уларға ҡаршы сығырға, тип Колчак командованиеһы күпме генә бойороҡтар бирһә лә, Мортазин ҡыҙылдарға артыҡ ҡаршылыҡ күрһәтмәй сигенә, йә булмаһа бәреләштән тайпыла. Мортазиндың был ҡыланышынан асыуы ҡабарған 5-се корпус командиры Эллерс-Усов уны Әбйәлил ауылына, корпустың штабына саҡыра. 8 августа Мортазин, Әбйәлилгә барып, генерал менән низағлашып китә, револьверҙан уны яралай. Иртәһенә бригадаһы менән килеп баҫып, корпус штабының канцелярияһын, арсеналынан 3000 мең винтовкаһын алып китә.

17 августа мөнәсәбәттәрҙе көйләү маҡсатында корпус командиры генерал Бакич Мортазинды үҙенә саҡыра. Әммә Башҡорт кавалерия бригадаһы 18 августа Березовка ауылы янында корпустың ике полкын туҙҙырып, штабын баҫып ала.

Ошо мәлдә Башревком ярҙамында (бригадаға Таһир Имаҡов килә) Муса Мортазин ҡыҙылдар яғына кире сығыу тураһында һөйләшеүҙәр башлай. 1919 йылдың февраль-март айҙарындағы ваҡиғаларҙан һуң ҡыҙылдарҙан артыҡ яҡшылыҡ көтмәгән комбриг Ҡыҙыл Армия яғына сығыу өсөн ҡәтғи шарттар ҡуя:

1. Башҡорт һалдаттарын һәм командирҙарын ҡораһыҙландырмаҫҡа һәм атмаҫҡа;

2. Бригаданы ҡабул итеү өсөн башҡорт һәм совет командованиеһы вәкилдәре менән бергә ике-өс башҡорт совет пол-

кын ҡуйырға, сөнки башҡорттар март айындағы атыуҙарҙан һуң рус командованиеһына ышанмай

3. Полктарҙы Колчакка ҡаршы ебәреү мөмкинлеге булмаһа, уларҙы заводтарға һәм күсенеү пункттарына урынлаштырмаҫҡа, йә Верхнеуральскийға ебәрергә, йә Стәрлетамаҡта ҡалдырырға.

Ошо шарттар үтәлмәһә, бригаданы ҡаҙаҡ далаларына алып китәм, – тип иҫкәртеп ҡуя ҡыҙылдарҙы Мортазин. 1919 йылдың башында Башҡорт корпусын ҡоралһыҙландырып хата яһағанын аңлаған Ҡыҙыл Армия командованиеһы (был хатаны улар 1919 йылдың мартында Колчак армияһы контрһөжүмгә күскән мәлдә, һуғышсан башҡорт ғәскәрҙәре ярҙамына мохтаж саҡта, яҡшы аңлай) Муса Мортазиндың шарттары менән риза була. Хәҙер инде ҡыҙылдар Башҡорт кавалерия бригадаһын үҙ файҙаһына ҡулланыуҙың әһәмиәтен бик яҡшы төшөнә.

Мортазиндың ғәскәре ҡыҙылдар яғында Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы статусын ала. Йәғни команда составы, полктар үҙгәрешһеҙ ҡалдырыла. Зәки Вәлиди Мортазин бригадаһын башҡорт ғәскәрҙәре составына ҡушыу ниәтендә була. Ул яңы атлы бригаданы Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһының 2-се бригадаһы, тип иғлан итә. Әммә 1-се армия командованиеһы үҙенсә эшләй, йәғни башҡорт ғәскәрҙәренең бер урынға тупланыуына юл ҡуймай.

1919 йылдың август аҙағында Мортазин бригадаһы ҡыҙылдарҙың 24-се уҡсы дивизияһы составында аҡтарҙың Көньяҡ армияһы частарын туҙҙыра. Адамский һәм Бриены ҡасабаларына (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең көнсығышында) һөжүм итеп, Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы аҡтарҙың өс йөҙгә яҡын һалдатын әсиргә ала, 20 ылауын ҡулға төшөрә.

*“Һуғыштарҙа арыған бригада, ҡаршыһында дошмандың йүнле көсө булмағас, тылға, Башҡортостанға, Ишмөхәмәт – Туртөкөй төбәгенә ҡайтарылды, унан, резервтағы 1-се армия ҡарамағына бирелеп, Урал фронтына – Ырымбур – Ҡарғалы (Сәйет биҫтәһе) тирәһенә күсерелде.*

*Бында өс көн ял иткәс, бригада иң яҡшы хәрби составынан, айырыуса йәштәр араһынан, политработниктар һайлап алды һәм, 3 мең кешене 2 меңгә генә ҡалдырып, бер аҙ кейем-һалым алып, тулы әҙерлек хәленә килде”*, – тип яҙа Муса Мортазин. Ҡарғалыла торған сағында ҡыҙылдар (24-се дивизия) Башҡорт

бригадаһында үҙҙәренең тәьҫирен нығытыу маҡсатында яңы политработниктар тәғәйенләй. Шуларҙың береһе – 24-се дивизияның сәйәси идаралығында агитатор булыр йөрөгән Ғәли Камалов хәтирәләрендә (1956 йылда яҙған) бына нимә тип яҙа: “*В августе 1919 года из стана белых на сторону Советской власти перешла Башкирская кавалерийская бригада Мусы Муртазина. И я с несколькими товарищами был направлен в эту бригаду, которая находилась в то время в селе Каргалы, близ Оренбурга. Выехали туда сразу же по получении назначения, ибо дорога предстояла долгая и трудная. Настроение было мрачное, всех точила одна и та же мысль: что ждет нас в этой столь нашумевшей муртазинской бригаде. К концу вторых суток показалась деревня, и через несколько шагов мы услышали возглас: “Эй, кто идет?” Наш возчик остановил лошадей. Из-за кучи кизяка появился человек. Мы предъявили ему наши удостоверения. Кто-то из нас зажег спичку, и мы смогли разглядеть подошедшего человека. Это был невысокий, средних лет мужчина, одетый в несколько странную военную форму синего цвета. Как потом мы выяснили это была японская военная одежда, которую носила почти вся бригада.*

*Проверив документы, постовой проводил нас к штабу. На крыльце нас встретил начальник штаба бригады Я. З. Рамеев. Поздоровавшись, вошли в штаб, где проходило совещание командиров. За огромным столом сидело около 20 человек. Большинство из них было одето в красноармейские гимнастерки и в казачьи брюки с лампасами. Внимание обращал на себя здоровый, высокий мужчина с узкими, живыми глазами, одетый в шлем, на который была нашита звезда ярко-малинового цвета. Это и был командир бригады Муса Муртазин. Нас представили каждому из сидящих. Здесь были командир 1-го полка Усман Янбулатов, его заместитель Л. С. Эрадзе, командир 2-го полка Абдрахманов, начальник отдела снабжения бригады Ахмадей Муртазин и другие.*

*После знакомства заговорил на башкирском языке М. Муртазин. Приветствовав наше прибытие в бригаду, выразил надежду, что мы быстро найдем общий язык с командным составом бригады и поможем им в создании сознательной революционной дисциплины среди башкирских конников. Он ознакомил нас с состоянием бригады. Последняя готовилась к*

*боям. Приводились в порядок оружие, снаряжение, конский состав (ковка лошадей) и т. д. Бригада представляла довольно внушительную силу: 1800 сабель, один пеший дивизион, два орудия, 8 пулеметов. Основной контингент состоял из красноармейцев башкирской национальности восточных кантонов Башкирии."*

1919 йылдың октябрь башында Башҡорт кавалерия бригадаһы Урал фронтына күсерелеп, ҡыҙылдарҙың 4-се армияһына буйһондорола. Бында Мортазин атлылары казак генералдары Толстой, Беловтарҙың армияларына ҡаршы һуғыша. Аҡтарҙы ҡыуып, Миргород, Аҡбулаҡ, Нефрашанка, Чунгай, Ҡормантай ауылдары янында ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнаша. Бригада 1919 йылдың ноябрь-декабрендә Төркөстан фронтының Урал-Гурьев операцияһында ҡатнаша. Ошо хәрби операция һөҙөмтәһендә аҡтарҙың Урал армияһы туҙҙырыла. Тар-мар ителгән ғәскәрҙәренең ҡалдыҡтары Гурьев ҡалаһына ҡаса.

Өҙлөкһөҙ һуғыштар, һыуыҡтар, тиф сире арҡаһында Башҡорт кавалерия бригадаһы 1919 йылдың декабрь аҙағына бик ауыр хәлдә була. "*Декабрь аҙағында бригада, Ҡарғалыға күсерелеп, яраларын төҙәтергә кереште. Ә яралылар күп ине... Медицина персоналының, дарыуҙарҙың, эшсе ҡулының етешмәүе бәкәлгә һуға. Һуғыштарҙа йөрөгәндә бригада тифлы халыҡ менән аралашмай булдыра алманы. Эпидемиянан йөҙәрләгән ҡыҙыл армеец һәләк булды: яугирҙарыбыҙҙың 50–70 проценты тиф менән ауырыны. Уларҙы ебәрергә урын юҡ ине, үҙ тылыбыҙҙа тотто*к.

*Башҡорт бригадаһы эпидемиянан һәм һуғыштарҙан ҙур юғалтыуҙар кисерҙе. 1-се армия инспекторы (Свешников) 30 декабрҙә армия штабының оператив бүлегенә биргән белдермәһендә былай тип яҙа (№ 60/с):*

*"Армия буйынса бирелгән приказ (№ 455) нигеҙендә, 5-се кавалерия дивизияһына ваҡытлыса буйһондоролған һәм 2-се бригадаға ҡушыласаҡ Мортазиндың Башҡорт кавалерия бригадаһы түбәндәге составта килде: командирҙар – 56, административ состав – 10, ҡылыслылар – 403, ҡоралһыҙ һыбайлылар – 77, строевой хеҙмәткә яраҡһыҙҙар – 249, аттар – 377, пулеметтар – 12, ылау – 124". Был донесениянан шул күренә: бригада үҙенең 60 процент самаһы составын юғалтҡан (Урал фронтында һуғыш операциялары башланған саҡта 2000 кеше*

*бар ине)"*, – тип яҙа Муса Мортазин үҙенең китабында.

1-се армия командованиеһы 60% кешеһен юғалтҡан Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһын 5-се дивизияға ҡушып, айырым милли бригада булараҡ бөтөрөргә ҡарар итә. Аптрашта ҡалған Муса Мортазин хәлде аңлатып, Башҡортостандың хәрби комиссары Зәки Вәлидигә түбәндәге рапортын ебәрә:

**БАШВОЕНКОМУ тов. ВАЛИДОВУ**

**№ 0999 / в** **1919 года 29 декабря**
**от Нач. брига Отд. Башк.**

РАПОРТ

Доношу, что вверенная мне бригада до сего времени существовала, как отдельная Башкирская бригада; На основание приказа тов. Троцкого и по личному Вашему приказу бригада не входила и не должна была войти в состав дивизии, в особенности русскую, а должна была составлять, как отдельную Бригаду Башкирского войска; И поэтому приказом по 1-ой Революц. Армии она была отправлена для ликвидации Уральского фр-нта, как отдельная единица и оперативные приказы и задачи давались ей как отдельной части, а так же и выполнялись как отдельной частью Башкирского Советского войска. А теперь, когда бригада, не смотря на все недостатки, чувствуя острую нужду во всем, не получая ни в чем и ни по каким отраслям и ни с какой стороны помощи, среди холода, голода под пулями и снарядами неприятеля, организовала все, что требуется отдельной бригаде, исполнила честно и в точности возложенную на нее задачу, по необъяснимым причинам, вливают ее в состав 5 кавал. дивизии. Если точнее выразить – разрушают то, что было создано трудами сознательных работников. И все эти труды идут насмарку. Не оценили наши труды, что слишком обидно для всего состава бригады. По влитие бригады в состав дивизии много работников – работников честных добросовестных остаются без должности т. к. штат не отдельной бригады слишком мал и скуден, что же скажут и какими глазами посмотрят на меня эти работники, получив понижение без всяких на то причин.

Поэтому, не желая получить понижение и быть влитым в русскую дивизию, прошу Вашего ходатайства Пред. тов. Троц-

ким и тов. Командиром фронта о разрешении оставить вверенную мне бригаду и пополнения, Отдельную Башкирскую и о переводе ее в Башкирскую дивизию или же оставить ее в временном подчинении 1-ой Армии, но как отдельную бригаду.

**Начальник Бригады Муртазин**
**Врид. Военкомбрига Богуславский**
**Врид. Наштабриг Сагитов**

Зәки Вәлиди был мәсьәләне тиҙ арала Ленин һәм Троцкийға еткерә. Ләкин Төркөстан фронты командующийы М. Фрунзе Башҡорт бригадаһын таратыу яғын ҡайыра: “*Ознакомившись с положением дела в кавалерийской бригаде Муртазина, включенный в состав 5-й кавдивизии, стало наиболее целесообразным эту бригаду расформировать. Ввиду удобства, связанного с отдачей приказа фронтом, прошу соответствующего распоряжения от Реввоенсовета Республики. Основание к расформированию есть*”, – тип яҙа ул Ленинға.

Фрунзе Башҡорт бригадаһын үҙ фарманы менән 5-се дивизияға ҡушһа ла, уны таратырға итергә баҙнат итмәй. Реввоенсоветтың рөхсәтен һораған. Фрунзе Ленинға ебәргән телеграммаһын былай, тип дауам итә: “*Башкирский ревком считает эту бригаду национальным формированием и ходатайствует перед центром об исключении ее из дивизии. Я же ответил, что бригада в состав башкирской армии включена быть не может, так как это превысит установленную соглашением для Башкирии норму*”. Бында һүҙ 1919 йылдың 20 мартындағы килешеү тураһында бара. Ул килешеү буйынса Башҡорт армияһы бер кавалерия дивизияһы һәм бер уҡсы бригадаһынан торорға тейеш була. Шуға күрә лә Фрунзе, Мортазиндың кавалерия бригадаһын артыҡ һанай. Ул Башҡорт бригадаһын бөтөрөп, уның яугирҙары менән Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәрен тулыландырырға тәҡдим итә.

Ләкин Башҡортостан хәрби комиссары Зәки Вәлиди Троцкий менән Ленинды Мортазин бригадаһын таратмаҫҡа күндерә. Бригада 1919 йылдың декабренан алып 1920 йылдың апрель аҙағына тиклем Ырымбур янында, Ҡарғалыла тора. Ял итә, сафтарын тулыландыра.

Большевиктар Башҡортостанға киң автономия хоҡуҡтары

биреүгә ҡарамаҫтан, тәүҙән үк уның хәрби көстәрен ситтә тотоу сәйәсәтен алып бара. 1919 йылдың июнендә Саранскийҙан Башҡортостанға ҡайтырға торған башҡорт полктарын, Троцкий Көньяҡ фронтҡа (Украинаға оҙата) Деникинға ҡаршы ебәрә. Көҙөн уның ҡалдыҡтарын Петроградҡа ташлай. Шулай уҡ 1919 йылдың йәйендә Бәләбәйҙә ойошторолған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы Ленин менән Троцкийҙың бойороғо буйынса Петроградҡа оҙатыла. Шуға күрә Ҡыҙыл Армия командованиеһы Мортазин бригадаһын да нисектә булһа Башҡортостандан йыраҡыраҡ ебәрергә уйлай. Сөнки Үҙәк Совет власы Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын сикләү эшенә тотона.

Был йәһәттән урындағы большевиктар әүҙемлек күрһәтә. Мәскәүҙән ебәрелгән вәкил Сергеев Башревкомдың вәкәләттәренә тығыла башлай, асыҡтан-асыҡ башҡорт эшмәкәрҙәренә ҡаршылыҡ күрһәтә. Ошоноң һөҙөмтәһендә 1920 йылдың ғинуарында Башревком менән Баш. обком араһында конфликт сыға. Хөкүмәт рәйесе Харис Йомағолов обком тарафынан ҡуйылған БашЧК рәйесен һәм бер-нисә провакаторҙарҙы ҡулға алырға бойора. Башревком Ырымбур янында торған Башҡорт кавалерия бригадаһына хәрби көс булараҡ өмөтөн бағлай. Әммә Башҡортостандағы хәлдәрҙе ишетеү менән Фрунзе бойороғо буйынса Муса Мортазинды Ырымбур ҡалаһына саҡыртып алып, һаҡ аҫтына алалар.

Өс айҙан Мортазиндың бригадаһын Башҡортостандан олаҡтырыуға бер сәбәп табыла. Ул да булһа Польша менән һуғыш. “*1920 йылдың 29 апрелендә Башҡорт бригадаһы Польша фронтына юл алды. Ул вагондарға Ташкент тимер юлының Ново-Сергиевка станцияһында тейәлде һәм 7 майҙа Бобровица станцияһына (Нежин ҡалаһы районына) килеп етте. Бригада составында 27-се, 28-се полктар һәм 800 кешелек йәйәүле дивизион, 200 ҡылыс һәм 600 ат, 15 пулемет бар ине*”, – тип яҙа Мортазин.

Бригада 9 майҙан 12-се армия составында поляктарға ҡаршы һуғыш башлай. 16 майҙа Мортазин бригадаһына Новгород губернаһынан 900 кешелек 1-се Башҡорт кавалерия полкы килеп ҡушыла (1-се кавполк Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы полктарынан ойошторола, ә дивизияның үҙе расформировать ителә). Бынан тыш, Стәрлетамаҡтан Башрев-

ком тарафынан бригадаға тағы 100 һалдат ебәреләә.

Шулай итеп, Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы өс полклы (1-се, 27-се, 28-се полктар) ғәскәри часҡа үҫеп етә. Бригада 12-се армияның 7-се кавдивизияһы составында Киев операцияһында әүҙем ҡатнаша. Ҡанлы яуҙар барышында байтаҡ ҡына юғалтыуҙар кисерә. Һуғышта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн комбриг Мортазин алтын сәғәт, көмөш ҡылыс менән бүләкләнә, ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була (1920, 1921 йылдарҙа)

Реввоенсоветтың 524-се һанлы фарманында уның ҡаһарманлыҡтары тураһында былай тиелгән: “Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана …Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының командиры Муса Лут улы Мортазин иптәш, түбәндәге күрһәтелгән батырлығы өсөн: Айырым кавалерия комбригы Мортазин иптәштең башлап ебәреүе менән һәм ул үҙе уртаһында ҡайнаған хәлдә 1920 йылдың 5 февралендә дошман ҡулындағы Пилява ауылына сапҡын яһалды, шуның һөҙөмтәһендә киҫкен алыштарҙан һуң Пилява ауылы һәм утары баҫып алынды. Был яуҙа 196 әсир, 30 ат, 8 пулемет, 200 снаряд һәм ике төҙөк орудие ҡулға төшөп, был ҡоралдарҙан шунда уҡ сигенеп барыусы дошман башына ут яуҙырылды. Шул уҡ көндә Горнастайполь ауылын алғанда Мортазин иптәш, үҙ артынан ҡыҙылармеецтарҙы әйҙәп, бер нисә тапҡыр көслө контратакаларҙы ҡаршыланы һәм, бөтә яҡтан да дошман яуы менән уратылып алынған килеш, үҙенең бәләкәй генә төркөмө менән дошманға ҡаршы һөжүмгә ташланды, уның сафтарын өҙөп һәм уны ҙур юғалтыуҙарға дусар итеп, дошмандың сафтарында паника булдырҙы. Ошоноң арҡаһында беҙҙең полктарға бергә тупланырға һәм хәл иткес һөжүмгә күсергә мөмкинлек тыуҙы. Һөжүм ваҡытында дошман бөтөнләй ҡыйратылып, Горнастайполь ауылында беҙҙең ғәскәр тулыһынса нығынды. Башында Мортазин иптәш торған бригада 18 июндә, Зарудье ауылы эргәһендә һуғыш операциялары алып барып һәм үҙенән көслөрәк дошманға ҡаршы бер нисә тапҡыр атакаға күсеп, Пинязевичи ауылына сапҡын яһаны, шуның менән дошман сафтарын ныҡ тарҡатып, 1-се Подполян полкының бер батальонын һәм бер һыбайлы эскадронын юҡ итте. Сапҡын ваҡытында 173 казак әсиргә төштө, 150 ат алынды.

20 июндә Башҡорт кавалерия бригадаһы, Мортазин иптәш

етәкселегендә егерме сәғәтлек өҙлөкһөҙ һуғыштан һуң, Игнатополь ауылына һәм станцияһына бәреп керҙе. 21 июндә дошман, 10 мең штык туплап, артиллерия, бронепоезд һәм кавалерия булышлығында яңынан бригада өҫтөнә ябырылды. Шул саҡ бригада һәм башҡа кавалерия частары ла ҡаушап ҡалғайны, ләкин Мортазин иптәштең ҡаһарманлығы, ҡыйыулығы һәм ташып торған көс ҡеүәте арҡаһында шунда уҡ ҡабат ныҡлы тәртип урынлаштырылды. Урман һәм һаҙ араһынан кавбригадаға иркенләп һуғышырға мөмкин булмағанлыҡтан, барлыҡ частар артҡа күсерелде, а артты ҡаплау өсөн туранан-тура Мортазин иптәш командалығында 28-се кавполк ҡалдырылды. Комсостав һәм ҡыҙылармеецтар араһындағы ҙур юғалтыуҙарға ла ҡарамаҫтан, полк һуғыша-һуғыша ашыҡмай ғына артҡа сигенде һәм, бригаданың башҡа частары менән бергә ҡушылып, Мортазин иптәш тарафынан яңынан һуғышҡа күтәрелде. Уның етәкселегендә үҙенән күп тапҡыр көслө дошман өҫтөнә һөжүмгә ташланып, полк һөжүмде кире ҡаҡты, дошмандарҙан Игнатополь ауылын һәм станцияһын таҙартты, дошман ҡулына эләккән һәм яраланған ҡыҙылармеецтарҙы әсирлектән ҡотҡарҙы”.

Киев операцияһында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Мортазин бригадаһынан 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры Рамаҙан Шәрипов, уның ярҙамсыһы Василий Тихомиров, 27-се Башҡорт полкы командиры ярҙамсыһы Әхмәҙей Зекеров, 27-се полктың 1-се эскадроны командиры Ғәббәс Рыҫҡолов, 4-се эскадрон командиры Шәмсетдин Ғафаров, 1-се эскадрон командиры ярҙамсыһы Хәлфетдин Фәттәхетдинов, 4-се эскадрондың взвод командиры Заһиҙулла Ҡаҙнабаев, 28-се Башҡорт полкы командиры ярҙамсыһы Фәттәх Ибраһимов, бригада комиссарының ярҙасыһы Шәкир Әшрәпов, бригада штабы коменданты Ғиззәтулла Хаҡбирҙиндар Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

13 июлдә Муса Мортазин командалығында 12-се армияның атлы төркөмө ойошторола. Уның составында Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы, 25-се кавалерия бригадаһы, Дон-Кубан, Суров, 7-се Йыйылма һәм 59-сы кавалерия полктары була. 18 июндә атлы төркөм Стырь йылғаһы аша сыҡҡанда ҙур юғалтыуҙар кисерә. Ҡыҙыл кавалерия поляктарҙың позицияларын өҙә алмай, сөнки дошман Беренсе донъя һуғышынан ҡалған окоп-

тарҙа нығынған була. 23 июнь атлы төркөм менән етәкселек Голиковҡа тапшырыла. Ә Мортазин атлы төркөм менән 24-се уҡсы дивизия араһында дошман тарафынан өҙөлгән фронтты ябыу өсөн ебәрелә. 5 август көнө Башҡорт бригадаһы атлы төркөм составында Ковель ҡалаһын алыуҙа ҡатнаша. Беренсе булып ҡалаға 27-се Башҡорт полкы һәм 25-се кавбригаданың 1-се полкы бәреп инә.

Был ваҡыт Башҡортостанда Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башревком ВЦИК-тың декретына ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдереп, эштән китә, Бөрйән-Түңгәүер кантонында башҡорттар советтарға ҡаршы баш күтәрә. Республикалағы ваҡиғалар тураһында фронтҡа хәбәр килеп етә. Хәлде ишетеү менән комбриг Мортазин, отпуск алып, 12 августа Башҡортостанға ҡайтып китә.

Ваҡытлыса командир итеп бригаданың комиссары Яҡуп Кәлмитев тәғәйенләнә. Яңы командир булдыҡһыҙ булып сыға. Шуға бер аҙнан уны командалыҡтан алып, 12-се армияның махсус бүлегенә оҙаталар. Уның урынына 2-се Дон-Кубан полкы командиры Александр Горбатов ҡуйыла.

Ҡыҙыл Армия дошманды тиҙ ҡыуа. Ошо арҡала ғәскәрҙәрҙең ылау, тәьминәт бүлектәре уларҙың артынан өлгөрә алмай. Ғөмүмән, фронтта ғәскәрҙәрҙе аҙыҡ-түлек, һуғыш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итеү эшендә ҙур ҡыйынлыҡтар барлыҡҡа килә. Бынан тыш бер туҡтауһыҙ һуғыш, юғалтыуҙар кисергән ғәскәрҙәр ныҡ хәлһеҙләнә төшә.

28-се Башҡорт полкы командиры яугирҙарға әҙерәк кенә булһа ла ял һорап, бригада командалығына рапорт яҙа: “*Вверенный мне полк за 2 месяца боевой жизни теряет свою боевую способность ввиду того, что люди измучены, потеря в полку больше половины, старые бойцы все переранены или убиты…*”. 17 августа 28-се полктың яугирҙары артабан хәрәкәт итеүҙән баш тарта. *“люди просят дать им хотя бы передохнуть и поесть, потому что 2-е сутки ничего не имели во рту”*, – тип хәбәр итә полк командиры.

Бындай хәл 12-се армияның бөтә ғәскәрҙәрендә лә күҙәтелә. 13 августа командарм Көньяк-Көнбайыш фронттың штабына былай тип яҙа: “*Вследствие безостановочных боев, движения, плохого снабжения и пополнения дивизии, входящие в состав армии по своему состоянию требуют экстренных*

*мер... Сведения о боесоставе далеко несоответствуют действительности, так, например, 7-я дивизия по официальным донесениям к 1-му августа имеет 2317 бойцов, в действительности 11 августа по личному докладу начдива и комбригов в полках всего 30–40 штыков и вся дивизия насчитывает всего 700 штыков.* ***Башкирская бригада – 300 сабель,*** *2-я кавбригада – 200 сабель*".

30 августан Башҡорт кавалерия бригадаһы 12-се армияның һул флангыһында хәрәкәт итә. Оператив яҡтан 24-се уҡсы дивизия начальнигына буйһона. Ҡыҙыл Армия поляк ғәскәрҙәрен ҡыҫырыҡлап, Варшаваға тиклем килеп етә. Әммә тиҙҙән, генерал Пильсудский өҫтәмә көстәр туплап, Ҡыҙыл Армия өҫтөнә ябырыла. 19 сентябрҙән беҙҙең ғәскәрҙәр сигенә башлай. Башҡорт кавбригадаһы башҡа частарҙан айырмалы рәүештә, поляктар менән һуғыша-һуғыша, ойошҡанлыҡ менән сигенә. Башҡорт атлыларына 24-се уҡсы "тимер" дивизияның артын ҡаплап барыу бурысы йөкмәтелә.

1920 йылдың 18 октябрендә Польша менән солох төҙөлгәс, Башҡорт кавалерия бригадаһы поляктар менән бергә ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡан С.В.Петлюраның украин армияһына ҡаршы ташлана. 15 ноябрь көнө бригаданың 28-се, 1-се полктары Литин ҡалаһын ала. 28 ноябрь Лезнево ауылы янында Петлюраның 150 һалдаты, 2 пулеметы, 10 ылауы башҡорт атлылары ҡулға төшә. 20 ноябрь Башҡорт бригадаһы дошмандың Кличины ауылында торған бер уҡсы дивизияһы һәм кавполкына һөжүм итә. Дошман башҡорттарҙы күҙ асҡыһыҙ ут менән ҡаршы ала. Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙекеләр ауылға бәреп инә. Ҡаты һуғыш барышында дошмандың ғәскәрҙәре ҡыйратылып, ҡыуып таратыла. Петлюровсылар 150 кешеһен юғатла, 300 кеше әсиргә төшә. 6 орудие, 20 пулемет һәм дивизия штабы Башҡорт бригадаһының ҡулына төшә.

1920 йылдың август аҙағынан Башҡорт кавалерия бригадаһы менән етәкселек иткән Александр Горбатов үҙенең "Годы и войны" исемле автобиографик китабында башҡорт яугирҙарының ҡаһарманлығын юғары баһалай. Ул былай тип яҙа: "*Башкирской бригадой в годы войны было проведено много удачных боёв против белогвардейцев и интервентов, и не только против войск Колчака и панско-помещичьей Польши, но также против петлюровских и других банд. Много башкир*

*отдало свою жизнь за дело революции. Среди них было множество отважных, преданных Советской власти красноармейцев и командиров, которые всегда были готовы выполнить любой приказ и не щадили своею жизнь отстаивая дело Ленина. К сожалению, я не вёл тогда записей и забыл имена и фамилии многих отважных людей. Но некоторые имена врезались в мою память: это исключительно смелый, инициативный командир 27 го полка Файзулин Хусаметдин Шаранович (Хисаметдин Фәйзуллин – А.Я.), командир 1 го кавполка Ашранов (Шәкир Әшрәпов – А.Я.), неторопливый, расчётливый и отважный, также пользовавшийся всеобщим уважением, командир полка Муртазин (Ибраһим Мортазин – А.Я.) погиб смертью храбрых ещё до моего прибытия в бригаду, но был мне знаком так, как будто я с ним встречался, столько я слышал хорошего о нём от многих башкир; отважным воином был Гасапов Усман (Усман Ғайнанов – А.Я.), волевой, честный и боевой командир. Отличной репутацией пользовались политработники — комиссар бригады Кузьминский, комиссары полка Кучаев и Комалов Гали. Вся бригада хорошо знала фамилии своих отважных командиров эскадронов Ишмуратова, Заянчурина (Ғәҙелша Ейәнсурин – А.Я.), Казнобаева (Заһиҙулла Ҡаҙнабаев – А.Я.) и Гафурова (Шәмсетдин Ғафаров – А.Я.). А сколько ещё было людей, фамилий которых я не могу припомнить!*".

1920 йылдың ноябрендә Петлюраның армияһын ҡыйратыуҙа ҙур ҡаһарманлыҡтар күрһәткән Башҡорт кавалерия бригадаһының командирҙары һәм яугирҙары тағы ла Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Совет хөкүмәтенең юғары наградаһына комбриг Александр Горбатов, 1-се Башҡорт кавалерия полкынан 2-се эскадрон командиры Алексей Кудрявцев, атлы-пулемет взводы командиры Лоҡман Кучаев, 2-се эскадрондың старшинаһы Йыһанша Мәхмүтов, взвод командиры Зариф Фәхретдинов, полк адъютанты Леонид Пискунов, 1-се эскадрон старшинаһы Денис Белевич, взвод командиры ярҙамсыһы Абдулхалиҡ Миңлевәлиев, яугир Ғәметдин Ҡатаранов, бригаданың штабы ат ҡараусыһы (коноводы) Хәбибулла Ильясов, 27-се Башҡорт кавалерия полкы командиры Хисаметдин Фәйзуллин, 27-се полктың хәрби комиссары ярҙамсыһы Владимир Воробьев, 1-се эскадрон командиры Ғәҙелша Ейәнсурин, 2-се эскадрон командиры Трофим Фетисов, 4-се эскадрон коман-

диры Кинйәбай Ишмөхәмәтов, 3-сө эскадрондың взвод командиры Шәмсетдин Яҡшыгилдин, взвод командирҙары Ҡ. Ҡаһарманов, Байғужа Иманғолов, 4-се эскадрон старшинаһы Усман Шәйәхмәтов, 1-се эскадрон командиры Хәлфетдин Фәттәхетдинов, 1-се эскадрон яугирҙары Шәрәфетдин Мөхтәров, Йәләлетдин Фәйезов, пулемет командаһы яугиры Рәхмәтулла Абдуллин, 2-се эскадрон яугирҙары Ҡияметдин Ҡоҙаҡаев, Кәлимулла Ғатауллин лайыҡ була.

1920 йылдың авгусында Башҡортостанға ҡайтыу менән Муса Мортазин ихтилалды тиҙерәк артыҡ ҡорбандарһыҙ туҡтатыу өсөн бөтә көсөн һала. Яңы Башревкомға ышанмаған башҡорттар, Муса Мортазин ҡайтыу менән уны үҙенең яҡлаусыһы итеп күрә. Абруйлы сардарҙың Башҡортостанға ҡайтыуы ихтилалдың тамамланыуына ҙур булышлыҡ итә.

1920 йылдың декабренән Мортазин республиканың Хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссары булып эшләй. 1921 йылдың июнендә ул Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһының етәксеһе – Башҡортостандың Үҙәк Башҡарма Комитеты (БашЦИК) рәйесе итеп тәғәйенләнә. Шулай итеп, Башҡортостан өсөн иң ауыр осорҙа, Граждандар һуғышынан һуң хужалығы тарҡалып, ҡот осҡос аслыҡ ялмаған республика менән етәкселек итергә тура килә сардар Мортазинға.

Киләһе йылына, йәғни 1922 йылда, Мортазин хәрби белем алыу маҡсатында, Мәскәү Юғары Хәрби-педагогика мәктәбенә уҡырға китә. 1924 йылда, хәрби мәктәпте тамамлап, Эшсе-Крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының М.В.Фрунзе исемендәге Хәрби акакдемияһына уҡырға инә. 1927 йылда, академияны тамамлап, Ҡыҙыл Армияның Баш идаралығында резервта тора. Ошо йылда Мәскәүҙә “Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында” тип исемләнгән китабы баҫылып сыға.

1928 йылдың ғинуарынан 11-се кавалерия дивизияһының 3-сө бригадаһы командиры, 8-е кавалерия дивизияһының бригада командиры булып хеҙмәт итә. 1929 йылдың декабренән Мәскәүҙә Ҡыҙыл Армия Баш идаралығының Аттарҙы яңыртыу идаралығы инструкторы, 1931 йылдан ошо идаралыҡтың 2-се секторы начальнигы урынбаҫары, артабан 4-се, 2-се секторы начальнигы булып хеҙмәт итә. 1935 йылдың февраленән Аттар составын яңыртыу буйынса бүлектең 2-се бүлексәһе начальнигы була. Ошо уҡ йылдың декабрендә Муса Мортазинға ком-

бриг званиеһы бирелә.

Ҡаһарман сардар, легендар комбриг, башҡорт халҡының данлы улы Муса Мортазин 1937 йылда репрессиялана. 27 сентябрь көнө СССР Юғары Судының хәрби коллегияһы уны үлем язаһына хөкөм итә. Шул уҡ көндә атыла. 1956 йылдың 14 июлендә реабилитациялана.

Мортазин ойоштороған һәм 1920 йылдың августына тиклем командалыҡ иткән Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы ҙур юғалтыуҙар кисереп, кешеһе аҙ ҡалғанлыҡтан, 1920 йылдың 10 декабрендә 12-се армия командующийының фарманы менән ике полклы итеп үҙгәртелә, уларға 1-се һәм 2-се Башҡорт полктары исеме бирелә.

1921 йылдың яҙында Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы айырым ғәскәри берәмек булараҡ бөтөрөлә. "*Командармдың фарманы менән Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы 12-се дивизия (Петросовет исемендәге сик буйы дивизияһы) начальнигына буйһондоролдо, уның бойороғо буйынса бригада айырым-айырым дүрт эскадрон итеп үҙгәртелеп, Польша–Румыния дәүләт сиген һаҡларға тейеш ине. Ошо фарманды үтәү маҡсатында бригада дүрт эскадронға бүленде, уларға 15-се, 16-сы, 17-се һәм 18-се Айырым Башҡорт сик буйы эскадроны тигән исемдәр бирелде. 15-се эскадрон Каменец-Подольск, 16-сыһы – Могилев-Подольск, 17-сеһе – Рыбинцы, 18-сеһе Тирасполь ҡалаларына урынлаштырылды*", – тип яҙа үҙенең китабында Муса Мортазин.

1921 йылдың ноябрендә башҡорт эскадрондары сик буйынан алынып, 1-се атлы корпустың 2-се Червонный (Ҡыҙыл) казак дивизияһы ҡарамағына күсерелә. Бында, 15-се, 16-сы, 17-се башҡорт эскадрондарынан 12-се Червонный казак полкы ойошторола, ә 18-се эскадрон шул уҡ дивизияның 7-се Червонный казак полкына ҡушыла.

1922 йылда Башҡортостан хөкүмәте (БашЦИК) 12-се полкты шефлыҡҡа ала. Ошо уҡ йылдың яҙынан полктың клубында айына бер тапҡыр башҡорт телендә стена гәзите сығарыла. 1922 йылдың көҙөндә 12-се полктан, 200 башҡорт һалдаты, Польша һуғышында ҡатнашҡан элекке Башҡорт кавалерия бригадаһы яугирҙары демобилизациялана. Уларҙы 250 украин призывнигы алмаштыра.

1923 йылдың 12 ғинуарында Башҡортостан хөкүмәте 12-се

Башҡорт полкына Ҡыҙыл орден байрағы бүләк итә. Байраҡты 2-се дивизияның командиры тапшыра. Байраҡ менән бер бергә Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетының грамотаһы ла тапшырыла. Унда былай тиелә:

**12-му Башкирскому полку Червонного Казачества**

Центральный исполнительный Комитет Советской Башкирской Социалистической Республики, высоко оценивая подвиги красноармейцов, командного и политического состава, 12-го Башкирского полка Червонного Казачества, совершенные им в боях на польском фронте и польско-румынской границе, одержав бесчисленный ряд блестящих побед над врагами трудящихся, от имени Башкирской Социалистической Советской Республики ДАРИТ ПОЛКУ КРАСНООРДЕНСКОЕ ЗНАМЯ.

Башкирский Центральный Исполнительный Комитет Советов надеется что и в будущем, 12-й Башкирский полк Червонного Казачества будет твердо стоять на защите прав пролетариата, завоеваний октябрьской революции, с честью, высоко будет держать Краснoорденское знамя, заслуженное кровью лихих башкирских кавалеристов, в битвах с наймитами капитала и не запятнает его никакими, порочащими высокое звание воина-революционера, проступками.

Пусть подвиги старых кавалеристов-башкир, участников жестоких битв, с врагами трудящихся, ободряют молодых казаков полка, и пусть заслуженное ими Краснoорденское знамя служит символом новых подвигов казаков полка и новых побед над врагами пролетариата.

**Председатель Башкирского Центрального Исполнительного Комитета Кушаев**
**Члены Президиума Зубарев, Беляев**

**Военный Комиссар Башкирской Социалистической Советской Республики Терегулов**
**Секретарь ЦИКа Терегулов**

Һуңғараҡ полкка Башҡортостан хөкүмәтенең исеме, йәғни Башкирский ЦИК исеме бирелә һәм нумерацияһы 10-сы тип үҙ-

гәртелә. Һуңыраҡ өҫтәп тағы Верхнеуральский исеме бирелә. Шулай итеп, ул 10-й кавалерийский Верхнеуральский Червонного казачества полк имени Башкирского ЦИК, тип атала башлай. Полк составында башҡорт эскадроны ҡалдырыла. Эскадрон Башҡортостан призывниктары менән тулыландырылып тора.

Башҡортостан хөкүмәте үҙе шефлыҡҡа алған полкы менән тығыҙ бәйләнеш тота. 1930 йылда БашЦИК президиумы ағзаһы Дауытов Изяславль ҡалаһында торған 10-сы полктың хәле менән танышып ҡайта. Уның менән бергә полктың комиссары Радомский килеп, 1930 йылдың 3 июнендә БашЦИК-тың ултырышында доклад менән сығыш яһай. Хөкүмәт ағзалары Дауытов менән Радомскийҙың докладтарын тыңлағандан һуң 10-сы полк буйынса ҡарар ҡабул итә. Унда былай тиелә: *“...Принимая во внимание, что 10-й Кавполк, первоначально сформированный из бойцов башкирской национальности, имея особые заслуги, исторически связан с Башкирией, пополняется новобранцами из Башреспублики, имея в своем составе башкирский национальный эскадрон, БашЦИК признает необходимым усилить шефскую работу с привлечением к участию в шефстве широких трудящихся масс Башкирии...*

*...Исходя из исторической связи 10-го полка с Башкирией, поддерживаемый со дня формирования полка, БашЦИК, учитывая необходимость создания благоприятных условий для массовой работы со стороны национальной республики в нарпавлении воспитания национальных башкирских кадров, считает нахождение в количественном отношении башкир в составе полка в данное время недостаточным для массовой работы и поручает Теруправлению Округа БАССР войти с ходатайством по своему ведомству перед Реввоенсоветом СССР об увеличении разверстки новобранческого пополнения полку из Башкирии до 200 человек, направляя, вместе с тем, наиболее грамотных, по преимуществу из рабочих районов – Баймака и Белорецка, а также поручает Тер управлению Округа содействовать укомплектованию полка средним начсоставом, имея при этом в виду необходимость в ближайшее время дать полку трех командиров взвода из националов...”.*

Советтар Союзының ҡоралды көстәре составында авиация, танкы, механизацияланған ғәскәрҙәр күбәйеү менән 1937 йыл-

дың аҙағында – 1938 йылдың башында кавалерия ғәскәрҙәре байтаҡҡа ҡыҫҡартыла. 8 кавдивизия, 2 милли кавбригада һәм 7-се кавкорпустың идаралығы бөтөрлә. Артабан 1-се кавалерия Чернный казак корпусы (1-се, 2-се кавдивизиялар) таратыла, шул иҫәптән, 2-се дивизияһы составында булған БашЦИК исемендәге 10-сы кавалерия Верхеуральск Ҡыҙыл казак полкы. Расформировать ителгән 1-се кавкорпус нигеҙендә 4-се кавалерия корпусы ойоштороla (32-се, 34-се дивизиялар).

Ошоноң менән элекке Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының тарихи күсәгилешлеген һаҡлап килгән, Башҡортостан менән тығыҙ бәйләнеш тотҡан полктың да тарихы тамамлана.

## Уралтау осорған бөркөттәр

Граждандар һуғышы осоронда Муса Мортазин етәкләгән Башҡорт кавалерия бригадаһы яугирҙары башҡа башҡорт частарына ҡарағанда күберәк хәрби наградаларға эйә була. Ошо бригадала утты, һыуҙы кисеп үткән башҡорт яугирҙары һуғыштан һуң үҙҙәрен һынатмай. Мортазин бригадаһында хеҙмәт иткәндәр араһынан күп кенә дәүләт, хужалыҡ һәм хәрби эшмәкәрҙәр үҫеп сыға. Фронттан ҡайтҡас, улар Башҡортостанда төрлө вазифалар биләй. Башҡортостан автономияны ҡорал менән яулап алғас, артабан улар, ең һыҙғанып, уның аяҡҡа баҫыуына, нығыныуына үҙ өлөшөн индерәләр. Шулар араһынан, эскадрон командирҙары Кинйәбай Ишмөхәмәтов менән Ғәҙелша Ейәнсурин дәүләт эшмәкәрҙәре кимәленә үҫеп етә. К.Ишмөхәмәтов Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау халыҡ

комиссары булһа, Ғ.Ейәнсурин – Коммуналь хужалыҡ комиссары вазифаһын башҡара.

Икенселәре хәрби кейемде фронттан ҡайтҡас та сисмәй. 27-се полктың 4-се эскадроны командиры Шәмсетдин Ғафаров ошо уҡ эскадронда взвод командиры булып хеҙмәт иткән Заһиҙулла Ҡаҙнабаев һуғыштан ҡайтҡас, милиция органдарында эшләй. 27-се полк командиры Хисаметдин Фәйзуллин Ҡыҙыл Армияла хеҙмәтен дауам итә, һуңынан Осоавиахимда (хәҙерге ДАСААФ) хәрби әҙерлек начальнигы булып эшләй. 27-се полктың 1-се эскадроны командиры Ғәббәс Рыҫҡолов БАССР-ҙың бер нисә районында район башҡарма комитеты рәйесе булып эшләй. 28-се полк командиры ярҙамсыһы Фәттәх Ибраһимов һуғыштан һуң Иркутск ҡалаһында тау институтында уҡып, тау инженеры булып эшләй. БАССР-ҙың почетлы таусыһы исеменә лайыҡ була. Әхмәҙей Мортазин, Хәлфетдин Фәттәхетдинов, Шәмсетдин Яҡшыгилдиндар тыуған яҡтарында ҡайтып улыс, ауыл советтары рәйестәре вазифаларын башҡара.

30-сы йылдарҙың Сталин репрессияһы елдәре Мортазиндың яуҙаштарын да урап үтмәй. Ш.Ш. Ғафаров, К.Х. Ишмөхәмәтов, Ғ.Д. Ейәнсурин, З.М. Ҡаҙнабаев, Ә.Ф. Мортазин, Ф.Ә. Ибрагимов, Ғ.Ш. Рыҫҡолов, Х.Ш. Фәйзуллиндар нахаҡҡа ғәйепләнеп, үлем язаһына хөкөм ителә. Артабан уларҙың исемдәре Муса Мортазиндыҡы кеүек үк күп йылдар онотолоуға дусар ителде. Улар тураһында ныҡлап 90-сы йылдарҙан ғына яҙа башланылар. Бөгөнгө көндә ҡайһы берҙәренең исемдәре тыуған яҡтарында мәңгеләштерелгән. Әммә күптәренең исемдәре әлегә тиклем республика кимәлендә билдәһеҙ ҡала килә. Беҙҙең бурыс ошо батыр шәхестәрҙең исемдәрен халыҡ хәтерендә ҡалдырыу. Мин китап уҡыусылар иғтибарына Мортазиндың яуҙаштарының ҡыҫҡаса биографияһын тәҡдим итәм.



# Шәмсетдин Ғафаров

Шәмсетдин Шәйхетдин улы Ғафаров 1896 йылдың 15 агуһында Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең (хәҙерге Баймаҡ районы) Ҡолсура ауылыныда тыуған. Темәс ауылында рус-башҡорт мәктәбен тамамлай. 1915 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. Кавалерияла хеҙмәт итә. Вахмистр (хәҙергесә өлкән сержант дәрәжәһе) званиеһын ала.

1918 йылда һуғыштан ҡайтҡас, Башҡорт армияһына хеҙмәткә алына. Бында ул Әмир Ҡарамышев исемендәге 1-се Башҡорт кавалерия полкында взвод командиры булып йөрөй. 1919 йылдың февралендә Башҡортостан хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыға. 1919 йылдың көҙөндә Петроград фронтында һуғыша.

1920 йылдың майында Ш. Ғафаров хеҙмәт иткән 1-се Башҡорт кавалерия полкы Польша фронтындағы Башҡорт кава-

лерия бригадаһына ҡушыла. Бригаданың 27-се полкында 4-се эскадрон командиры сифатында поляктарға ҡаршы һуғыша. Батырлыҡтары өсөн М. В. Фрунзе ҡулынан исемле ҡылыс ала, ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

Беренсе орденға Шәмсетдин Ғафаров 1920 йылдың июнендә Ҡыҙыл Армияның Киев операцияһындағы ҡаһарманлығы өсөн лайыҡ була. Реввоенсоветтың № 57 фарманында (1921 йылдың 17-се феврале) былай тиелгән: “*Утверждается присуждение… Реввоенсоветом 12-й армии ордена Красного знамени: Башкирских кавполков. 27-го… командиру 4-го эскадрона тов. Гафару Шамендину – за то, что 6 июня 1920 г., отправившись с эскадроном на поддержку 28-го кавполка и поведя наступление на дер. Пиняево он бросился в конную атаку на противника, заставил его отступить и захватил неприятельское орудие французского образца…*”.

1920 йылдың көҙөндә, Ҡыҙыл Армия поляк ғәскәрҙәре ҡыҫымында Варшаванан сигенгән мәлдә, аръергад бәрелештәрҙә батырлыҡ күрһәтеп батыр эскадрон командиры Ғафаров икенсе тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ орденына тәҡдим ителә. На-



**Шәмсетдин Ғафаров (һулдан икенсе ултыра) Өфөлә милицияла эшләгән сағында.**

града тураһында фарман 1921 йылдың 31 декабрендә сыға: “*Утверждается присуждение... Реввоенсоветом Западного фронта ордена Красного знамени нижеименованным лицам за выдающуюся стойкость и доблесть, проявленные ими в период бывших наступательных боев на Варшаву и в последовавших затем арьергардных боях, а именно...по бывшей 12-й армии... командиру эскадрона 27-го Башкирского кавполка тов. Гафарову Шамендину...”.*

Поляктар менән һуғыш бөткәндән һуң Ш. Ғафаров 27-се полктың хужалыҡ командаһы начальнигы, артабан 2-се Башҡорт полкында взвод командиры булып хеҙмәт итә.

1921 йылда демобилизацияланып, тыуған яғына ҡайта. 1921–1923 йылдарҙа Йылайыр контонының хәрби комиссары ярҙамсыһы эшләй, 1923–1924 йылдарҙа Ҡаҙан хәрби-сәйәси мәктәбендә белем алып ҡайта. 1923–1929 йылдарҙа Түбә ҡасабаһында (Баймаҡ районы) эшләй. 1929 йылдан 1-се Өфө ведомство милицияһының дивизион командиры итеп тәғәйенләнә, 1934 йылдан ведомство милицияһының айырым взводы командиры булып хеҙмәт итә.

Шәмсетдин Ғафаров үҙенең күп кенә яуҙаштары кеүек үк репрессия ҡорбанына әүерелә. 1937 йылдың 17 октябрендә уны, контрреволюцион эшмәкәрлектә ғәйепләп ҡулға алалар, ике ай тирәһе төрмәлә ултырғандан һуң 8 декабрҙә атыла. 1956 йылда реабилитациялана.

# Хәлфетдин Фәттәхетдинов

Хәлфетдин Фәттәхетдинов – Муса Мортазин менән Шәмсетдин Ғафаровтар кеүек ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән яугир. Ул 1892 йылда Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Салауат ауылында (хәҙерге Әбйәлил районы) тыуған.

1916 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. Армияла уҡыу командаһын (Учебная команда) тамалаған булһа кәрәк. Ул башта армияһында фельдфебель (хәҙергесә өлкән сержант дәрәжәһенә тап килә) званиеһын ала. Һуғышта взвод командиры була.

Хәлфетдин Фәттәхетдиновтың һуғыштан ҡайтыуына Башҡортостанда автономия өсөн көрәштең ҡолас йәйгән мәле була. Дары еҫен еҫкәп ҡайтҡан федьфебелде 1918 йылда йәш автономияның яңы ойошторолоп ятҡан хәрби көстәре - Башҡорт армияһына хеҙмәткә алалар. Ул Әмир Ҡарамышевтың 1-се Башҡорт кавалерия полкында йөрөй (1919 йылдың ғинуарынан был полкка Муса Мортазин командалыҡ итә). 1919 йылдың февралендә 1-се Башҡорт кавалерия полкы составында ҡыҙылдар яғына сыға. Март аҙағында Мортазин менән ҡабат аҡтар яғына китә.

1919 йылдың авгусында Мортазиндың бригада кимәлендә үҫкән полкы менән тағы ҡыҙылдар яғына сыға. Тәүҙә Айырым Башҡорт кавалерия бригаданың 6-сы полкында, 1919 йылдың ноябренән 5-се кавалерия полкында (һуңынан ул 27-се полк тип атала). Бригада менән тәүҙә аҡтарға ҡаршы Урал фронтында (хәҙерге Ҡаҙағстан территорияһы), 1920 йылдың апрелендә Мортазин бригадаһы Польша фронтында ташлана.

Хәлфетдин Фәттәхетдинов 1920 йылдың июнендә 27-се кавалерия полкының 1-се эскадроны командиры ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә. Башҡорт атлылары фронтҡа килеү менән 12-се армия составында поляктарға ҡаршы ташлана. Июнь башында ҡыҙыл командование поляктарҙы Киев ҡалаһынан ҡыуып сығарыу буйынса операция башлай. Башҡорт бригадаһы Киевтың төн яғынан Днепрҙы кисеп сығып Киев-Коростень тимер юлын кисеү маҡсатында алға ынтыла. Х. Фәттәхетдинов Пиняево ауылы янында булған һуғыштағы батырлығы өсөн тәүге Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була.

РСФСР Реввоенсоветының 1921 йылдың 17 февралендәге 57-се һанлы фарманында былай тиелгән: “*Утверждается присуждение… Реввоенсоветом 12-й армии ордена Красного знамени: Башкирских кавполков… 27-го помощнику командира 1-го эскадрона тов. Фаттахетдинову – за захват во главе трех красноармейцев у дер. Пиняево 6 июня 1920 г. 25 поляков, 2 автоматических винтовок и запасных частей…*”.

1920 йылдың октябрендә Совет Рәсәйе менән Польша араһында солох төҙәлә һәм ошоноң менән поляктарға ҡаршы һуғыш тамамлана. Башҡорт атлылары поляктар менән бергә Ҡыҙыл Армияға ҡаршы һуғышҡан  Семен Петлюраның армияһына ҡаршы ташлана. 1920 йылдың ноябрендә Башҡорт бригадаһы Котовскийҙың бригадаһы менән С.В.Петлюраның ғәскәрен тармар итә. Бында ла эскадрон командиры Фәттәхетдинов ҡаһарманлыҡ күрһәтеп тағы бер Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була.

Орден менән бүләкләү тураһында Реввоенсоветтың 34-се һанлы фарман 1922 йылдың февралендә донъя күрә. Унда былай тиелгән: “*…Утверждается присуждение…Реввоенсоветом Киевского военного округа ордена Красного знамени: 2-го Башкирского кавалерийского полка… командиру взвода тов. Фаттахетдинову Хальфетдину – за отличие, оказанное в бою 21 ноября 1920 г. у дер. Клининцы…*”

Хәлфетдин Фәттәхетдиновтың икенсе батырлығы хаҡында полк командирының орденға тәҡдим итеп яҙған представлениеһында (1920 йылдың декабре) ентекле бәйән ителгән: “*...в бою 21 ноября 1920 г. ворвавшись в дер. Клининцы, бросился на противника продолжавшего обстреливать картечью из одного орудия, и, кроме того, из двух пулеметов, подскакав к офицеру, не прекращавшему стрельбу из пулемета, зарубил его, оставшаяся орудийная и пулеметная прислуга сдалась Фаттахетдинову и подоспевшим красноармейцам. Результатом поступка Фаттахетдинова, увлекшего остальных красноармейцев, было взятие одного орудия, двух пулеметов и нескольких пленных противника…*”

Һуғыштан һуң Х.Фәттәхетдинов 2-се Башҡорт кавалерия полкы 1-се эскадронының взвод командиры итеп тәғәйенләнә. 1921 йылдың февраль–мартында ошо полктың хужалыҡ командаһы начальнигы вазифаһын үтәй. Ошо йылда ул демобилизацияланып, тыуған яғына ҡайта.

Шулай итеп, Польша фронтында һәм Петлюра ғәскәрен ҡыйратыуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн Хәлфетдин Фәттәхетдинов ике тапҡыр (1921, 1922 йылдарҙа) Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Беренсе орден менән бүләкләү тураһында фарман 1921 йылдың февраленда үк донъя күреүгә ҡарамаҫтан, орден тик 1922 йылдың июнендә Башвоенкоматҡа килә. 1922 йылдың 28 июнендә БАССР хәрби комиссары Әхмәтйән Тереғолов "Известия Всебашкирского центроисполкома" гәзитендә Башҡорт бригадаһында хеҙмәт иткән 10 кешегә, шул иҫәптән Х.Фәттәхетдиновҡа, Ҡыҙыл Байраҡ ордены килгәнлеге тураһында хәбәр итә: "*Бывшему помощнику командира 1-се эскадрона 27-го Башкавполка т. Фаттахетдинову, ныне находящнмуся в Тамьян-Катайском кантоне. Орден № 12095. Приказ РВСР 1921 г. № 57"*. Хәрби комиссар: "*ордена будут вручены по принадлежности при торжественной обстановке*", - тип яҙа гәзиттә.

1921 йылда Башҡортостанда ҡот осҡос аслыҡ була. Хеҙмәттән ҡайтҡас та уҡ Хәлхетдин Фәттәхетдинов Тамъян-Ҡатай кантонында "Башпомгол"дың урындағы ойошмаһында эшләй. Артабан Салауат ауыл Советы рәйесе урынбаҫары вазифаһын башҡара. 1930 йылдан Таштимер элемтә бүлексәһен етәкләй. 1938 йылда ауырып вафат була.

# Хисаметдин Фәйзуллин

Хисаметдин Шәрип улы Фәйзуллин 1890 йылда Ырымбур губернаһы Троцик өйәҙенең Атйетәр ауылында (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Сыбаркүл районы) тыуған. Ата-әсәһе ярлы булыу сәбәпле, Хисаметдин йәштән Троцик ҡалаһына китеп, шунда ялланып эшләй. Ҡалалағы урыҫ мәктәбенең өс синыфын тамамлауға өлгәшә. Шунда яҡшы ғына итеп русса уҡырға һәм яҙырға өйрәнә.

Йәше тулғас, әрмегә алынып, Ырымбур казак полкында фуражир булып хеҙмәт итә. Граждандар һуғышы башланғас, башҡорт ғәскәренә мобилизациялана. 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡан мәлдә тиф менән ауырып китеп ятып ҡала. Һәм аҡтар Башҡортостандан киткәнсе йәшеренеп йөрөй. 1919 йылдың йәйендә Башҡорт хөкүмәте эвакуациянан ҡайтҡас, ҡабат башҡорт ғәскәренә алына.

Стәрлетамаҡ ҡалаһында (ул саҡта Башҡортостандың баш ҡалаһы) башҡорт запас частарында хеҙмәт итә. 1920 йылдың йәйендә Хисаметдин Фәйзуллинды 100 һалдат менән Польша фронтында һуғышҡан Муса Мортазиндың атлы бригадаһына ебәрәләр. Уны Муса Мортазин 27-се кавалерия полкы командирының ярҙамсыһы итеп тәғәйенләй.

Ҡаныл яуҙарҙың береһендә полк командиры грузин Эрадзе һәләк булғас, уның урынына Хисаметдин Фәйзуллин 27-се Башҡорт кавалерия полкы менән командалыҡ итә башлай. 1920 йылдың көҙөндә поляктар менән һуғыш тамамланғас, Башҡорт кавалерия бригадаһы Семен Петлюраның ғәскәрен ҡыйратыуҙа ҡатнаша. Волочиск янындағы һуғышта күрһәткән батырлығы өсөн 27-се Башҡорт полкы командиры Хисаметдин Фәйзуллин Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Реввоенсоветтың 1921 йылдың 6 мартындағы 549-сы фарманында былай тиелә: “*2-се Башҡорт кавалерия полкының командиры Фәйзуллин Хисаметдин иптәш: уҙған йылдың 21 ноябрендә петлюрасылар менән Волочиск ҡалаһы янындағы һуғышта дошмандың ғәйәт көслө мылтыҡ, пулемет һәм артиллерия уты аҫтында үҙенең ҡыйыулығы менән бөтә ҡыҙылармеецтарҙы рухландырып, полк алдында барҙы.*

*Йылға аша дошман үҙенең артиллерияһын күсереп ятҡан*

*күпергә беренсе бәреп инеп, Фәйзуллин иптәш дошманды биш орудиеһын ташлап ҡасырға мәжбүр итте. Фәйзуллин иптәш үҙе бөтә кешеләргә батырлыҡ һәм оҫталыҡ өлгөһө булып торған был һуғышта беҙҙең тарафтан дошмандың 6 орудиеһы, 14 пулеметы, ылауҙары һәм ике йөҙләп кешеһе, шул иҫәптән петлюрасыларҙың 1-се уҡсы дивизияһы штабы әсиргә төштө*".

Хисаметдин Фәйзуллин Польша фронтына барғас, Башҡорт кавалерия бригадаһында хеҙмәт иткән рус ҡыҙына өйләнә. Ҡатыны Е. В. Фәйзуллина үҙенең хәтирәләрендә (1976 йыл) былай тип яҙа: "Он мне часто говорил: "*Везло мне в бою, я ни разу не был ранен и ни одна атака не проходила без успеха в нашу пользу или мы брали трофеи, или же пленных. Мне рассказывал командир 1-го эскадрона тов. Зиянчурин Адильша, который со своим эскадроном первым за Файзуллиным бросался в атаку. С криком за мной! тов. Файзуллин бросался впереди полка с обнаженным клинком – он был невменяем – лицо его бледнело, глаза наливались кровью, он рубил врага направо и налево, а конь под ним почти стоял на задних ногах и издавал неистовое ржание*".

Һуғыштан һуң Хисаметдин Фәйзуллин 2-се Башҡорт кавалерия полкы менән командалыҡ итә. 1921 йылдың мартында Башҡорт кавалерия бригадаһы таратылып, уның частарынан 15-се, 16-сы, 17-се, 18-се айырым Башҡорт эскадрондары ойошторолағас, ул 17-се эскадрон командиры итеп тәғәйенләнә. 1921 йылдың ноябренә тиклем ул Румыния сигендә хеҙмәт итә. Артабан 15-се, 16-сы, 17-се эскадрондарҙан 8-се Червонный казак кавалерия полкы ойошторола, 18-се эскадрон 7-се Червонный казак кавалерия полкы составына инә. 1921 йылдың көҙөнән Фәйзуллин 7-се полк командиры ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә.

1926–1927 йылдарҙа, аҙаҡ данлыҡлы сардар булып киткән Жуков, Рокоссовскийҙар менән бер осорҙа, Ленинградта Юғары кавалерия мәктәбендә уҡый, һуңынан Куйбышев (Һамар) ҡалаһында Ҡыҙыл Армияның команда составы курстарын тамамлай. Ново-Черкасск ҡалаһында полк мәктәбе начальнигы булып хеҙмәт итә, артабан Башҡортостанға ҡайтып, БАССР-ҙың Осоавиахимында (хәҙерге РОСТО) хәрби әҙерлек начальнигы булып эшләй.

30-сы йылдарҙың Сталин репрессияһы уны ла урап үтмәй. 1937 йылдың 9 октябрендә ҡулға алына. Ярты йыл тирәһе төр-

мәлә ултырғандан һуң, 1938 йылдың 1 мартында атыла. 1957 йылдың 18 февралендә реабилитациялана.

# Ғәббәс Рыҫҡолов

Ғәббәс Шәйхелислам улы Рыҫҡолов 1894 йылдың 4 мартында Ырымбур губернаһы Верхнеуралск өйәҙенең Ярлыҡап ауылында (хәҙерге Әбйәлил районы) тыуған. 1915 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. Себер уҡсы дивизияһының 39-сы полкында хеҙмәт итә. Һуғыштағы батырлыҡтары өсөн Георгий тәреһе менән бүләкләнә. 1917 йылдың апрелендә Ғ. Рыҫҡолов 1-се Улан кавалерия полкына өлкән унтер-офицер итеп тәғәйенләнә.

1917 йылдың декабрендә фронттан ҡайта. 1918 йылдың февралендә улыс ревкомы ағзаһы итеп һайлана. Верхнеуральскийҙа үткән Советтар съезында булып ҡайта. Советтар бойороғо буйынса Тамъян-Түңгәүер улысында Ҡыҙыл Армияға аттар йыйыу менән шөғөлләнә. 1918 йылдың апрель башында Каширindарҙың ҡыҙыл отрядына яҙыла. Уны пулемет командаһына тәғәйенләйҙәр. Әммә оҙаҡламай, Тирлән ауылы янында, атаман Анненковтың полкына әсиргә эләгә. Казактар уны полктың ылауына хеҙмәткә ҡуша.

Унан ҡасып Ғәббәс Рыҫҡолов тыуған яғына ҡайта һәм 28 июлдә Башҡорт армияһының 1-се кавалерия полкында хеҙмәткә алына. Тәүҙә –отделение, артабан взвод командиры булып китә. 1919 йылдың ғинуарында эскадрон командиры итеп ҡуйыла. Февралдә башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Муса Мортазин командалыҡ иткән 1-се Башҡорт полкы менән Әбйәлил районы территорияһында аҡтарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша.

1919 йылдың апрелендә Муса Мортазин менән кире аҡтар яғына сығып китә. Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы 1919 йылдың авгусында ҡыҙылдар яғына ҡабат сыҡҡас, Урал фронтында аҡтарға ҡаршы һуғыша.

1920 йылдың апрелендә бригада составында Польша фронтына китә. Бында ул 27-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны менән командалыҡ итә. 1920 йылдың 1 июнендә Киев операцияһы барышында поляктарҙы ҡыуып, бригаданан беренсе булып үҙенең эскадроны менән Днепрҙы аша сыға. “*На 1 июня Башбригаде было приказано сосредоточиться в районе Сухолучье для форсирования Днепра. На рассвете 1 июня сделав необходимые приготовления под прикрытием*

*огня 2 орудий, Башбригада на лодках начала переправу. Противник вел интенсивный ружейный и пулеметный огонь. Первым переправился 1-й эскадрон 27-го кавполка (комэска т. Рыскулов), который, высадившись на берег, сбил противника, захватив 1 пулемет Максима; продвинувшись вперед, эскадрон зацепился на небольшом плацдарме в полуверсте и завязал бой с противником, укрывшись за рекой Жид. К 9 часам утра переправился 2-й эскадрон того же полка, к 11 час. – два эскадрона 27-го полка. Благодаря переходу противника в контратаку, при поддержке сильной артиллерии, переправившиеся эскадроны вынуждены были отступить. 1-й эскадрон 27-го полка прикырвал отступление* ”, – тип яҙа Муса Мортазин үҙенең “Башкирия и башкирские войска в Гражданскую войну” китабында.

Ошо ҡаһарманлығы өсөн Ғәббәс Рысҡолов Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Реввоенсоветтың фарманында (1921 йылдың 17 феврале, № 57) ҡурҡыу белмәҫ эскадрон командирының батырлығы хаҡында былай тип бәйән тиелә: “*1920 йылдың 1 июнендә ул Днепр аша кисепсыҡкан 27-се кавполктың 1-се эскадронына поляктар атака башлағанда һыйбалылар сафында дошманға ташланып, үҙ артынан бөтә эскадронды ылыҡтырҙы, ғәййәр һыбайлы атака менән пляктарҙың атып яткан бер пулеметын тартып алып, дошманды ҡасырға мәжбүр итте*”. Әйткәндәй, наградалау документтарында Ғ. Рысҡолов Шәйхисламов фамилияһы менән телгә алына.

1921 йылдың февралендә Ғ. Рысҡолов Себерҙәге ихтилалдарҙы баҫтырыу өсөн Барнаулға ебәрелә, артабан барон Унгерндың отрядтарын ҡыйратыуҙа ҡатнаша. 1923 йылдың ғинуарында Тыуған яғына ҡатҡас, Ауыл Советы рәйесе итеп һайлана, 1924 йылдан Тамъян-Түңгәүер улысы башҡарма комитеты рәйесе, 1931 йылдан Әбйәлил райсоветы рәйесе була. 1934 йылдан Учалы, Мәсетле районгарында райсовет рәйесе вазифаһын башҡара. 1935 йылда аҡ армияла хеҙмәт итеүен йәшереп йөрөгән, тип партиянан сығаралар. Эшенән сығып, ҡайтып, тыуған яғында йәшәй. Артабан Әбйәлил районы РАЙПО-һының заготконтора директоры булып эшләй. 1937 йылдың 16 авгусында ҡулға алынып, Өфөгә оҙатыла. Төрмәлә дүрт ай тирәһе ултырғандан һуң, 8 декабрҙә атыла. 1956 йылда реабилитацияланған.



## Шәмсетдин Яҡшыгилдин

Шәмсетдин Ғәләүетдин улы Яҡшыгилдин 1896 йылда Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе 2-се Түңгәүер улысының Мөхәмәтрәхим ауылында (хәҙерге Йылайыр районының Матрай ауылы) тыуған. 1915 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. Фронтта яраланып 1918 йылдың апреленән август айына тиклем госпиталдә ята. Унан тыуған яғына ҡайта.

1918 йылдың аҙағында Башҡорт армияһына хеҙмәткә алына. 1919 йылдың февралендә Башҡортостан хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡас, Ш. Яҡшыгилдин башҡорт полктары составында Саранск ҡалаһына оҙатыла. Бында башҡорт полктарынан Айырым Башҡорт бригадаһының (аҙаҡ бригада Башҡорт кавалерия дивизияһына итеп үргәртелә) ойошторола. Ул ошо бригаданың 2-се кавалерия полкына тәғәйенләнә.

1919 йылдың июнендә Реввоенсовет рәйесе Л.Д.Троцкийҙың фарманы менән Башҡорт бригадаһы Көньяҡ фронтҡа (Украинаға), Деникин ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышҡа оҙатыла. Бында Шәмсетдин Яҡшыгилдин Хәлил Әлишев командалығындағы 2-се Башҡорт кавалерия полкы составында аҡтарға

ҡаршы ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша. Ҡыҙыл Армия фронтының таркау булыуы, Бригада буйһонған Харьков оборона советы етәкселегенең ақтарға һатылыуы арҡаһында башҡорт полктарына бик ауырға тура килә. Улар күп юғалтыуҙар кисерә.

Июль айында Башҡорт бригадаһы Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы тип үҙгәртелә. Дивизия 1919 йылдың ҡара көҙөнә тиклем 14- армия составында генерал Деникин ғәскәрҙәренә ҡаршы Миргород, Полтава ҡалалары янында ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнаша.

1919 йылдың сентябрендә сафтары һирәгәйгән Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһының 1-се, 2-се уҡсы полкын Йыйылма Башҡорт уҡсы полкына, 1-се, 2-се кавалерия полктарын Йыйылма Башҡорт кавалерия дивизионына берләштерәләр. Шәмсетдин Яҡшыгилдин ноябрь айында йыйылма кавалерия дивизионы составында Петроградҡа генерал Юденич армияһына ҡаршы һуғышҡа оҙатыла.

Бында ул Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө составына ингән 3-сө Башҡорт кавалерия полкында взвод менән етәкселек итә. Петроградта башҡорт ғәскәрҙәрен театрҙар, музейҙарға йөрөтәләр. Бер мәл башҡорт һалдаттары Петроградтың тарих музейына экскурсияға барғанда Шәмсетдин Яҡшыгилдиндың һабы алтын һәм көмөш менән биҙәлгән боронғо бер ҡылысҡа күҙе төшә. Хайран ҡалып ҡарап торған мәлдә музейҙың хеҙмәткәре килеп был ҡылыстың тарихын һөйләп бирә: рус-төрөк һуғышы ваҡытында ҡулға төшкән бер төрөк генералыныҡы икән. Башҡорт яугирының нык ҡыҙыҡһыныуын күргән музей хеҙмәткәрҙәре, был зиннәтле ҡылысты уға бүләк итә. Дошмандарҙы ҡырып бөткәс ҡылысты музейға ҡабат ҡайтарырһығыҙ, тиҙәр улар Шәмсетдингә. Әммә башҡорт яугирына был ҡылысты тиҙ арала ғына музейға ҡайтарып бирергә тура килмәй.

1920 йылдың башында Башҡорт кавалерия дивизияһы, шул иҫәптән 3-се Башҡорт кавалерия полкы Петроградтан Новгород губернаһына Муравьев казармаларына күсерелә. Бында дивизияның ҡалған яугирҙарын 1-се Башҡорт кавалерия полкына туплап, 1920 йылдың июнендә Польша фронтына, Муса Мортазин етәкселек иткән Башҡорт кавалерия бригадаһына оҙаталар. Шәмсетдин Яҡшыгилдин ошо рәүешле легендар комбриг Муса Мортазиндың бригадаһына барып эләгә. “*Наш башкирский полк наводил ужас на белополяков и нас они прозвали*

*“дикой”, “азиатской” бригадой*”, фронтта яраланып – тип яҙа Ш. Яҡшыгилдин үҙенең автобиографияһында.

1920 йылдың көҙөндә поляктар менән һуғыш тамамланғас, 27-се Башҡорт кавалерия полкы 3-сө эскадронының взвод командиры Шәмсетдин Яҡшыгилдин Петлюраның ғәскәрен ҡыйратыуҙа ҡатнаша. 21 ноябрь көнө Яҡшыгилдин полк командиры һәм ике яугир менән бергә Гоноровка ауылы янындағы быуаны баҫып алып, дошмандың биш орудиеһын, ылау һәм пехота частарының сигенеү юлын киҫә. Ошоноң һөҙөмтәһендә әлеге орудиелар һәм күп кенә әсирҙәр Башҡорт бригадаһы ҡулына эләгә.

Ҡаһарманлығы өсөн Шәмсетдин Яҡшыгилдин 1921 йылдың 29 сентябрендә Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Награда Республика Реввоенсоветының 34-се һанлы фарманы (1922 йлдың 7 феврале) менән раҫланған. Ошо уҡ йылдың аҙағында демобилизацияланып, тыуған яғына ҡайтыр алдынан төрөк ҡылысын Петроград музейына тапшырығыҙ, тип Ҡыҙыл (Червонная) казак дивизияһына ҡалдырып китә.

Тыуған яғына ҡайтҡас, 1922 йылдың февралендә Матрай ауыл Советының тәүге рәйесе итеп һайлана. Артабан, 30-сы йылдарҙа “Новый мир” колхозының рәйесе була. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Яраланып 1943 йылда демобилизациялана. Шәмсетдин Ғәләүетдин улы Яҡшыгилдин 1973 йылда, 78 йәшендә донъя ҡуя



## Заһиҙулла Ҡаҙнабаев

Заһиҙулла (Заһит) Мортаза улы Ҡаҙнабаев 1897 йылда Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе 2-се Түңгәүер улысының Балапан ауылында (хәҙерге Йылайыр районы) тыуған.

1918 йылда аҡтар яғында, Башҡорт армияһында 1-се кавалерия полкында хеҙмәт иткән булһа кәрәк. Башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, 1919 йылдың көҙөндә Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө составында Петроградты һаҡлауҙа ҡатнашҡанлығы билдәле. Тимәк, 1919 йылдың йәйендә ул Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы менән Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) Деникинға ҡаршы һуғыштарҙа ла ҡатнашҡан, күрәһең.

Башҡорт кавалерия дивизияһы частары 1919 йылдың көҙөндә Петроградҡа ташлана. Генерал Юденичтың армияһын ҡыйратҡандан һуң, 1920 йылдың башында Башҡорт кавалерия дивизияһы Петроградтан Новгород губернаһындағы Муравьев казармаларына күсерелә.

1920 йылдың майында дивизия таратылып, уның һалдаттарын бер полкка туплап, Польша фронтына, Мортазиндың атлы бригадаһын тулыландырырға ебәрәләр. Заһит Ҡаҙнабаев ошо рәүешле Польша фронтына, Мортазин бригадаһына барып эләккән, ахыры.

Бында ул 27-се Башҡорт кавалерия полкының Шәмсетдин

Ғафаров етәкләгән 4-се эскадронында взвод командиры була. 1920 йылдың 6 июнендә Пиняево ауылы яу барышында З. Ҡаҙнабаев, үҙенең взводы егеттәре менән флангынан һөжүм итеп, контрһөжүмгә күтәрелгән поляктарҙы, пулеметтарын ташлап, ҡасырға мәжбүр итә. Ошо батырлығы өсөн ул, 1921 йылдың 17 февралендә, Республика Реввоенсоветының 57-се һанлы фарманы менән Ҡыҙыл Байраҡ ордена лайыҡ була.

**Заһит Ҡаҙнабаев (уртала) Польша фронтында. 1920 йыл.**



Демобилизацияланып, тыуған яғына ҡайтҡас, 1922 –1924 йылдарҙа Заһит Ҡаҙнабаев Йылайыр кантоны Түңгәүер улысының Сәлим ауыл Советы рәйесе вазифаһын башҡара. 1925–1927 йылдарҙа Сибай мәғдәнлегендә өлкән милиционер булып эшләй. 1930 йылда Баймаҡ районы Советы рәйесе итеп һайлана. 1932–1933 йылдарҙа ул Ленинградта милиция курстарында уҡып ҡайта. Артабан Ейәнсура районының милиция начальнигы итеп тәғәйенләнә. 1934 йылдан Баймаҡ районында төрлө яуаплы вазифалар (милиция начальнигы, ДОСААФ рәйесе һ.б.) башҡара.

1942 йылда ҡулға алына һәм, милләтселек, совет власына ҡаршы ейәнәтселектә ғәйепләнеп, 10 йылға иркенән мәхрүм ителә. Заһиҙулла Ҡаҙнабаев 1943 йылдың 27 майында Свердловск өлкәһендә төрмәлә вафат була.

# Фәттәх Ибраһимов

Фәттәх Әҙелмырҙа улы Ибраһимов 1892 йылдың 22 мартында Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Әлмөхәмәт ауылында (хәҙерге Әбйәлил районы) тыуған. 1917 йылғы революцияға тиклемге биографияһы тураһында мәғлүмәттәр юҡ. 1918 йылда аҡтар яғында Башҡорт армияһы сафтарында, 1-се Башҡорт кавалерия полкында хеҙмәт иткән булһа кәрәк.

1920 йылда Польша фронтында ул Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһында 28-се кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы вазифаһында була. 1920 йылдың июнендә Киев операцияһы барышында ҡаһарманлыҡ күрһәтеп Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була.

Реввоенсоветтың 1921 йылдың 17 февралендә сыҡҡан 57-се фарманында былай тиелгән: “*1920 йылдың 5 июнендә Башҡорт кавалерия бригадаһы Пиняево ауылына һөжүм иткән ваҡытта ул бер эскадрон менән дошман батареяһының артына үтеп инеп, ҡапыл ябырылып уларҙы ҡасырға мәжбүр итеп, кешеләре менән бергә ике орудиены, боеприпастары, 2 пулемет һәм ике ылауҙы ҡулға төшөрҙө*”, – тиелә. Ҡыҙыл Байраҡ ордены уға 1922 йылда тапшырыла.

Фронттан ҡайтҡас, 1922 йылға тиклем Бөрйән-Түңгәүер кантонының хәрби комиссары булып хеҙмәт итә. Артабан Иркутск ҡалаһында Себер тау институтында уҡып, тау инженеры һөнәрен үҙләштерә. Баҡырүҙәк һәм Ишбирҙе мәғдәнлектәрендә эшләй, артабан Түбә мәғдән идаралығының (рудоуправление) идарасыһы вазифаһын башҡара. БАССР-ҙың почетлы таусыһы исемен ала. 30-сы йылдар аҙағында үҙләнеү партияһы начальнигы булып эшләй. Репрессия елдәре Фәттәх Ибраһимовты ла урап үтмәй, 1937 йылдың 21 авгусында ҡулға алына. Шул уҡ йылдың 8 декабрендә Өфөлә атыла.

# Кинйәбай Ишмөхәмәтов

Кинйәбай Хәйретдин улы Ишмөхәмәтов 1894 йылда Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙе Ҡатай улысының (хәҙерге Белорет районы) Сермән ауылында тыуған. 1911 йылда тыуған ауылында ике синыфлы урыҫ-башҡорт училищеһын тамамлай. Уҡыуҙы тамамлағандан һуң ағас ҡырҡып, заводтарға күмер ташыу менән шөғөлләнә.

1914 йылда әрмегә алынып Балашов ҡалаһындағы 106-сы запас батальонда хеҙмәтен башлай. Өс ай күнекмәләр үткәндән һуң марш роталары составында фронтҡа оҙатыла. 1915 йылда Карпатҡа килеп, 16-сы Финлянд уҡсы полкында хеҙмәт итә. 1917 йылдың ноябрендә отпускы алып тыуған яғына ҡайта. Илдә болашыр киткәс, әрмегә бармай өйҙә тороп ҡала.

1918 йылдың мартында Сермәндәге ҡыҙылдарҙың хәрби дуржинаһына яҙыла һәм июль айына тиклем Ҡыҙыл гвардия сафында хеҙмәт итә. 1918 йылдың йәйендә Башҡортостан аҡтар ҡулына күсә. “*Во время отступления Каширина мне не пришлось отступать так как я был болен и находился в кошах. Когда белые заняли нашу деревню то беспощадно стали расправлятся отставшимся большевиками. Стали сожать в тюрьмы и расстреливать. Когда стали белые приближаться в наши кочевки, то я скрылся в лесу, где прожил до октября месяца*”, – яҙа үҙенең автобиографияһында К. Ишмөхәмәтов.

Билдәле булыуынса, 1918 йылдың йәйендә Каширин менән Блюхерҙың ҡыҙыл отрядтарына ҡаршы Башҡорт армияһы частары, атап әйткәндә, Әмир Ҡарамышев етәкселегендә 1-се Башҡорт кавалерия полкы (М. Мортазин ошо полкта эскадрон командиры булып хеҙмәт итә), 5-се Башҡорт уҡсы полкы һәм Тамъян-Ҡатай иректе отряды ҡаршы һуғыша. Ошоно иҫәпкә алғанда, Кинйәбай Ишмөхәмәтов, үҙ милләттәштәре менән һуғышырға ашҡынып тормағандыр һәм ҡыҙылдар менән китергә лә уйы булмағандыр, моғайын.

Үҙе яҙыуынса, ул 1918 йылдың көҙөндә тап Муса Мортазин хеҙмәт иткән 1-се Башҡорт кавалерия полкына яҙыла. Шулай итеп, 1919 йылдың февраленә тиклем К. Ишмөхәмәтов 1-се Башҡорт кавалерия полкында хеҙмәт итә. Тимәк, ҡыҙылдарҙың 1-се армия ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа туранан-тура ҡатнашҡан булып сыға. Сөнки 1-се полк 1918 йылдың декабренән Стәрлетамаҡ фронтында ҡыҙылдарға ҡаршы

аяуһыҙ бәрелештәрҙә ҡатнаша. Полк “Стәрлетамаҡ фронты башҡорт көстәре” хәрби оператив төркөмөндә хәрәкәт итә.

“*Когда красные стали приближаться к нашей деревне я выпросился домой, чтобы в случае занятия нашей деревни красными присоединиться к ним. Но у нас еще стоял комендант белых и кулаки донесли, что я служил добровольцем у красных и до сего времени скрывался в лесу. Тогда комендант белогвардейский меня арестовал. Фронт был не далек о нас, верстах 50-ти от деревни. В ночь 24 февраля я сумел убежать с целью перебраться через фронт к красным. 25 февраля перебежал через фронт белых к красным и поступил в Башкирский полк, который перешел целиком 19 февраля 1919 года*”, – яҙа тураһында.

Март аҙағында Мортазиндың полкы 1-се кавалерия полкы ябай ауыл халҡын интектергән ҡыҙылдар менән уртаҡ тел таба алмай, кире аҡтар яғына сығып китә, уның менән бер Кинйәбай Ишмөхәмәтов та аҡтар яғына киткән, булып сыға. “*Прослужив три месяца в мае месяце меня назначили помощником командира эскадрона, а 2 августа 1919 года назначен командиром эскадрона*”, - тип бәйән итә үҙенең хәрби хеҙмәт юлын К.Ишмөхәмәтов.

1919 йылдың август аҙағында бригада кимәленә үҫеп еткән Мортазин полкы, ҡыҙылдар яғына ҡабат сыға. Артабан Ишмөхәмәтов Башҡорт кавалерия бригадаһы составында Урал фронтында (хәҙерге Ырымбур өлкәһе, Ҡаҙағстан территорияһы) аҡтарға ҡаршы һуғышып йөрөй.

28-се полкының эскадрон командиры сифатында Польша фронтында һуғыштарҙа ҡатнаша. 1920 йылдың ноябрендә Семен Петлюраның армияһын ҡыйратҡанда күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. 1922 йылда Реввоенсоветтың 34-се фарманы менән бүләкләнә. Фарманда былай тиелгән: “*1920 йылдың 21 ноябрендә Гоноровка ауылы эргәһендә һуғышта дошманды ҡыуып барышлай уның сафын туҙҙырғаны һәм фельдшерын, медикаменттары менән ҡуша санлетучкаһын әсиргә алып, уларҙы тылға килтереп тапшырғандан һуң да тағы ла дошманды эҙәрлекләүен дауам иткәне өсөн*”.

1920 йылдың декабрендә Башҡорт кавалерия бригадаһы ике полкка бөтөрөлгәс, 2-се Башҡорт кавалерия полкының 4-

се эскадроны командиры итеп тәғәйенләнә. Башҡорт бригадаһы таратылғас, 1921 йылдың апреленән сентябренә тиклем Румыния сигендә айырым башҡорт эскадронында хеҙмәт итә. Ошо мәлдә К. Ишмөхәмәтовты, Башҡортостанға саҡыртып алып, республика хәрби комиссариатының комендант командаһы начальнигы итеп тәғәйенләйҙәр.

1922 йылдан Тамъян-Катай кантоны милицияһы начальнигы, 1923 йылдан кантондың финанс бүлегендә, 1924 йылдан социаль тәьминәт бүлеге, 1927 йылдан ер идаралығы начальнигы булып эшләй.

1928 йылда Кинйәбай Ишмөхәмәтов Тамъян-Ҡатай кантонының башҡарма комитеты рәйесе итеп ҡуйыла. 1931 йылда Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссары вазифаһына тәғәйенләнә. Был вазифала уға оҙаҡ эшләргә насип булмай. 1937 йылдың 26 сентябрендә НКВД органдары тарафынан ҡулға алынып, ике айҙан, 27 ноябрҙә атыла. 1956 йылда реабилитациялана.



## Ибраһим Мортазин

Ибраһим Ғаззали улы Мортазин Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙе Күбәләк-Тиләү улысының (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Муса Мортазиндың өс туған ҡустыһы.

Беренсе донъя һуғышына алынып, унтер-офицер дәрәжәһендә ҡайта. 1918 йылда ағаһы Муса Мортазин менән Тамьян-Ҡатай кантонында 1-се Башҡорт кавалерия полкын ойоштороуҙа ҡатнаша. Артабан ошо полк сафында хеҙмәт итә. Архив документтарында 1919 йылдың ғинуарында 1-се Башҡорт кавалерия полкының командиры корнет Муса Мортазин менән бергә 2-се эскадрон командиры прапорщик Мортазин телгә алына (ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 9. Л. 112.). Ул Ибраһим Мортазин булһа кәрәк.

Башҡорт командованиеһы 1918 йылда, милли армияны башҡорт командирҙары менән тулыландырыу маҡсатында, Ырымбурҙа прапорщиктар курстары асып, элекке унтер-офицерҙарҙы уҡытып, прапорщик дәрәжәһенә күтәрә. Шулай уҡ улар яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн дә яңы званиеларға лайыҡ була. Мәҫәлән, Герман һуғышынан кесе фейерферкер (артиллериялағы унтер-офицер дәрәжәһен) булып ҡайтҡан Муса Мортазин башҡорт ғәскәрендә корнет (кавалериялағы

звание) чины ала.

Ибраһим Мортазин 1-се Башҡорт кавалерия полкы сафында 1919 йылдың февралендә ҡыҙылдар яғына сыға. Артабан Башҡорт бригадаһы составында Урал фронтында казактарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Бригада 1919 йылдың декабренән алып 1920 йылдың апрель аҙағына тиклем Ырымбур ҡалаһы янындағы Ҡарғалы биҫтәһендә тора.

1920 йылда Польша фронтында Ибраһим Мортазин Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының 28-се полкы менән командалыҡ итә. Фронтҡа килеү менән ул етәкселек иткән 28-се полк яуҙарҙа ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Ибраһим Мортазин үҙен ҡурҡыу белмәҫ, оҫта командир итеп күрһәтә

“*Киевтан сигенеп барыусы дошман 14 июндә бөтә көсө менән Зарудье ауылына ташланды. Ауылда башҡорт частары тора ине. Дошмандың 60-сы Краков пехота полкы иртә менән ҡапыл ғына көньяҡтан 27-се полк участкаһына бәреп инде лә полк штабын алды. Комбриг бригадаға ниндәй көстөң ябырлыуын асыҡлағас, полктарға Зарудьены алырға, дошманға ундағы күперҙе шартлатырға форсат ҡалдырмаҫҡа бойороҡ бирҙе.*

*28-се полк Ирша йылғаһының уң ярынан һөжүм итте. 1-се полк фронттан һөжүм итте һәм өс сәғәткә һуҙылған көслө һуғыштан һуң дошман ҡамауҙа ҡалды, уның бер өлөшө генә ҡулсаны йырып сыға алды; бер батальондың штабы, 18 пулеметы беҙҙең ҡулға күсте, 250 кешеһе тораҡланды, үҙебеҙҙең 27-се полк штабы ҡотҡарылды. Был һуғышта 28-се полк командиры И. Мортазин иптәштең сая батырлығын билдәләмәй мөмкин түгел*”, – тип яҙа Муса Мортазин үҙенең китабында.

Бригада Киевтан сигенеп барған дошмандың артынан ҡалмай ҡыуа. 21 июндән 22-һенә ҡарай төндә Башҡорт бригадаһы *Игнатополь ауылын алып, шунда туҡтала. “Таң алдынан дошман, ике полкы менән беҙҙе һул яҡтан уратып үтеп һәм Жерев йылғаһындағы күпергә барып етеп, көтмәгәндә Игнатополде ҡаманы һәм бригада штабына һөжүм итте. Һаҡта торған полк, дошман бронепоезы утына эләгеп, сигенгән, һәм полк менән штаб араһында бәйләнеш өҙөлгән. 28-се кавалерия полкы, штабтың комендант командаһы һәм батарея (ике туп) ҡамауҙа ҡалды. Бригада частары сая һуғыштарҙан һуң төньяҡ-көнсығыш йүнәлешентә ҡулсаны өҙөп сыға алды; 28-се полк берниса тапҡыр контрһөжүмгә ташланды һәм, ҙур юғалтыуҙар*

*кисереп, ҡоралдарын һаҡлап килеп сыҡты, бригада штабын да сығарыуға өлгәште. Юғалтыуҙар: 28-се полк командиры И. Мортазин, эскадрон командиры Андреев, 60 ҡыҙылармеец үлде, 27-се полк штабы юғалды. Һуғыштың уңышһыҙ бөтөүенең сәбәптәре: элемтәнең насарлығы, яҡшы карталарҙың булмауы, һаҙлы ерҙең һыбайлы сафтарға һуғышырға ҡамасалауы*", – тип яҙа Муса Мортазин.



Ибраһим Мортазинды ерләгән мәлдә. Польша фронты. 1920 йыл.

Шул уҡ көндө бригада, полктарын тәртипкә килеп, көндөҙгө сәғәт 4-гә Игнатополь ауылын яңынан баҫып ала. Батырҙарса һәләк булған 28-се полк командиры Ибраһим Мортазиндың ерләйҙәр.

Муса Мортазин "Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышында" китабында бирелгән "Башҡорт частарының Граждандар һуғышында ҡаһарманлыҡ күрһәткән яугирҙарының исемлеге"ндә Ибраһим Мортазинды Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде, тип яҙа. Әммә "Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием" исемле китапта (Мәскәү, 1926) уның исеме телгә алынмай. Ибраһим Мортазин тураһындағы мәғлүмәт был китапҡа ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында инмәй ҡа-

лғандыр, ахыры. Сөнки ул китапта Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы штабы начальнигы Заһит Гәрәевтең дә исеме юҡ, ләкин уның Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнеүе яҡшы билдәле.



## Әхмәҙей Мортазин

Әхмәҙей Фәүәрис улы Мортазин 1883 йылда Ырымбур губернаһы Верхнеруальск өйәҙе Күбәләк-Тиләү улысының (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Муса Мортазиндың ике туған ағаһы. Ауылда мәҙрәсә тамалай. Батша армияһында хеҙмәт итеп ҡайта. Беренсе донъя һуғышы башланғас уны тағы армияға алалар. Бында ул өлкән унтерофицер званиеһын ала. 1917 йылда 42-се пехота дивизияһында хеҙмәт итә. Ошонда коммунистар партияһы сафына алына.

Хеҙмәттән ҡайтҡас Әхмәҙей Мортазин Верхнеуральск өйәҙе советы ағзаһы итеп һайлана. Күбәләк-Тиләү улысында совет властын урынлаштырыуҙа ҡатнаша. "*В 1918 году я служил в уездном совете в г.Верхнеуральске. В том же году я был делегирован уездным советом на съезд в Москву и во время следования в Москву под Уфой я был захвачен белыми, которыми и отправлен было в г.Верхнеуральск*", – тип яҙа үҙе тураһында Ә.Мортазин.

Верхнеуральскийға китеп барышлай Ҡаҙаҡкол ауылында

уны аҡтар яғында ойошторолоп ятҡан 1-се Башҡорт кавалерия полкына алып ҡалалар. Артабан ул ошо полк составында 1919 йылдың февралендә ҡыҙылдар яғына сыға, март аҙағында Муса Мортазиндың полкы кире аҡтарға сыға. Әхмәҙей Мортазинда уның составында йөрөй.

1919 йылдың авгусында, Мортазиндың полк Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы үҫеп етеп, кире ҡыҙылдар яғына сыҡҡан саҡта бригаданың тәьминәт бүлеге начальнигы, артабан 5-се (артабан 27-се) полктың хужалыҡ бүлеге начальнигы булып хеҙмәт итә. Бригада менән Урал, фронтында казактарға ҡаршы һуғышып йөрөй. 1920 йылда поляктарға ҡаршы һуғышта ҡатнаша.

Муса Мортазин үҙенең китабында яҙыуынса Әхмәҙей Мортазин Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Әммә “Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием” исемле китапта (Мәскәү, 1926) уның да исеме телгә алынмай. Индерелмәй ҡалыуы ихтимал.

Фроттан ҡайтҡас, Әхмәҙей Мортазин Күбәләк-Тиләү улысы башҡарма комитеты рәйесе итеп һайлана, һуңынан Арғаяш кантонында эшләй. 1921 йылда партия сафтарын таҙартыу эше башлана. 1921 йылдың ноябрендә РКП(б)-ның Тамьян-Катай кантоны комитеты Әхмәҙей Мортазиндың аҡтар яғында булыуын иҫкә төшөрә. “*1. Преувеличение своего партийного стажа т.е. в бытность у белых выдавал себя за коммуниста. 2. Был в Комсоставе у Колчака, у генерала Анненкова по личному заявлению Абаимова принимал участие в истреблении красных полков, и целый ряд других заявлений обличающего в антисоветской работе*”, – тип Ә. Мортазинды партиянан сығаралар. Партиянан сығарған саҡта тартып алынған партбилеты уның “Личное дело”һында һаҡлана (ЦГАОО РБ. Ф.22. Оп.2. Д.492.). Ф. Мортазиның партия билетында бик тә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр теркәлгән. “Были ли за границей и где” тигән графала: “в Японии и Китае”, – тип яҙылған. Әхмәҙей Мортазин был илдәргә ҡасан һәм ни рәүешле барып йөрөгән булғандыр, билдәһеҙ.

Ул 30-сы йылдарҙың аҙағында Учалы алтын приискыларында эшләй. 1937 йылдың 24 авгусында Әхмәҙей Мортазин НКВД тарафынан ҡулға алына. Был ваҡытта инде Муса Мор-

тазин да НКВД органдары ҡулында аҫтында була. Өс айҙан ашыу төрмәлә утырғандан һуң, 1937 йылдың 8 декабрендә Ә. Ф. Мортазин атыла. 1956 йылдың 16 июнендә реабилитациялана.

# Дауыт Мортазин

Дауыт Лут улы Мортазин 1893 йылда Ырымбур губернаһы Вернеруальск өйәҙе Күбәләк-Тиләү улының (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Муса Мортазиндың бер туған ҡустыһы.

Башҡортостан Республикаһының йәмәғәт берекмәләренең үҙәк дәүләт архивында һаҡланған партия билетындағы (ЦГАОО РБ. Ф. 22. Оп.2. Д.493.) “Какие местности хорошо знаете?” тип исемләнгән графала Дауыт Мортазин: “Москва, Петроград, Харьков” тип күрһәткән. Тимәк ул, 1918 йылда аҡтар яғында Башҡорт армияһы сафында хеҙмәт итеп, 1919 йылда февралендә башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Башҡорт кавалерия дивизияһы составында Көньяҡ фронтта Деникин ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан булһа кәрәк. Башҡорт полктары 1919 йылдың июнендә тап Харьков янында генерал Деникиндың ғәскәренә ҡаршы ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша.

1919 йылдың көҙөндә Башҡорт кавалерия дивизияһы Петроград фронтына, генерал Юденичҡа армияһына ҡаршы ташлана. 1920 йылдың башында дивизия, Новгород губернаһына күсерелеп, һуғыштан иҫән ҡалған яугирҙары бер полкка туплаһып, 1920 йылдың майында Польша фронтына Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһына оҙатыла.

Дауыт Мортазин тап ошо рәүешле ағаһы Муса Мортазиндың бригадаһына барып ҡушылғандыр, моғайын. Мәскәү, Петроград, Харьков ҡалаларында революцияға тиклем әрме хеҙмәте ваҡытында булғандыр, бәлки

Нисек кенә булмаһын, 1920 йылда Дауыт Мортазиндың Польша фронтында Башҡорт кавалерия бригадаһының эскадрон командиры вазифаһында йөрөүе билдәле. Муса Мортазин үҙенең китабында Дауытты яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде тип яҙа. Әммә “Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием” исемле китапта (Мәскәү, 1926) Д. Л. Мортазиндың исеме телгә алынмай. Инмәй ҡалғандыр, күрәһең.

Фронттан ҡайтҡас, Дауыт Мортазин Күбәләк-Тиләү улысы башҡарма комитеты рәйесе булып эшләй. 1921 йылдың

көҙөндә Партияны таҙартыу комиссияһы Дауыт Мортазиндың да эшенә тотона. Уны “организовывал ячейку называемую кагармановскую, которая находилась в горах производила грабежи. Состоял в рядах Колчака командиром” партиянан сығаралар. Ул 1926 йылда туберкулез менән ауырып вафат була.

# Һарун Мортазин

Һарун Фәүәрис улы Мортазин 1893 йылда Ырымбур губернаһы Вернеруальск өйәҙе Күбәләк-Тиләү улының (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Әхмәҙей Мортазиндың бер туған, Муса Мортазиндың ике туған ҡустыһы.

Һарун Мортазин 1918 йылдан Әмир Ҡарамышев исемендәге 1-се Башҡорт кавалерия полкында хеҙмәт иткән булһа кәрәк. Артабан ошо полк составында ҡыҙылдар яғына сығып, 1919 йылдың март аҙағында Муса Мортазин менән кире ақтарға китеп, август аҙағында Башҡорт кавалерия бригадаһы сафында ҡабат ҡыҙылдарға сыҡҡан, күрәһең.

1920 йылда ул Муса Мортазиндың кавалерия бригадаһында взвод командиры булып йөрөй. М. Мортазин үҙенең китабында яҙыуынса Һарун Мортазин Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән. Әммә “Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием” исемле китапта (Мәскәү, 1926) Һ.Ф.Мортазиндың исеме телгә алынмай.

Ләкин был китапта тулы исемлек бирелгән тип әйтеп булмай. Мәҫәлән, М. Мортазиндың исемлегендә Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы штабы начальнигы Заһит Гәрәев Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән тип телгә алына. Әммә “Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием” китабында Заһит Гәрәевтың да исеме юҡ, ләкин уның был орденға лайыҡ булыуы тураһында ышаныслы мәғлүмәттәр бар. Шуға уның исеме инмәй ҡалдғандыр тип фекер йөрөтөргә урын бар.

Муса Мортазин Һарунды үҙенең китабында килтергән исемлектә “үлде” араһында тип телгә ала. Әммә “Яу ҡырында һәләк булды” тип яҙмай. Тимәк, Һарун Мортазин, Польша фронтынан иҫән ҡайтып, 1920–1927 йылдар тирәһендә донья ҡуйған булып сыға.



## Ғәҙелша Ейәнсурин

Ғәҙелша Дәүләт улы Ейәнсурин 1894 йылда Ырымбург губернаһы Ырымбур өйәҙенең Буҫтыбай ауылында (хәҙерге Күгәрсен районы) тыуған. Сәйетҡол ауылында ике синыфлы урыҫ-башҡорт училищеһында уҡый. Артабан Ырымбур ҡалаһында Хөсәйеновтың типографияһында эшләй.

1915 йылда Беренсе донъя һуғышына алынып, уҡыу командаһына ебәрелә. Унтер-офицер званиеһы ала. Көнбайыш фронтта 104-се пехота полкының взвод командиры булып хеҙмәт итә, унда өлкән унтер-офицер дәрәжәһе бирелә. 1917 йылдың декабрендә фронттан ҡайтҡас, 2-се Ҡара-Ҡыпсаҡ улысы идараһында делопроизводитель булып эшләй.

Башҡортостан автономияһы төҙөлгәс, һәләтле егетте Ҡыпсаҡ кантоны башҡармаһына эшкә алалар. Бында ул кантондың суд бүлеген етәкләй. 1919 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре советтар яғына сыҡҡас, Башревкомдың бойороғо буйынса Ҡыпсаҡ кантон башҡарма комитетын ойоштороу менән шөғөлләнә.

Әммә ауырып китеп, тыуған ауылына ҡайта, был осорҙа Башҡортостан территорияһын аҡтар баҫып ала. Колчак ғәскәренә хеҙмәткә алына. Белов корпусындағы кавалерия

полкында хеҙмәт итә. 1919 йылдың авгусында Орск янында аҡтар сигенә башлаған, бер төркөм башҡорт һалдаттары менән ҡыҙылдар яғына сыға. Һалдаттарҙы төрлө частарға тараталар. Ғ. Ейәнсурин, яңы ғына ҡыҙылдар яғына сыҡҡан Мортазин бригадаһына барып эләгә.

1919 йылда Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһында эскадрон командиры сифатында Урал фронтында казактарға ҡаршы һуғышып йөрөй.

1920 йылда апрелендә Башҡорт кавалерия бригадаһы составында Польша фронтына китә. Бында ул 27-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны командиры булып хеҙмәт итә. 1920 йылдың көҙөндә петлюрасыларҙы ҡыйратҡанда Ғәҙелша Ейәнсурин Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. 1921 йылдың 29 сентябрендә Киев хәрби округы Реввоенсоветы фарманында: "*1-се эскадрон командиры Ейәнсурин Ғәҙелша иптәш – 1920 йылдың 14 ноябрендә Юзвин ауылы янында, иптәштәрен үҙенең ҡыйыулығы менән рухландырып, үҙҙәрен уратып үтергә маташыусы дошманға ҡаршы алып киткәне һәм атыусы бер пулеметты, ике пулеметсыны һәм йәнә биш әсир алғаны өсөн*" орден менән бүләкләнә тиелә. Награда 1922 йылдың 7 февралендә Республика Реввоенсоветының 34-се һанлы фарманы менән раҫлана.

1920 йылдың декабрендә Башҡорт кавалерия бригадаһы өс полктан ике полкка ҡалдырылған, Ғ. Ейәнсурин 2-се Башҡорт кавалерия полкының эскадрон командиры итеп тәғәйенләнә.

1921 йылдың декабрендә Башҡорт хәрби комиссариаты тарафынан Стәрлетамаҡ ҡалаһына (ул саҡтағы Башҡортостандың баш ҡалаһы) саҡыртып алына һәм атлы конвой командаһының начальнигы итеп тәғәйенләнә, һуңынан БашЧК-ла бүлек начальнигы вазифаһында эшләй.

1923 йылдың мартында ул Йылайыр кантонына милиция начальнигы урынбаҫары итеп ебәрелә, артабан БАССР Баш судының Йылайыр кантонындағы вәкиле итеп тәғәйенләнә. 1925 йылда Тамъян-Ҡатай кантонына күсерелә, һуңынан Арғаяш кантонына. 1928 йылдан Өфөлә, БАССР прокуроры ярҙамсыһы вазифаһын башҡара. 1934 йылдан БАССР-ҙың коммуналь хужалығы халыҡ комиссары булып эшләй.

30-сы йылдарҙың репрессияһы уны ла урап үтмәй. 1937 йылдың 9 июлендә, буржауз-милләтселектә ғәйепләнеп ҡулға

алына, дүрт айҙан ашыу төрмәлә ултырғандан һуң, 27 ноябрҙә атыла. 1956 йылдың 21 майында реабилитациялана.

# Йырлап килә Мортазиндың эскадрондары

## Мөғәлләм Мирхәйҙәров хәтирәләре



Мөғәлләм Мирхәйҙәров.

Әбйәлил районы Асҡар ауылында йәшәүсе табип Марсель Мирхәйҙәровта атаһы – фольклорсы, сәсән Мөғәлләм Шәйхəттәр улы Мирхәйҙәровтың (1900–1974) хәтирәләре һаҡлана. Был хәтирәләр Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, башҡорт ғәскәрҙәре тарихын өйрәнеүҙә ҡиммәтле сығанаҡ булып тора. Унда бигерәк тә легендар комбриг Муса Мортазиндың сардарлыҡ сифаттары асыҡ һүрәтләнгән. Асҡар ауылының 19 йәшлек егете Мөғәлләм Мирхәйҙәров Мортазиндың полкында ылаусы булып йөрөй. Шунда ул 1919 йылдың февраль аҙағы һәм март башындағы Асҡарҙа булып үткән ҡанлы бәрелештәрҙең шаһиты була. Әйткәндәй, был ваҡиғалар легендар комбригтың “Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышында” исемле китабында ла бәйән ителә.

“Атайым был хәтирәләрҙе 1965 йылда яҙып ҡалдырған. Совет йылдарында районың “Осҡон” гәзитендә гел генә Смоленск полкын маҡтап яҙҙылар. Ә бына Муса Мортазин тураһында бер һүҙҙә яҙмай торғайнылар. Был хәтирәләр үҙенең дөрөҫлөгө менән ҡиммәтле”, - тигән үҙенең хатында Марсель Мирхәйҙәров. Эйе, совет заманында маҡталып, ә ысынында ябай халыҡты талауҙан башҡа бер нәмәне белмәгән, аҡтар килһә, ҡурҡы п ҡасып йөрөгән Смоленск полкы хаҡында хәҙер беҙ яҡшы беләбеҙ. Мөғәлләм Мирхәйҙәровтың иҫтәлектәре лә тап шул тарихи фактты тағы бер тапҡыр раҫлай. Икенсе яҡтан ул Муса Мортазиндың ҡурҡыу белмәҫ сардар ғына түгел, ә бик оҫта артиллерист булыуын да асыҡ һүрәтләгән. Китап уҡыусыларға ошо хәтирәләрҙең ҡыҫҡартылған вариантын тәҡдим итмәксемен:

“1919 йылдың 28 февраль көнө. Ҡар күптән яумағанлыҡтан, иртәле- кисле әсе, сасҡау һыуыҡ тора. Көн урталарында ғына әҙ-мәҙ генә йылыраҡ ине. Ҡайһы бер төндәрҙә көнбайыштан көслө ел иҫеп торғас, йөрөш юлдар таҡырланған. Бараһы ерҙәргә бер ҡыйынлыҡһыҙ йөрөп ҡайтырға була ине. Яуған ҡарҙы ел тау итәктәренә, ҡыраҙ аҫтарына, һаҙлыҡтарға, ағаслы соҡорҙарға көрт итеп, ҡайһы бер урындарға ҡатырып та, йә өҫтән генә генә ҡатыра биреп, аҫтын ярмаландырып өйгән ине.

Яйыҡ йылғаһы буйында урынлашҡан казак ауылдары Николай батша яҡлы булып, артабан да илдә монархияның хөкөм һөрөүен теләйҙәр ине. Шуның өсөн дә ундағы казактар атаман Дутов, Беловтарҙы яҡлап, уларҙың отрядына ҡушылды. Ошо ауылдарҙың ир-егеттәре бөтәһе тиерлек адмирал Колчактың армияһында булды. Казактар Уралдың көнсығышында йәшәгән башҡорт ауылдарын баҫып торҙо.

1918 йылдың июнь айында атаман Анненков (аҡ генерал) отряды менән Аҫҡарға килеп, һуғышҡа кешеләр биреүҙе талап итеп, улыс старшинаһы алдында ультиматум ҡуйҙы. Йәштәрҙән 700-800 кешене туплап, Ҡурған, Ҡустанай яҡтарындағы ҡыҙыл партизандарға ҡаршы һуғышҡа алып китте. 1898, 1899, 1900 йылдарҙа тыуған күп кенә башҡорт йәштәре һуғышта ятып ҡалды. Бик һирәктәре генә тыуған ауылдарына имен-һау әйләп ҡайта алды. (был ваҡиғаларҙы Муса Мортазин үҙенең китабында былай тип бәйән итә: “*1-се башҡорт кавалерия полкы 1918 йылдың июнендә ойоштторола башланы. Кавалерия полкын комплектлау өсөн Тамъя-Ҡатай кантонының Күбәләк-Тиләү, Тамъян-Түнгәүер, Ҡатай һәм Туңғатар улыстары бүленде. Әммә Вәлидовтың 1-се Башҡорт кавалерия полкын төҙөү тураһында фарманы сыҡҡан көндәрҙә аҡ гвардеец Анненков беҙҙең полк кешеләр һәм аттар аласаҡ кантонға һөжүм итте. Кантонды баҫып алған Анненков Башҡорт кавалерия полкының команда составына тик рус казак офицерҙарының ғына ҡуйылыуын талап итте һәм теләгенә иреште. Тәүге һуғышта уҡ казак офицерҙары (эскадрон командирҙары) сафтан сыҡҡас, полктың иҫән ҡалған өлөшө 1-се эскадронға (полктың казактарға буйһонмаған өлөшө) ҡушылды.*” – А. Я.).

Аҫҡар ауылы улыс үҙәге булғас, бында ҡыҙылдар ҙа, аҡтар ҙа килеп китеп торҙолар. Тәү мәлдәрҙә һирәк-һаяҡ ҡына бәре-

лештәр булып торҙо. Ҡанлы һуғыштар булманы.

1919 йылдың 19 февралендә башҡорт халҡы ысынлап, үҙе теләп ҡыҙылдарға ҡушылды. Көнсығыштан һөжүм иткән, Уралға баҫып инеп килгән Колчак ғәскәрҙәрен туҡтатыу өсөн Асҡарға, Тамъян-Түңгәүер улысына, Башҡорт армияһы тарафынан Муса Мортазиндың кавалерия полкы һәм, уға ҡушып Смоленск йәйәүле полкы ебәрелә. 28 февралдә Асҡарға Муса Мортазин полкы килә, тип хәбәр таралды. төштән һуңырак үрге ауыл осонан, Темәс яғы юлынан килгәндәре күренде. Муса Мортазиндың атлылары, «Эскадрон», «Күгәрсен», «Марш» көйҙәренә һалынған йырҙарҙы йырлап шаулатып, тын ғына ултырған Асҡарҙы яңғыратып килеп инде.

Айырым-айырым булып дүрт эскадрон, улар артынса йөк тейәлгән аттар, ҡайһылары саналарға ултырған байтаҡ ҡына йәйәүле һалдаттарҙың килеүе күренде. Ауыл халҡы, бигерәк тә йәштәр, үҫмерҙәр уларҙың йырлашып килгән тауыштарына елкенеп, дәррәү ҡаршы алырға сыҡты. Барыһы ла бергәләп ул саҡтағы баҙар урынына, хәҙерге «Дежурка” һәм “Культ һәм йыһаз” магазиндары эргәһендә туҡталдылар. Муса Мортазин һәм Смоленск полкы штабы менән Асҡарҙа ҡалды, ә атлылар Дауыт ауылында урынлашты. Ауыл старостаһы уларҙы һәр йортка бүлеп бирҙе. Ул саҡта Яйыҡ буйындағы казак ауылдары Колчак армияһы частары ҡулында ине. Аҡтар Урал эсенә һөжүм итергә әҙерлек алып барҙы. Шулай уҡ Белорет ҡалаһы улар ҡулында ине. Әүжән, Үҙән, Егәҙе, Стәрле ҡалаһы яғына һөжүм итәләр ине. Колчак ғәскәре Баймаҡ, Темәскә ҡарап та баралар ине. Беҙҙең Асҡар ауылы ла фронт һыҙығында булды. Аҡтарҙың күҙәтеү (разведка) төркөмдәре Ҡоръятмаҫ тауы итәгендә йыш күренәләр ине. Яйыҡ буйындағы ауылдар казак отрядтары менән тулы. Улар, көр аттарында бараһы урындарға тиҙ генә елеп барып, ҡайһы берҙә һөжүм дә яһайҙар ине. Көндәр йылыныу менән казактарҙың һөжүме лә йышайҙы. Уларҙың Ташбулат, Таштимер, тауҙағы Мөхәмәт, Исхаҡ, Буранғол ауылдарына һөжүм итеүе күренә башланды.

Муса Мортазин һәм Смоленск полктарының ҡоралдары ошонан ғибәрәт ине: биш пулемет, ике өс дюймлы туп, дүрт эскадрон атлылар, винтовка менән ҡоралланған йәйәүле һалдаттар һәм хужалыҡ взводы. Снаряд һәм патрондар самалы ғына. Икенсе төндә үк, ятыр алдынан ҡупҡан ғауғаға күтәрелеп Мор-

тазиндың бер эскадроны менән беҙҙә ятҡан пулеметсылар (Смоленск полкы) Салауат яғынан баҫып килгән казактарға ҡаршы китте. Улар иртәнсәк, таң атыуға, М. Мортазиндың полкынан берәүҙе юғалтып, береһе ярыланып ҡайттылар. Беҙҙә ятҡан пулеметсылар: “Ой, казактар күп һәм көслө киләләр, белмәйем ни булыр, имен-һау ғына үҙ яғыбыҙға әйләнеп ҡайтканда бәхетле булыр инек, әлдә беҙ имен әйләнеп ҡайттыҡ”, – тип, үҙ-ара һөйләшәләр ине. Муса Мортазин полкының ике эскадроны Салауат ауылынан аҡтарҙы ҡыуып сығарғас та, ике взвод йәйәүле һалдаттарҙы оборона тоторға ҡалдыра.

Икенсе көн иртә менән туптар ултырған урында туп тауышы һәм ауылдың Магнитҡа ҡараған яғынан осонан, Иҙәш йылғаһы яҡлап, пулемет тауышы ишетелде. Ауыл халҡы, йәштәр, үҫмерҙәр туп шаулап, дөрһөлдәп атҡан урынға йыйылды. Ҡоръятмаҫ тауы битендә улай ҙа, былай ҙа үткән кешеләр күренә. Күп тә үтмәй юл буйлап 12 һыбайлы күренде. Улар Иҙәш күперенә килеп етер-етмәҫтән  ауыл осонда ултырған пулеметтан ут асылды. Улар пулемет уты аҫтында кирегә әйләнеп ҡастылар. Смоленск полкының артиллерия орудиеһы башлығы юл буйлап ҡасҡан әлеге атлыларға бер туптан ата башланы. Снарядтар казактарҙың тирә-яғына төшкөләп ярыла, улар ҡурҡа төшөп, аттарын йән-фарман ҡыуып тирә-яҡҡа таралышып, Ҡоръятмаҫ тауына сабалар, ҡасалар. Ҡыуыуға ҡарамаҫтан, ауыл йәштәре орудие янынан йыйылышҡан. Мин дә унда бар инем. Муса Мортазин орудие эргәһенә килеп, теге командирҙан: “ҡана, бир әле миңә бинокленде тип, һорап алды ла, ноль - ноль 92”, – тип орудиеға наводка биреүе булды, атып ебәргән снаряд юлдан ҡасып барған 5–6  казатың бер яғына төшөп шартлап, бер казак шунда ҡолап ятып ҡалды. Юлдан юл ситләп ҡасҡандарҙың артынса бер-бер артлы снарядтар төшөп, казактарҙы ҡуян һымаҡ ҡасырға мәжбүр итте. Бар көскә аттарын ҡыуалап, Ҡоръятмаҫ тауына үрмәләй башланылар. Үренә мендем тигәндә генә снаряд тағы бер һыбайлыны атынан йыға һуҡты. Аты үлде, үҙе әлгә-йығыла мылтығын ҡулына тотоп, тау башына көскә күтәрелеп, ашаһына төшөп үлемдән ҡотолоп ҡалды. Муса Мортазиндың снарядтарҙы туп-тура аҡтарҙың өҫтөнә яуҙырыуын күреп, ауыл халҡы уны оҫта тупсы ла (артиллерист) икән, тип хайран ҡалып, үҙ-ара һөйләште (*Был ғәжәп түгел сөнки Мортазин 1912–1914 йылдарҙа Алыҫ Көнсығышта артиллерия бри-*

*гадаһында хеҙмәт итә. 1913 йылда өйрәнсектәр командаһында уҡып, бомбардир (наводчик) исемен ала. Беренсе донъя һуғышында, 1914 йылдың сентябренән 1917 йылдың майына тиклем 9-сы Себер уҡсылар артиллерия бригадаһында кесе фейерверкер (артиллериялағы кесе унтер-офицер чины) булып Көнбайыш һәм Румыния фронтарында утты-һыуҙы кисеп ҡайта –* А.Я.).

1-се Башҡорт полкының да, Смоленск полкының да көстәре тирәләге ауылдарға ебәрелмәне, һаҡлыҡта тотолдо. 4 март көнө иртә таң алдынан атыш башланды. Смоленск полкы һәм ауылдағы 60-лаған боевой дружина отрядтарына шул яҡ ауыл ситенән уларға ҡаршы мылтыҡтан, пулеметтан ата-ата, ауылға яҡын һаҙлыҡтан килгән казактар күренә. Бер 3 дюймлы тупты Көләшә битләүенә ултыртып, ауылға ҡарап аталар. Асҡарҙа хәл ҡырҡыулаша башланы. Бер снаряд беҙҙең кәртәгә, икенсеһе мейес торбаһына килеп тейҙе. Мортазин Дауытҡа сапҡынсы ебәреп, ундағы 3-сө эскадронға казактарҙың артына сығып, Һыртан һаҙы, Йомаҡа яғынан һөжүм итергә бойороҡ бирә. Был һөжүмгә казактар ҡаршы тора алмай Иҙәш ҡусҡары яғына сигенеп, ҡасып ҡотолғандар.

Казактарҙың Белорет ҡалаһы яғынан килеп, Исхаҡ һәм Буранғол ауылдарын баҫып алғандары ишетелде. Муса Мортазин бер эскадрон менән Смоленск полкын Асҡарҙа ҡалдырып, өс эскадроны менән Буранғол, Исхаҡҡа китте. Ундағы казактарҙы ҡыуып сығарған арала, иртә менән, сәғәт 10-дарҙа аҡтарҙың 1200 кешелек ғәскәре тағы ла Асҡарҙы килеп баҫты. Мылтыҡ, пулемет тауыштары ишетелә, тағы ла, Көләшә битенә ултыртып, туптан ауылға ҡарай ата башланылар. Асҡарҙа ғауға күтәрелде, урамда ыҙғыш. Ауыл ситендә атыш бара, Ҡырҡтытау битендә мылтыҡ тотоп, атыша барған һалдаттар күренә.

Ауыл халҡы күберәген Алмас, Фәйез тауҙарының битендә, Таңатар йылғаһы менән быуа араһында йыйылған. Беҙ ике ылауҙа икешәр йәшник снаряд тейәп, Темәс юлына ҡарап барабыҙ. Подводчик һәм йәйәүле һалдаттар быуа тирәһенә тығылышҡан. Снарядтар беҙҙең ян-яҡҡа яуҙарыла. Мортазиндың атлылары ылауҙағы һәм йәйәүле һалдаттарҙы, сигенгәндәрҙе: “Давайте, не отступать! На рассыпную!”, – тип бер урындан икенсе урынға баралар. Взвод командиры Ғәббәс Рыҫҡолов ҡамсыһын болғап: “Ҡурҡмағыҙ! Кире боролоғоҙ!”, – тип һөрән

һала. Лəкин бер паникаға бирелгəн һалдаттар, сигенеүен, ҡасыуын дауам итə. Казактар ҡыҫа. Тегенəн дə, бынан да аталар. Ҡайһы берəүҙəре өҫкə үк менеп килə. Шулай атыша-атыша барып сигенеп, һигеҙ саҡырымда ятҡан Ҡолҡас ауылына барып еттек.

Бер аҙ хəл алдыҡ. Хəҙер Ҡолҡасты үтеп, Ҡыҙыл аша сығып, юл буйлап Ҡыһыҡ тирмəненə ҡарап барабыҙ. Бер соҡор урында снарядтар тейəлгəн йəшнигем төшөп китте лə, уны бер үҙем күтəрə алмайым. Һалдаттарҙың (Смоленск полкынынҡылар – А.Я.) береһе лə ярҙамлашмай. Инəлəм, ə улар миңə иғтибар ҙа итмəй, Ҡырҙас ауылы яғына барыуҙарын белəлəр. Бер таныш атлы һалдат ҡына (Мортазин полкынан – А.Я.) снарядттарымды йəшнигемə һалышты. Бер аҙ барғас, алдағы йəйəүле һалдаттар, аҡтар беҙҙе алдан килеп сығып ҡаманылар, тип, сананан төшөп, Ирəндек битенə үрелə башланы. Бер аҙҙан һуң: «Эй, не бойтесь, свои, Муртазинцы нас остановили», – тип беҙгə тауыш бирəлəр. Һалдаттар алға ҡарай китə башлағайнылар, Мортазин атлылары: «Куда! Вернитесь обратно, в Аскарово, без всяких гвоздей!», – тип беҙҙе – ылауҙарҙы һəм һалдаттарҙы ла кире борҙолар. Күп тə тормай, юл ситлəп Мортазиндың атлылары үтə башланы. Хəҙер, беҙ казактарҙы Асҡарҙан бəреп сығарабыҙ, тиҙəр. Ул арала эйəрсəн офицерҙары менəн Мортазин үҙе үтеп китте һəм уларҙың артынан Смоленск полк командирҙары штабы менəн эйəрҙе. Мортазин: «Мы вот покажем как воюют, они еще не видали огненного боя», – ти. Хəҙер, беҙ күрмəгəндəрен, күрһəтəбеҙ, тип, барыбыҙ ҙа улар артынан ҡалмай сабабыҙ.

Асҡарға бер ниҙə булмаған кеүек килеп индек. Ауылда ла, юлда ла бер казак күренмəй. Уларҙан елдəр иҫкəн. Мортазин килгəнен белеп ҡалып, улар уттан ҡурҡандай, тиҙерəк һыпыртыу яғын ҡарағандар. Беҙҙəге пулеметсылар тағы ла беҙгə килде. Мин дə атымды снарядтар тейəгəн көйө əйлəндем. Пулеметсылар: «Ой-ой, злой, твердый, настоятельный командир. Страха и смерти не знает. На наших командиров как он нажал, плетка над ними так играет. Два-три раза ударил нашего командира, говорит: «Так, разве воюют, разве так отстаивают власть рабочих и крестьян», – тип һөйлəшəлəр. Атайым ҡарт, күтəрелеп, ҡупырайып китте: «Да мы его ни первый раз знаем. Он такой вояка. От него казаки как от бури боятся. Не раз он с

ними воевал. Прошлым летом одного белого генерала чуть не поймал. Да его бы он убил бы, ладно, не попал», – тине. Белов генералды саҡ-саҡ тотмай ғына ҡалғанын үҙем дә белә инем. Ул һары ҡом төҫөндәге еңел машинала Ишҡол яғына ҡарап ҡасҡанын үҙем күрҙем (был һуғыш тураһында Мортазин үҙе былай нимә тип яҙа: *"дошман, Магнит тирәһенә ике кавалерия һәм бер пехота полкын туплап, 18 мартта көтмәгәндә 1-се Смоленск полкының Әбйәлил (Асҡар) ауылында торған ике батальонына һөжүм иткән. Ҙур юғалтыуҙарға тарыған батальондар, туптарын һәм һуғыш кәрәк-яраҡтары тейәлгән ылауын ҡалдырып, дошмандың көслө ҡыҫымы аҫтында Әбйәлилдән (Асҡарҙан) Ҡырҙас ауылына сигенгән.*

*Батальондарҙың сигенеүе шул тиклем тиҙ булған, хатта ул турала 1-се Башҡорт кавалерия полкы командирына (*Мортазинға – А.Я.) *хәбәр ҙә ебәрелмәне. Полк командиры был ваҡытта бер эскадронды Таҡһыр-Дәүләтша, икенсеһен Ишҡол-Тупаҡ йүнәлешенә ебәреп, үҙенең төп көсө - бер туплы һәм 6 пулеметлы ике эскадроны менән Рауилда тора ине. Башҡорт кавалерия полкының Смоленск полкы батальондарындағы делегаты, ҡыйралыш ваҡытында шунда булып, саҡ-саҡ сығып ысҡына алған һәм, полк командирына килеп, хәлде һөйләп бирҙе Полк командиры, әлеге шарттарҙы баһалап ҡарағандан һуң, полкка сигенергә ярамай, тигән ҡарарға килде, сөнки сигенеү ҡыҙылдарҙың полкка булған шик-шөбһәһен арттырасаҡ ҡына ине. Шуға ла, ауыр юғалтыуҙар хаҡына булһа ла, уның аҡтарға һөжүм яһарға ҡыйыулығы етте һәм, бер эскадронды Таҡһыр-Дәүләтша һәм Ишҡол яғынан һөжүм итеүсе полктың флангыһын һаҡлау өсөн ҡалдырып, бер туплы өс эскадрондың һәм ылаусыларҙан, пехотанан, пулеметсыларҙан торған взводтың һөжүмен ойошторҙо. Был һөжүмгә шундай бурыс ҡуйып эшләнелде... һөжүм бөтә ерҙә лә бер ваҡытта башлана. һөжүмдең көтөлмәгәндә булыуы тетрәткес тәьҫир итәсәк ҡаушап төшкән казактар, ҡаршылыҡ күрһәтә алмайынса, йөҙәрләгән үлектәрен һәм әсирҙәрен ҡалдырып, шулай уҡ әле генә Смоленск полкынан баҫып алған ылау менән артиллерияны ташлап, тиҙ генә һыпыртасаҡ. Ғәмәлдә шулай булып сыҡты ла. Тик ауылдан һөрөп сығарылғанға тиклем казактар үҙҙәренең ҡара эштәрен башҡарып өлгөргән инде. Башҡорттарҙы талағандар, бер нисәһен сығарып атҡандар. Шуға ла алыу халҡы полкты*

*шатланып ҡаршыланы.*" – А.Я.)

Асҡар ауылы 3-4 көнгә һаҡҡа алынды. Хәлил, Күсей, Ҡаҙмаш ауылдары алынды, тип хәбәр иттеләр. Ишҡолда аҡтар тора, тип сапҡын килеп әйтте. Иртәгеһен Мортазин полкы менән Гусевка, Ишҡол ауылдарына йүнәлде. Смоленск полкы Асҡарҙа оборонала ҡалды. Гусевканан аҡтар ҡасты, Ишҡолға һуңға ҡалғас, боролоп Рауил ауылына туҡтап төн үткәрҙек. Таң атыуға Смоленск взводы килеп, Асҡарҙы тағы аҡтар алған, тип хәбәр итте. Мортазин Асҡарға ҡарай юл алды. Дошман снаряды етә алмаç, Асҡарҙан 2-2,5 саҡырым алыçлыҡтағы Суҡ ерек (Ерек) йылғаһы эргәһендә туҡтап, ул Ғәббәс Рыçҡоловҡа: "Һин эскадроның менән үҙ ауылыңа (Ярлыҡап ауылына) һөжүм ит. Ер һиңә таныш", – тине. Ә Фәттәх Ибраһимовҡа: "Ылаусылар менән анау түбәгә мен дә төш, мен дә төш. Көс ағыла тип уйлаһындар", – тине. Ә, Смоленск взводы командирына: "ты, иди своими бойцами вон, в сугроб и смотри. Махну плеткой вперед подымайся, махну назад ложись", – тип бойороҡтар бирҙе. Үҙе орудиегә яҡынлап, биноклен алды һәм наводка бирә башланы. Беҙҙең туптың утынан казактар һөрлөгөшөп ҡаса башланы. Шул ваҡытта Асҡарға Ғәббәс Рыçҡолов эскадроны килеп инде. Һуңынан, Асҡарҙың Дауыт ауылына киткән осонда аҡтарҙың 10-12-ләп аты, күп кенә офицер, һалдаттары юҡ ителеүе асыҡланды".

1919 йылдың февраль-март айҙарында үҙе шаһит булған бына ошондай шанлы йылдар ваҡиғалары хаҡында хәтирәләрен яҙып ҡалдырған Мөғәлләм Мирхәйҙәров. Үрҙәге хәтирәләрҙең авторы – Мөғәлләм Шәйхәттәр улы Мирхәйҙәровтың үҙе тураһында бер нисә һүҙ әйтеп үтке килә. Башҡорт халҡына "яҡты" тормош алып килгән большевиктар ғына маҡталып, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең исемен телгә алыу ҙа милләтселеккә һаналған осорҙа Муса Мортазин тураһында иçтәлек яҙып ҡалдырыу ул ҙур батырлыҡ. Сөнки тап ошо осорҙа, 1963 йылда, тарихсы Билал Юлдашбаев Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтен һәм БАССР-ҙың төҙөлөү тарихын объектив яҡтыртырға тырышҡаны өсөн КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетында һәм КПСС Үҙәк Комитеты пленумында тәнҡитләнә, һуңынан эшенән бушатыла.

Ошондай хәтирәләр яҙып ҡалдырыусылар күп булһа, тари-

хыбыҙ ҙа тулыраҡ, байыраҡ булыр ине. Әммә бындай яҙмалар бик һирәк шул, үкенескә ҡаршы. Үҙенең осоро кеүек Мөғәлләм Мирхәйҙәровтың да тормошо һикәлтәле һәм ҡатмарлы була. Ул, Белорет педагогия техникумын тамамлап, 20-се йылдарҙа балалар уҡыта. Бынан тыш, ҡолас йәйеп, халыҡ ижадын йыя, тарихты өйрәнә. Әммә коллективизация башланып, нахаҡҡа кешеләрҙең малын тартып алып һөргөнгә ебәрелеүен күреп йәне әсей. Түҙмәй юғарыға, шулай уҡ гәзиттәргә хаттар яҙа. Оҙаҡламай үҙен дә төрмәгә ябып ҡуялар. Калининға яҙған хаты арҡаһында ғына ҡотола.

1932–1933 йылдарҙа "Башҡортостан" гәзите мөхәрририәтендә эшләп ала. 1937 йылдаң декабрендә Мөғәлләм Шәйхәттәр улы репрессияға эләгә. 10 йыл буйы Углич төрмәһендә ултырып сыға. 1947 йылда тыуған ауылына ҡайтып төшә. 1974 йылдың мартында донъя ҡуйғанға тиклем буш ваҡыттарын ижад, халыҡ ижады өлгөләрен йыйыуға, тарих буйынса мәҡәләләр, иҫтәлектәр яҙыуға бағышлай. Яҡташтары араһында сәсән буларак та танылыу тапҡан М. Мирхәйҙәров бәйет һәм шиғырҙар ҙа ижад иткән. Төрмәлә ултырған сағында ҡайһы бер шиғырҙарына үҙе үк йырҙар яҙған булған.

## 1918 йылдағы “ҡыҙыл террор”
## йәки Блюхер отрядтарының“героик” походы тураһында бер кәлимә

90-сы йылдар башында илебеҙҙә демократик үҙгәрештәр башланыу менән тарихи үткәндәребеҙгә яңы ҡараш тыуҙы. Был бигерәк тә граждандар һуғышы осоро тарихына объектив баһа бирергә мөмкинлек асты. Ошо рәүешле халҡыбыҙға Башҡортостан автономияһының ысын тарихы асылды. Автономия өсөн милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан күп кенә шәхестәребеҙҙең исемдәре халҡыбыҙға ҡайтты. Башҡорт халҡының бөйөк улы Әхмәтзәки Вәлиди, ҡаһарман сардар Муса Мортазин, милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре Ғәлимйән Таған, Әбделҡадир Инан, Шәриф Манатов һәм башҡалар тураһында белдек. Дөрөҫөрәге, коммунистик режим ҡолау менән, милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан шәхестәребеҙҙең исемдәрен күтәреп сығырға мөмкинлек тыуҙы.

Һуңғы осорҙа төрлө уйҙырмалар ярҙамында Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте тарихына, унда ҡатнашҡан эшмәкәрҙәргә бысраҡ өйөү тенденцияһы күҙәтелә башланы. Милли хәрәкәт лидеры Зәки Вәлиди “фашист” ярлығы тағырға, легендар комбриг Муса Мортазинды бандит, итеп күрһәтергә тырышалар һәм уның исеме мәңгеләштерелеүгә лайыҡ түгел тип яр һалалар. Әлбиттә, кемдәргәлер башҡорт халҡының данлы тарихы оҡшап етмәй, күрәһең. Уларҙың совет осорондағы кеүек тарихыбыҙҙы үҙҙәренә кәрәксә яҡтыртырға теләктәре бик көслө, буғай. Ысулдары шул уҡ совет замандарындағы кеүек төрлө уйҙырмалар аша ғәйепләү.

Мәҫәлән, совет осоронда тарихсы Билал Хәмит улы Юлдашбаев (ул саҡта тарих фәндәре кандидаты, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының тарих секторы мөдире) Муса Мортазиндың исеме күтәреп сыға. 1959 йылда “Әҙәби Башҡортостан” журналында баҫылған “Муса Мортазин” исемле мәҡәләһендә ул легендар комбригтың эшмәкәрлегенә объектив баһа бирергә тырыша. 1961 йылда милли хәрәкәткә бағышланған тағы бер мәҡәләһе донъя күрә. Партия идеологтары бындай ҡарашҡа юл ҡуймай: 1963 йылдың 12 июнендә КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты бюроһы ултырышында Б. Х. Юлдашбаев

мәҡәләләре өсөн ҡаты тәнҡит утына тотола. “*В статье “Муса Муртазин” т. Юлдашбаев выдает Муртазина за организатора советской власти в период, когда он на стороне белых отчайнно сражался против Красной Армии.*

*Признавая службу Муртазина у белых весной и летом 1919 года, он рисует его на положении вынужденного попавшего в плен, приводя в доказательство многие эпизоды из книги самого же Муртазина, которая является явной фальцификацией истории гражданской войны в Башкирии*

*Башкирский партийный архив располагает материалами, убедительно показывающими зверства и бесчинства Муртазина по отношению к красным и местному населению. Из документов явствует, в частности, что в период рейда Блюхера, когда белорецкие полки с боями пробивались к Уфе на соединение с регулярными частями Красной Армии, особенно жестоко преследовала их башкирская конница под командованием Муртазина*”, – тиелә бюролағы сығыштарҙа.

Совет осоронда Блюхер етәкселегендәге партизан отрядтарының Ҡыҙыл Армияға барып ҡушылыу тарихын ниндәйҙер бер ҙур ҡаһарманлыҡ, “героик поход” итеп һүрәтләнеләр. Күп китаптар яҙҙылар. Совет осорондағы китаптарҙа ҡыҙыл партизандар “герой”, аҡтар – “ҡанһыҙ йыртҡыстар” күрһәтелде. Ә бына архив документтары бөтөнләй икенсе картинаны һүрәтләй.

1918 йылдың май аҙағында Силәбе ҡалаһында Чехословак корпусы большевиктарға ҡаршы баш күтәрә һәм властыүҙ ҡулына. Июнь башында Өфөнө азат итә. Тиҙҙән Ырымбур ҡалаһын Дутов баҫып ала. Ошо рәүешле Башҡортостан территорияһындағы большевиктар ҡамауҙа тороп ҡала. Ырымбурҙа торған Блюхер менән Кашириндар етәкселегендәге ҡыҙылдар Маҡар ауылына килеп туҡтай. Бында 8 июль көнө Әмир Ҡарамышев етәкселегендәге башҡорт отрядтары менән ҡыҙылдар араһында ҡаты һуғыш була. Ҡыҙылдар Белорет заводына сигенә.

Ошоға үс итеп, Блюхер отрядтары юлындағы башҡорт ауылдарын ҡот осҡос йәберләүҙәр, ысын мәғәнәһендә, террорға дусар итә. 1918 йылдың 7 июлендә Зәки Вәлиди Силәбе ҡалаһынан Омскийға көнбайыш Себер армиялары командующийына былай тип телеграмма һуға: “*Скрывающиесяв горах,*

*ущельях, мелких заводах, рудниках, хуторах красноармейские банды терроризируют горных башкир, отбирают привозимый из соседних, теперь недоступных, хлебородных уездов хлеб, скот, массами расстреливают население. То же делается среди башкир Златоустовского, Красноуфимского уездов. А часть оренбургских красных появились в Юмагузинской, Каракипчакской волостях Оренбургского уезда, Тангауровской, Бурзянской волостях Орского уезда, Арслановской, Бушман-Кипчакской, Азнаевской волостях Стерлитамакского уезда*".

Икенсе телеграммала: "*Большевики, отрезываемые, со всех сторон – Верхнеуральского, Стерлитамакского, Орского, Оренбургского уездов, начали безжалостно терроризировать башкирское население, мстят им за их выступление против Советов*", – хәбәр итә Омскийға Зәки Вәлиди һәм ҡыҙылдарға ҡаршы көрәшеү өсөн аҡса, ҡорал менән ярҙам итеүҙе һорай.

Ә инде 24 июлдә подполковник Шаһихәйҙәр Аҡсулпанов Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Силәбегә, Башҡорт хәрби шураһына: "*В горном районе Стерлитамакского уезда красногвардейцы вырезают башкир. Люди в ужасе: помогите несчатью по просьбе азнаевцев*", – тип телеграмма һуға.

Шулай итеп, Блюхер менән Кашириндың отрядтары үҙҙәренең бөтөн ҡеһөрөн ауылдарҙағы ябай башҡорт халҡына төшөрә. Июль аҙағына Блюхер менән Кашириндарҙың отрядтары Белорет заводына килеп туҡтала. Бында уларға Белорет заводы эшселәренең отряды, Верхнеуральск һәм Троицк отрядтары ҡушыла. Хәҙер инде йыйылма отрядының һаны 10 мең кешелек булып китә.

Ҡыҙылдар Белореттан Верхнеуральск ҡалаһы аша Екатеринбургҡа барып, 3-сө Ҡыҙыл Армияға ҡушылырға уйлайҙар. Аҡ командование ҡыҙылдарҙы Верхнеуральск ҡалаһына үткәрмәү өсөн айырым фронт ойоштора. Блюхерҙың партизан армияһына ҡаршы тороу бурысы яңы төҙөлөп ятҡан башҡорт ғәскәрҙәре һәм казактар иңенә төшә. Әле ойошторолоп та бөтмәгән 1-се Башҡорт кавалерия полкы, 5-се башҡорт пехота полкы һәм Тамъян-Ҡатай ирекле отряды Верхнеуральск фронтына ташлана. Уларға ярҙамға өс казак полкы килә. Бындағы башҡорт ғәскәрҙәре менән ҡаһарман сардар ротмистр Әмир Ҡарамышев командалыҡ итә. Аҡ командование ҡыҙылдарға ҡаршы, тәү сиратта, башҡорттарҙы ҡуя. Ҡорал менән яҡшы тәь-

мин ителеүгә ҡарамаҫтан, башҡорт һалдаттары дошман менән аяуһыҙ һуғыша.

Блюхерҙың армияһы 29 июлдә, Вернеуральскийға яҡынлап, башҡорттар һәм казактарҙың көслө ҡаршылығына осрап, ҡаланы алалмай. Өс-дүрт көн тирәһе ҡанлы алыштарҙан һуң, 3 август ҡыҙылдар кире Белорет заводына сигенергә мәжбүр була. Бында уларға Архангельский һәм Богоявленский заводтарынан тағы ике отряд килеп ҡушыла. Блюхер үҙенең партизан армияһының ғәскәрҙәре 6 полкка тиклем үҫә. Был үҙе бер дивизия. 5 август көнө ун меңдән ашыу кешенән торған Блюхерҙың йыйылма бандаһы Урал тауҙары аша Стәрлетамаҡ ҡалаһына юллана. Ҡыҙылдарҙы ротмистр Әмир Ҡарамышев командалыҡ 1-се Башҡорт кавалерия полкы (әйткәндәй, 1918 йылдың йәйендә Блюхерҙың партизандарына ҡаршы һуғышҡан осорҙа Муса Мортазин 1-се полкта эскадрон командиры вазифаһында ғына була) эҙәрлеклəй.

Ҡыҙылдар Ағиҙел буйындағы башҡорт ауылдарын талап, ҡырып үтә. Бер аҙнанан Стәрлетамаҡ өйәҙенең Петровский ауылына (хәҙерге Ишембай районы) килеп туҡтайҙар. Бында ҡыҙылдар менән башҡорттар араһында тағы ҡанлы бә*релеш була: “Ауылыбыҙҙан биш саҡырым Петровск тигән урыҫ ауылында ла 11–12 августа ҡаты һуғыш булды. Мин 9 август кисендә, автомобилгә ултырып, янымдағы өс һаҡсы менән Ырымбурҙан Мәләүез янына, унан, икенсе полктан ебәрелгән атҡа ултырып, үҙ ауылыма килеп, был һуғышта ҡатнаштым. Ҡыҙылдар ҡаса ине. Беҙ бер офицер менән, ғәскәрҙән айырылыбыраҡ, Йүкәле тигән ерҙән Кашириндарҙың Егән йылғаһы аша ҡасыуын ҡарап торҙоҡ. Тарҡау хәлдә ҡасҡан каширинсыларҙы бинокль аша күҙәтеп була ине. Ата башлаһаҡ, беҙҙең тарафҡа йүнәлерҙәр, тип тауыш сығарманыҡ. Бер аҙҙан ғәскәребеҙ ҙә килеп етте. Күпер аша йәйәүләп тә, һыбай ҙа ҡасыусы ҡыҙылдар һуғыш яраҡтарынының күбеһен ташлап китте…*”, – тип яҙа хәтирәләрендә Зәки Вәлиди.

Петровскийҙан сигенеп, ҡыҙылдар Стәрлетамаҡҡа йүнәлә. Бында Стәрлетамаҡ гарнизонының ҡаты ҡаршылығына осрап, ҡалаға инә алмай төньяҡҡа сигенә. Артабан ҡыҙылдар Ағиҙел, Еҙем һәм Эҫем йылғалары буйында Ғәлимйән Тағандың 3-сө Башҡорт пехота полкы һәм 3-сө Ырымбур казак дивизияһы частары менән һуғыша, 29 август Әмир Ҡарамыштың 1-се Ба-

шҡорт кавалерия полкы, 1-се чех ротаһы һәм поляк легионы менән бәрелешә. Бында ла ҡыҙылдар башҡорт ауылдарын туҙҙырып үтә. "*Стерлитамакской уезде – в районе Дуван-Табынска, Архангельска, Зилим-Каранова по реке Белой – большевики подвергли башкирские деревни губительному опустошению. В Дуван-Табынской и Архангельской волостях они увели с собой до 300 женщин и девушек. Надругались также над остальными. В деревне Зилим-Караново, отобрав 17 девушек, поделили их между собой по жребью. Те, кого увезли, до сих пор удерживаются в неволе при красноармейских штабах*", – тип хәбәр итә 1918 йылдың 26 авгусында "Башҡортостан хөкүмәтенең теле" гәзите.

2 сентябрҙә Блюхерҙың отрядтары Красная Горка ауылы янында Ҡариҙел йылғаһы аша сығып, ун көндән 3-сө Ҡыҙыл Армияға барып ҡушыла. "Көньяҡ Урал башҡорт ауылдарында улар күп холом яһаны, хатта арбаларының күсәрен умарта ватып алған бал менән майлай торған булғандар. Башҡорттар Совет дошманы булған казактар менән берләшкәс, ҡыҙылдарҙың яуызлығы тағы ла арта төштө", – тип яҙа Зәки Вәлиди.

Шулай итеп, Каширин һәм Блюхер етәкселегендәге ҡыҙылдарҙың йыйылма бандалары 1918 йылдың йәйендә үҙҙәренең "героик" походы барышында башҡорт халҡына ҡарата ҡылған яуызлығы буйынса, XVIII быуатта башҡортто ҡан илатҡан Тәфтиләүҙе уҙҙырмаһа, бер ҙә ҡалышмағандар. Совет власы Блюхерҙың "героик" походта күрһәткән "ҡаһарманлыҡтарын" юғары баһалай. Шул уҡ йылда уҡ уға РСФСР-ҙың тәүге ордены – Ҡыҙыл Байраҡ орденын беренсе булып уға тапшыра. Ә инде Граждандар һуғышы тамамланғас, Блюхер етәкселегендәге Урал йыйылма отрядының "героик" походы тураһында миф тыуҙырыла башлай. "*15–18 августа Ғәлимйән Таған менән Ғабдулла Ғәмбәров етәкселегендәге 3-сө Башҡорт полкы Кашириндар менән Өфөнөң көнсығышында Иглин станцияһы янындағы Ирныҡшы тигән ерҙә өс көн һуғышып, уларҙы тағы ҡаты еңелеүгә дусар итте. Әммә большевиктар бында үҙҙәренең саҡ-саҡ үлемдән ҡотола алыуҙарын "Уралда граждандар һуғышы" исемле китапта 3-сө Башҡорт полкының еңелеүе тип тасуирлай*", – тип яҙа Зәки Вәлиди.

Еңеүсегә хөкөм юҡ тигәндәй, 1918 йылдың йәйендә ябай башҡорт ауылдарында ҡот осҡос золомдар ҡылып йөрөгән

ҡыҙыл партизандар, совет осоронда геройҙарға әүерелде. Өфөнөң урамы Блюхерҙың исемен йөрөтә. Бөгөн дә көндә лә уларҙың ысын “ҡаһарманлыҡтары” тураһында – нисәмә йөҙәрләгән кеше ғүмерен нахаҡҡа ҡыйғандары хаҡында яҙылғаны юҡ. Әммә тарихи дөрөҫлөк, ҡасан да булһа өҫкә ҡалҡып сығырға тейеш, әлбиттә. Хәҙерге көндә республикабыҙҙа 30-сы йылдарҙың репрессия ҡорбандарына бағышланған һәйкәлдәр бар, ә бына “ҡыҙыл террор” ҡорбандарына ҡасан ҡуйылыр икән?




## Башҡорт кавалерия бригадаһының Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән яугирҙары

Граждандар һуғышы осоронда башҡорт ғәскәрҙәре, шул иҫәптән Муса Мортазиндың кавалерия бригадаһы яугирҙарының батырлыҡтарын Ҡыҙыл Армия командованиеһы артыҡ баһалап бармай. Күп осраҡта Совет власы өсөн башҡорт ғәскәрҙәре “үгәйһетелгән бала” сифатында була. 1919 йылдың февралендә ҡыҙылдар яғына сыҡҡан башҡорт ғәскәрҙәренә тәүҙә революционн тоғролоҡҡа ихтиман тоторға тура килә. Уларҙы орден менән бүләкләү тураһында һүҙ ҙә булмай. 1919 йылдың август аҙағында ҡабат ҡыҙылдар яғына сыҡҡан Башҡорт кавалерия бригадаһын Урал фронтына ташлайҙар. Башҡорт атлылары үҙҙәренә һалынған бурысты теүәл үтәп сыға. Күп кенә батырлыҡтар күрһәтә. Бригада һуғышта 60 процент самаһы составын юғалта. Муса Мортазин ҡайһы бер яугирҙарҙы Ҡыҙыл Байраҡ тәкдим итеп ҡарай, әммә наградалар бирелмәй, сөнки Башҡорт кавалерия бригадаһы өсөн Урал фронты ул совет власына тоғролоҡ ихтиханы була.

1919 йылдың көҙөндә башҡорт ғәскәрҙәрен Петроград

фронтына ебәрәләр. Бында инде башҡорт яугирҙары күпһәткән батырлыҡтары өсөн әҙме, күпме баһа ала. Башҡорт кавалерия дивизияһының комиссары Н. Таһировҡа эйәр, Башҡорт республикаһы хәрби комиссары урынбаҫары Ә. Ишмырҙинға ҡылыс бүләк ителә, Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары Ғ. Ибраһимов, Петроград фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре төкөмө командиры Х. Әлишев, 2-се Башҡорт уҡсы полкы командиры Н. Таһиров, 3-сө Башҡорт кавалерия полкының йыйылма эскадроны командиры И. Малиновский һәм яугир Ғөзәйер Төхвәтуллиндың Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнеүе билдәле.

Башҡорт яугирҙары күпләп Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән тик 1920 йылда Польша фронтында һәм Петлюра армияһын ҡыйратҡанда күрһәткән батырлыҡтары өсөн лайыҡ була. Әммә, бында ла, орден менән бүләк тураһында фармандар бер, ике йылдан һуң ғына донъя күрә. 1920 йылда Башҡорт кавалерия бригадаһынан Ҡыҙыл Байраҡ орденын тик Муса Мортазин ғына ала. Бригаданың күп яугирҙары орден менән 1921 йылда бүләкләнә. Мәҫәлән, Реввоенсоветтың 57-се фарманы менән Польша фронтындағы батырлыҡтары өсөн байтаҡ башҡорт яугирҙары Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Орден менән бүләкләнеү тураһындағы мәғлүмәт Башҡортостанға 1922 йылдың йәйендә генә килә. БАССР-ҙың хәрби комиссары матбуғатта 10 кешегә РВСР-ҙан Ҡыҙыл Байраҡ ордендары ебәрелеүе тураһында яҙа:

“*Военный комиссариатом БССР из Революционного военного совета Республики получены ордена Красного знамени бойцам польского фронта:*

*Бывшему командиру 1-го Башкирского кавполка т. Ашрапову, ныне состоящему на должности заведующего агитационно-прапогандического отдела Башобкома РКП(б). Орден № 12098. Приказ РВСР 1921 г. № 57.*

*Бывшему командиру 27-го Башкирского кавполка т. Шарипову, позднее состоявшему военкомом Яланского кантона и ныне работающему в Башобкомпомголе. Орден № 12091. Приказ РВСР 1921 г. № 57.*

*Бывшему помощнику комполка 27-го Башкирского кав. т. Зиннурову, состоящему последнее время на должности военного комиссара Тамьян-Катайского кантона и умершему от*

*тифа в нынешнем году. Орден № 12092. Приказ РВСР 1921 г. № 57.*

*Бывшему коменданту штаба Башкавбригады т. Хакбердину, убитому бандитами в пути следования домой с фронта в Тамьян-Катайском кантоне. Орден № 120100. Приказ РВСР 1921 г. № 57.*

*Бывшему командиру 1-го эскадрона 27-го Башкавполка т. Шайхисламову, ныне находящемуся в Тамьян-Катайском кантоне. Орден № 12093. Приказ РВСР 1921 г. № 57.*

*Бывшему помощнику командира 1-го эскадрона 27-го Башкавполка т. Фаттахетдинову, ныне находящемуся в Тамьян-Катайском кантоне. Орден № 12095. Приказ РВСР 1921 г. № 57.*

*Бывшему командиру взвода 4-го эскадрона 27-го Башкавполка т. Казнабаеву, ныне находящемуся в Тамьян-Катайском кантоне. Орден № 12096. Приказ РВСР 1921 г. № 57.*

*Бывшему помощнику командира 28-го Башкавполка и бывшему военному комиссару Бурзян-Тангауровского кантона т. Ибрагимову. Орден № 12097. Приказ РВСР 1921 г. № 57.*

*Бывшему командиру 4-го эскадрона 27-го Башкавполка – ныне помощнику военного комиссара Бурзян-Тангауровского кантона – т. Гафарову. Тов. Гафаров уже удостаивается вторичным награждением орденом Красного знамени. Орден № 12094. Приказ РВСР 1921 г. № 57.*

*Орденом Красного знамени вышеуказанные товарищи награждаются за различные геройские подвиги на польском фронте в боях против польских белогвардейских банд.Ордена будут вручены по принадлежности при торжественной обстановке.*

*“Вечная пам'ять павшим героям – вечная слава героям живым”.*

Үрҙәге документтан күренеүенсә, ҡайһы бер башҡорт яугирҙары үҙҙәренең лайыҡ наградаларын күрмәй үлеп киткән була. Мәҫәлән, һуғыштан ҡайтып, Тамъян-Ҡатай кантоны хәрби комиссары эшләп йөрөгән элекке 27-се полк командиры ярҙамсыһы Зиннуров, Бригаданың штабы коменданты Хаҡбирҙин.

Башҡорт кавалерия бригадаһының элекке яугирҙары артабан, 1922 һәм 1925 йылдарҙа ла Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. 1922 йылда Хәлфетдин Фәттәхетдиновты икенсе

тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләү тураһында фарман сыға. Әммә, ни сәбәптәндер, орден уға килеп етмәй. Улы яҙыуынса, Х. Фәттәхетдинов, икенсе Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнеүе тураһында белмәй вафат була.

Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән яугирҙар тарихын өйрәнеүҙә, Муса Мортазиндың "Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында" (Өфө, Китап, 1994 йыл) китабы ҡиммәтле сығанаҡ булып тора. Унда автор "Башҡорт частарының граждандар һуғышында ҡаһарманлыҡ күрһәткән яугирҙарының исемлеге"н килтергән. Бында яугирҙарҙың исем фамилияһы, вазифаһы, наградаһы һәм үлгән йәки иҫән булыуы тураһында иҫкәрмәһе бар. М. Мортазин "Етерлек мәғлүмәттәр булмау сәбәпле, бында граждандар һуғышы ҡаһармандарының тулы исемлеген килтерә алманыҡ", – тип иҫкәрмә бирә. Ысынлап та был исемлектең етешһеҙлектәре күп. Унда, мәҫәлән, яугирҙарҙың исемдәренең тик баш хәрефе генә бирелгән. Икенсенән, ҡайһы бер фамилияларҙың дөрөҫ бирелмәгәнлеге асыҡлана.

Һорау тыуҙырған тағы бер мәсьәлә ул М.Мортазин исемлегендә Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән, тип күрһәтелгән күп кенә яугирҙарҙың исеме башҡа сығанаҡтарҙа телгә алынмай. Мәҫәлән, 1926 йылда Мәскәүҙә баҫылған, йәғни Мортазиндың китабынан бер йыл алда сыҡҡан, "Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени и Почетным революционным оружием" китабында (интернет варианты) Мортазин исемлегендә булған күп кенә яугирҙар юҡ. Мәҫәлән, Муса Мортазин үҙенең китабында Дауыт, Әхмәҙей, Һарун, Ибраһим Мортазиндарҙы Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде тик яҙа. Үрҙә телгә алынған китапта уларҙың исеме юҡ. Раҫлай алырлыҡ башҡа сығанҡтар ҙа тапманым әле.

Шул уҡ ваҡытта "Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени и Почетным революционным оружием" китабында ла тулы исемлек бирелгән тип, әйтеп булмай, сөнки Мортазин исемлегендә булған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы штабы начальнигы Заһит Гәрәев был китапҡа инмәгән. Әммә уның Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградаланыуы билдәле.

Ошоно иҫәпкә алып, Мортазин исемлегенә, "Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени и Почетным рево-

люционным оружием" китабына һәм башҡа документаль сығанаҡтарға таянып (ЦГАОО РБ. Ф.10287. Оп.1. Д.78., Улар тәүгеләр ине (Ҡаһармандар хаҡында документтар) // Ағиҙел. 1970, №2.) РСФСР-ҙың Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән башҡорт ғәскәрҙәре яугирҙарының түбәндәге исемлеген төҙөнөм. Бында мин М. Мортазин исемлегендә булмаған байтаҡ ҡына яугирҙары асыҡланым, булғандарының исем шәрифе, Башкавбригадала биләгән вазифаһын дөрөҫләнем. Иң мөһиме бында яугиҙарҙың Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләү йылын, Реввоенсоветтың фарманын һәм ниндәй ҡаһарманлыҡ күрһәткәндәрен килтерҙем, асыҡлай алғандарын.

Тикшеренеү һөҙөмтәһендә шул асыҡланды: Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһынан өс кеше – Муса Мортазин, Шәмсетдин Ғафаров, Хәлфетдин Фәттәхетдиновтар Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән ике тапҡыр бүләкләнгән. Шулай уҡ 27-се полк командиры Хисаметдин Фәйзуллиндың да биографияһында Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән ике тапҡыр бүләкләнеүе яҙыла, ләкин документтар менән раҫланмай. Китап уҡыусылар өсөн был исемлек ҡыҙыҡлы һәм файҙалы булыр, тип ышанам.

1. **Абдуллин Рәхмәтулла** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының пулемет командаһы яугиры. Киев хәрби округы РВС-нің 2163-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РСФСР-ҙың Революцион хәрби советының (Реввоенсовет Республики, РВСР) 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: "*Гоноровка ауылы янындағы һуғышта быуаны баҫып алып, үҙенең пулемет уты менән 175 дошман һалдатын бирелергә мәжбүр итте*".

2. **Айляров Казбек** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

3. **Айытов Зөбәйҙулла** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы политругы. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-нің 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: "*политрук Айытов Зөбәйҙулла һәм ҡыҙылармеец Ғәббәсов Ғәзим иптәштәр – Пилявы ауылы янындағы һуғышта үҙ ҡулдары менән дошмандың 2 орудиеһын һәм 2 пулеметын алғандары өсөн*".

4. **Андреев А.** – Бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

5. **Белевич Денис** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны старшинаһы. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: “*1-се эскадрон старшинаһы Белевич Денис, взвод командиры ярҙамсыһы Миңлевәлиев Әбделхалиҡ һәм кавалерист Ҡатаранов Ғәметдин иптәштәр: башҡорт кавалерия частары дошмандың ҡыҫымы аҫтында Литин ҡалаһынан сигенгән саҡта әлеге иптәштәр комбриг башлығында беренсе булып дошманға контрһөжүмгә ташландылар, дошмандың сафтарында паника тыуҙырҙылар, шуның менән беҙҙең частарға ойошҡан рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙеләр*”.

6. **Беленький Иосиф** – бригаданың комиссары. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

7. **Башев** – 27-се Башҡорт кавалерия полкы комиссары. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

8. **Воробьев Владимир Петрович** – 27-се Башҡорт кавалерия полкы хәрби комиссары ярҙамсыһы. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

9. **Годунов Борис** – бригаданың 2-се еңел артиллерия дивизионы батареяһының комиссары. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

10. **Горбатов Александр Васильевич** – бригаданың командиры. РВСР-ҙың 115-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

11. **Гофицкий Виктор Оскарович** – бригаданың комиссары. РВСР-ҙың 479-сы фарманы менән 1920 йылда бүләкләнгән.

12. **Гуляев Семён** – бригаданың 2-се еңел артиллерия диви-

зионың орудие начальнигы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

13. **Гутман Р.** – бригаданың комиссары. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

14. **Ғайнанов Усман Ғайнан улы** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. СССР Реввоенсоветының фарманы менән 1928 йылда бүләкләнгән.

15. **Ғатауллин Кәлимулла** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 2-се эскадроны яугиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: “*Волочиск ҡалаһы янындағы һуғышта ул беренсе булып дошман орудиеһына ташланды һәм үҙ артынан иптәштәрен дә әйҙәне, һөҙөмтәлә беҙҙең тарафтан дошмандың өс орудиеһы алынды – бына шуның өсөн*”.

16. **Ғафаров Шәмсетдин Шәйхетдин улы** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 4-се эскадроны командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: “*4-се эскадрон командиры Ғафаров Шәмсетдин иптәшкә: 1920 йылдың 6 июнендә ул эскадроны менән 28-се кавалерия полкына ярҙамға килеп һәм Пиняево ауылына һөжүм итеп, дошман өҫтөнә һыбай һөжүмгә ташланды, уны сигенергә мәжбүр итте һәм поляктарҙың француз өлгөһөндәге орудиеһын эләктерҙе*”. Ш. Ш. Ғафаров РВСР-ҙың 353-сө фарманы менән 1921 йылдың 28 декабрендә икенсе тапҡыр бүләкләнгән.

17. **Ғиниәтуллин Әбүбәкир** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: “*Ҡыҙылармеец Ғиниәтуллин Әбүбәкир һәм Ҡәлейәнов Ҡунаҡбай иптәштәр – Зарудня ауылы янындағы һуғышта үҙ ҡулдары менән дошмандың ете пулеметын алған өсөн*”.

18. **Ғиниәтуллин Хәбибулла** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: "*Ҡыҙылармеец Ғиниәтуллин Хәбибулла иптәш – Большая Верба ауылы эргәһендәге алышта дошмандың көслө уты аҫтынан үҙ полкының командиры Ғайнанов иптәште алып сыҡҡаны өсөн*".

19. **Ғөбәйҙуллин Ғариф** – бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

20. **Ғәббәсов Ғәзим** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманында былай тиелә: "*политрук Айытов Зөбәйҙулла һәм ҡыҙылармеец Ғәббәсов Ғәзим иптәштәр – Пилявы ауылы янындағы һуғышта үҙ ҡулдары менән дошмандың 2 орудиеһын һәм 2 пулеметын алғандары өсөн*".

21. **Ғәйнуллин Г.** – бригаданың яугиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

22. **Дауытов Мозафар** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: "*старшина Солтанов Әхмәт һәм ҡыҙылармеец Дауытов Мозафар иптәштәр – уҙған йылдың 27 июнендә Зубковичи ауылы янындағы һуғышта яраланған полк командиры ярҙамсыһы Тихомиров иптәште ут аҫтынан алып сыҡҡанадры өсөн*".

23. **Ейәнсурин Ғәҙелша Дәүләт улы** – 27-се кавалерия полкының 1-се эскадроны командиры. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

24. **Зекеров Әхмәҙей** – 27-се Башҡорт кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921

йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: “*...27-се полк командиры ярҙамсыһы Зекеров Әхмәҙей иптәшкә: 1920 йылдың 11 июнендә ул биш ҡыҙылармеец менән Гезикевичи ауылында полк командиры һәм эйәрләнгән аттары менән һаҡта торған 50 казагы менән ҡуша дошмандың 84-се Дон кавалерия полкының штабын ҡулға төшөрҙө*”.

25. **Зиннуров** – 27-се Башҡорт кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. 1922 йылда вафат булған.

26. **Ибраһимов Фәттәх Әҙелмырҙа улы** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: “*28-се полк командиры ярҙамсыһы Ибраһимов Фәттәх иптәшкә: 1920 йылдың 5 июнендә Башҡорт бригадаһының Пиняево ауылына һөжүме ваҡытында ул бер эскадрон менән дошман батареяһының артына үтеп инде һәм дәррәү һөжүмгә менән уны мәсхәрәле ҡасырға мәжбүр итеп, әсирҙәр, шулай уҡ тупсылары һәм һаҡсылары менән ҡуша ике орудие, яһау йәшниге, ике пулемет һәм хәрби мөлкәт тейәлгән ылауҙарҙы эләктерҙе*”.

27. **Ибраһимов Ф.** – бригаданың йәйәүле дивизионы командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

28. **Ильясов Ғәли** – бригаданың взвод комиссары. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

29. **Ильясов Хәбибулла** – бригада штабының ат ҡараусыһы (коновод). Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: “*Штаб коноводы Ильясов Хәбибулла иптәш: уҙған йылдың 21 ноябрендә Клининцы ауылы янындағы һуғышта ул беренселәрҙән булып ауылға ингән ерҙәге дошман пулеметы өҫтөнә һөжүмгә ташланды һәм пулемет тачанкаһын ҡыуып барышлай петлюрасы офицерын юҡ итеп, пулеметты ҡулға төшөрөргә булышлыҡ итте*”.

30. **Иманғолов Байғужа** – 27-се кавалерия полкының взвод командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылдың бүләкләнгән. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: "*1920 йылдың 14 ноябрендә Гоноровка ауылы янындағы һуғышта бер иптәше менән дошман уты аҫтында ике петлюрасыны ҡыуып еткәне һәм уларҙы пулеметтары менән ҡуша әсир алғаны өсөн*".

31. **Исмәғилев Сәләх Хәйретдин улы** – бригада штабының комиссары. СССР Реввоенсоветының фарманы менән 1928 йылда бүләкләнгән.

32. **Ишмөхәмәтов Кинйәбай Хәйретдин улы** – 27-се кавалерия полкының 4-се эскадроны командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылдың бүләкләнгән. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: 1920 йылдың 21 ноябрендә Гоноровка ауылы янындағы һуғышта "*дошманды ҡыуып барышлай уның сафындағы һуғышсыларын туҙҙырғаны һәм фельдшере, медикаменттары менән ҡуша санлетучкаһын әсир алғаны, уларҙы тылға килтереп тапшырғандан һуң да тағы ла дошманды эҙәрлекләүен дауам иткәне өсөн*".

33. **Ҡаһарманов Касторанза** – 27-се кавалерия полкының взвод командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылдың бүләкләнгән. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: 1920 йылдың 21 ноябрендә Гоноровка ауылы янындағы һуғышта "*беҙҙең эскадронды аттарынан төшөп, уйһыулыҡҡа сүгергә мәжбүр иткән көслө пулемет уты аҫтында үҙенең пулеметын шул уйһыулыҡҡа алып сығып, мәргән уты менән дошман пулеметтарын тымырға мәжбүр иткәне һәм үҙебеҙҙең эскадрондарға һәләкәттән имен сығырға һәм башка частарға килеп ҡушылырға мөмкилек биргәне өсөн*".

34. **Ҡаҙнабаев Заһиҙулла Мортаза улы** – 27-се кавалерия полкының 4-се эскадронының взвод командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай

тиелә: “*1920 йылдың 6 июнендә Пиняево ауылы эргәһендә ул дошманға көслө флангы удары яһаны, уның башлаған контрһөжүмен кире ҡаҡты һәм төҙөк пулеметын ҡулға төшөрҙө*”.

35. **Ҡатаранов Ғәметдин** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: “1-*се эскадрон старшинаһы Белевич Денис, взвод командиры ярҙамсыһы Миңлевәлиев Әбделхалиҡ һәм кавалерист Ҡатаранов Ғәметдин иптәштәр: башҡорт кавалерия частары дошмандың ҡыҫымы аҫтында Литин ҡалаһынан сигенгән саҡта әлеге иптәштәр комбриг башлығында беренсе булып дошманға контрһөжүмгә ташландылар, сафтарында паника тыуҙырҙылар, шуның менән беҙҙең частарға ойошҡан рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙеләр*”.

36. **Килмөхәмәтов** – бригаданың эскадрон командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

37. **Коваленко** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

38. **Ҡәләмов** – 5-се (27-се) Башҡорт кавалерия полкының эскадрон командиры ярҙамсыһы.

39. **Ҡәләмов [Ваһап Ҡәләм улы]** – 5-се (27-се) Башҡорт кавалерия полкының эскадрон командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

40. **Ҡәлейәнов Ҡунаҡбай** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: “*Ҡыҙылармеец Ғиниәтуллин Әбүбәкир һәм Ҡәлейәнов Ҡунаҡбай иптәштәр – Зарудня ауылы янындағы һуғышта үҙ ҡулдары менән дошмандың ете пулеметын алған өсөн*”.

41. **Ҡоҙаҡаев Ҡыяметдин** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 2-се эскадроны яугиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылдың бүләкләнгән. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған.

42. **Колесов Константин** – бригаданың 2-се еңел артиллерия дивизионының пулемет начальнигы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

43. **Кудрявцев Алексей Геннадиевич** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының 2-се эскадроны командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: “*2-се эскадрон командиры Кудрявцев Алексей, атлы-пулемет взводы командиры Кучаев Локман һәм 2-се эскадрон старшинаһы Мәхмүтов Йыһанша иптәштәр – түбәндәге батырлыҡтары өсөн:*

*1920 йылдың 12 ноябрендә 1-се Башҡорт кавалерия полкы частары дошманды Кулыга ауылынан ҡыуып сығарған һәм эҙәрлекләгән саҡта үрҙә телгә алынған иптәштәр, алдынғы разведкала булып һәм дошман менән беренсе булып осрашып, көтөлмәгән һөжүме менән улар сафында паника тыуҙырҙы һәм дошман пехотаһы менән кавалерияһын туҙрап таралырға, ә батареяһын беҙҙең сафтарға атыуҙан туҡтап, позицияһын ҡалдырырға мәжбүр итте.*

*Шул уҡ йылдың 13 ноябрендә, дошмандың күп тапҡыр көслөрәк кавалерияһы 1-се Башҡорт кавалерия полкын, Литиндан ҡыҫырыҡлап сығарып, тәртипһеҙ сигенергә мәжбүр иткәс, әлеге иптәштәр, үҙҙәре артынан ҡыҙыларmeeцтарҙы әйҙәп, бер нисә тапҡыр дошманға контрһөжүмгә ташландылар, шунының менән дошман сафтарында ҡаушау тыуҙырып, сигенеп барыусы полкка хәл алырға һәм йыйынып, тәртипле рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙе. Алыштарҙың береһендә Кудрявцев иптәш атынан яҙып һәм револьверынан бөтә патрондарын атып бөтөн, дошмандың ҡылыстары аҫтында ҡаһармандарса һәләк булды.*”

44. **Кузнев Л.** – бригаданың пулемет командаһы начальнигы. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

45. **Кулаков Л.** – бригаданың яугиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

46. **Кучаев Лоҡман** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының атлы-пулемет взводы командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: "*2-се эскадрон командиры Кудрявцев Алексей, атлы-пулемет взводы командиры Кучаев Лоҡман һәм 2-се эскадрон старшинаһы Мәхмүтов Йыһанша иптәштәр – түбәндәге батырлыҡтары өсөн:*

*1920 йылдың 12 ноябрендә 1-се Башҡорт кавалерия полкы частары дошманды Кулыга ауылынан ҡыуып сығарған һәм эҙәрлекләгән саҡта үрҙә телгә алынған иптәштәр алдынғы разведкала булып һәм дошман менән беренсе булып осрашып, көтөлмәгән һөжүме менән улар сафында паника тыуҙырҙы һәм дошман пехотаһы менән кавалерияһын туҙрап таралырға, ә батареяһын беҙҙең сафтарға атыуҙан туҡтап, позицияһын ҡалдырырға мәжбүр итте.*

*Шул уҡ йылдың 13 ноябрендә, дошмандың күп тапҡыр көслөрәк кавалерияһы 1-се Башҡорт кавалерия полкын Литиндан ҡыҫырыҡлап сығарып, тәртипһеҙ сигенергә мәжбүр иткәс, әлеге иптәштәр, үҙҙәре артынан ҡыҙылармеецтарҙы әйҙәп, бер нисә тапҡыр дошманға контрһөжүмгә ташландылар, шуның менән дошман сафтарында ҡаушау тыуҙырып, сигенеп барыусы полкка хәл алырға һәм йыйынып, тәртипле рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙе.*

*Шул уҡ айҙа, беҙҙең полк сигенеп китеп барыусы Петлюра һәм Савинков бандаларын эҙәрлекләгәндә, Кучаев иптәш эҙәрлекләүселәрҙең алдында барып, дошман пулеметын дөмөктөрҙө һәм уның ылауында паника тыуҙырҙы, һөҙөмтәлә ылауҙың ҙур өлөшө беҙҙең ҡулға күсте.*

*Дошман атлылары контрһөжүмгә күсергә иткәс, һөжүм Кучаев иптәш килтереп еткерелгән пулемет уты менән баҫтырылды*".

47. **Львов П.** – бригаданың политругы. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

48. **Макаров М.** – бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

49. **Миңлевәлиев Әбделхалиҡ** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: “1*-се эскадрон старшинаһы Белевич Денис, взвод командиры ярҙамсыһы Миңлевәлиев Әбделхалиҡ һәм кавалерист Ҡатаранов Ғәметдин иптәштәр: башҡорт кавалерия частары дошмандың ҡыҫымы аҫтында Литин ҡалаһынан сигенгән саҡта әлеге иптәштәр комбриг башлығында беренсе булып дошманға контрһөжүмгә ташландылар, уны бәреп, сафтарында паника тыуҙырҙылар, шуның менән беҙҙең частарға ойошҡан рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙеләр*”.

50. **Миронов Алексей** – бригаданың 2-се еңел артиллерия дивизионы орудияһы командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

51. **Мортазин Дауыт Лут улы** – бригаданың эскадрон командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

52. **Мортазин Ибраһим Ғаззали улы** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

54. **Мортазин Муса Лут улы** – бригаданың командиры. РВСР-ҙың 524-се фарманы менән 1920 йылда һәм 353-сө фарманы менән 1921 йылда ике тапҡыр бүләкләнгән.

55. **Мортазин Һарун Фәүәрис улы** – бригаданың взвод командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

56. **Мортазин Әхмәҙей Фәүәрис улы** – 5-се (27-се) Башҡорт кавалерия полкының хужалыҡ командаһы начальнигы. Бүләк-

ләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

57. **Мөхтәров Шәрәфетдин** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны яугиры. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

58. **Мостафин Сәфәр** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: “*Ҡыҙыләрмеец Мостафин Сәфәр иптәш – уҙған йылдың 5 июнендә Пилявы ауылы янында һуғышта дошмандың ике орудиеһын һәм ике пулеметын алыуҙа күрһәткән шәхси ҡаһарманлығы өсөн*”.

59. **Мурсалов Х.** – бригаданың эскадрон комиссары. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

60. **Мәхмүтов Йыһанша** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының 2-се эскадроны старшинаһы. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: “*2-се эскадрон командиры Кудрявцев Алексей, атлы-пулемет взводы командиры Кучаев Лоҡман һәм 2-се эскадрон старшинаһы Мәхмүтов Йыһанша иптәштәр – түбәндәге батырлыҡтары өсөн:*

*1920 йылдың 12 ноябрендә 1-се Башҡорт кавалерия полкы частары дошманды Кулыга ауылынан ҡыуып сығарған һәм эҙәрлекләгән саҡта үрҙә телгә алынған иптәштәр алдынғы разведкала булып һәм дошман менән беренсе булып осрашып, көтөлмәгән һөжүме менән улар сафында паника тыуҙырҙы һәм дошман пехотаһы менән кавалерияһын туҙрап таралырға, ә батареяһын беҙҙең сафтарға атыуҙан туҡтап, позицияһын ҡалдырырға мәжбүр итте.*

*Шул уҡ йылдың 13 ноябрендә, дошмандың күп тапҡыр көслөрәк кавалерияһы 1-се Башҡорт кавалерия полкын Литиндан ҡыҫырыҡлап сығарып, тәрипһеҙ сигенергә мәжбүр иткәс, әлеге иптәштәр, үҙҙәре артынан ҡыҙылармеецтарҙы әйҙәп, бер нисә тапҡыр дошманға контрһөжүмгә ташландылар, шуның менән дошман сафтарында ҡаушау тыуҙырып, сигенеп барыусы пол-*

*кка, хәл алырға һәм йыйынып, тәртипле рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙе.*"

61. **Павлов С.** – бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

62. **Патенко М.** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

63. **Панченко Д.** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

64. **Пискунов Леонид Григорьевич** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының адъютанты. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: "*Полк адъютанты Пискунов Леонид иптәш: уҙған йылдың 21 ноябрендә Клининцы янындағы һуғышта ғәйәт көслө пулемет уты аҫтында беренсе булып дошманға ташланды һәм уның атыусы пулеметын туҡтарға мәжбүр итте; уның артынан башҡа иптәштәре лә һөжүмгә ынтылып, дошмандың ышыҡлағыс ылауын, кавалерияһын туҙҙырҙы һәм орудиеларын, пулеметтарын, ылауҙарын ҡулға төшөрҙө; шул ыңғайҙа Пискунов иптәш үҙ ҡулы менән дошмандың винтовка һәм пулеметтар тейәлгән йөгөн баҫып алды*".

65. **Рәмиев Йәғәфәр Зәкир улы** – Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы штабы комиссары. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

66. **Рыҫҡолов (Шәйхисламов) Ғәббәс Шәйхелислам улы** – 27-се кавалерия полкының 1-се эскадроны командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: "*1-се эскадрон командиры Шәйхисламов Ғәббәскә: 1920 йылдың 1 июнендә ул Днепр аша кисеп сыҡҡан 27-се кавполктың 1-се эскадронына поляктар һөжүмгә башлағанда, һыбайлылар сафында дошманға ташланып, үҙ ар-*

*тынан бөтә эскадронды әйҙәне, ғәййәр һыбай һөжүм менән ҡаршы поляктарҙың атып ятҡан бер пулеметын тартып алып, дошманды ҡасырға мәжбүр итте*".

67. **Смирнов Павел** – бригаданың 2-се еңел артиллерия дивизионының 2-се батареяһы командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

68. **Солтанов Ибраһим** – бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

69. **Солтанов Әхмәт** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының старшинаһы. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: "*старшина Солтанов Әхмәт һәм ҡыҙылармеец Дауытов Мозафар иптәштәр – уҙған йылдың 27 июнендә Зубковичи ауылы янындағы һуғышта яраланған полк командиры ярҙамсыһы Тихомиров иптәште ут аҫтынан алып сыҡҡаны өсөн*".

70. **Соров Алексей Алексеевич** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының хәрби комиссары. РВСР-ҙың 48-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

71. **Суфиянов Әбдрәхим** – бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

72. **Сөләймәнов** – бригаданың эскадрон командиры ярҙамсыһы. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

73. **Тереғолов Ғәли Усман улы** – 1-се Башҡорт кавалерия полкы комиссары, артабан бригада штабының комиссары. РВСР-ҙың 94-се фарманы менән 1923 йылда бүләкләнгән.

74. **Тихомиров Василий** – 1-се Башҡорт кавалерия полкы командирының ярҙамсыһы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: "Полк коман-

диры ярҙамсыһы Тихомиров Василий иптәшкә: Фрузиновка һәм Пенязевичи ауылдары янындағы һуғыштарҙа ул беренсе булып дошман өҫтөнә һөжүмгә ташланды, үҙ артынан эскадронды әйҙәп, дошман һалдаттарын ҡоралдары менән ҡуша әсир төшөрҙө, шуның менән әлеге ауылдарҙың беҙҙең тарафтан тиҙерәк алыныуына булышлыҡ итте".

75. **Фәхретдинов Зариф** – 1-се Башҡорт кавалерия полкының взвод командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: "*взвод командиры Фәхретдинов Зариф иптәш: дошмандың өҫтөн көстәре ҡыҫымында полктары Литин ҡалаһынан сигенгән саҡта ул, күп тапҡыр контрһөжүмгә ташланып, үҙенең ҡыйыулығы өлгөһөндә артынан взводын әйҙәне, шуның менән сигенеүҙе ойошҡан рәүештә башҡарырға булышлыҡ итте*".

76. **Фәйезов Йәләлетдин** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны яугиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылдың бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: "1-се эскадрон ҡыҙылармеецы Фәизов Йәләлетдин иптәш – Клининцы һәм Гоноровка ауылдары янындағы һуғышта ул дошмандың ғәрәсәтле пулемет уты аҫтында шул пулеметҡа ташланып, уны тартып алып, шунда уҡ дошман атлылары яғына борҙо һәм көслө пулемет уты менән уларҙы сигенергә мәжбүр итте; шул саҡ дошман үҙенең өс орудиеһын һаҙға батырып ҡасты – бына шуның өсөн".

77. **Фәйзуллин Хисаметдин Шәриф улы** – 27-се, аҙаҡ 2-се Башҡорт кавалерия полкының командиры. РВСР-ҙың 19-сы фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

78. **Фәхрәзетдинов Фәхрислам** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының взвод командиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: "*взвод командиры Фәхрәзетдинов Фәхрислам иптәш – Лезни ауылы янындағы һуғышта дошман һағына бе-*

*ренсе булып һөжүмгә ташланып, үҙ артынан бөтә ҡыҙыларме-ецтарҙы әйҙәгәне өсөн, шул арҡала әлеге ауылды алыуға бу-лышлыҡ иткәне өсөн*".

79. **Фәттәхетдинов Хәлфетдин** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны взводы командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: "*1-се эскадрон командирының ярҙамсыһы Фәттәхетдинов иптәшкә - 1920 йылдың 6 июнендә Пиняево ауылы эргәһендә өс ҡыҙылармеец менән 25 полякты, 2 автоматик винтовка һәм запас частарҙы ҡулға төшөргәне өсөн*". Ф. Хәлфетдинов РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда икенсе тапҡыр бүләкләнгән.

80. **Фетисов Трофим Алексеевич** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 2-се эскадроны командиры. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

81. **Хаҡбирҙин Ғиззәтулла** – бригада штабы коменданты. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фронттан ҡайтып килгәндә Тамъян-Ҡатай кантонында үлтерелгән. Фарманда былай тиелә: "*1920 йылдың 13 июнендә Зарудье ауылы янындағы һуғышта ул комендант командаһы башында һуғыштың уңышын хәл иткән көслө флангы удары яһаны. Хаҡбирҙин иптәш бер үҙе бер нисә полякты тураҡлап, уларҙың төҙөк "Максим" пулеметын, дүрт атын һәм ылауҙарын тартып алды*".

82. **Шәрипов Рамаҙан Шәриф улы** – 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: "*1-се полк командиры Шәрипов Рамаҙан иптәшкә - 1920 йылдың июнендә Богданы һәм Пенязевичи ауылдары янындағы һуғыштарҙа полк хәрәкәттәре менән ҡыйыу һәм оҫта етәкселек иткәне өсөн. Һөҙөмтәлә беҙҙең тарафтан әлеге ауылдар алынып, дошмандың әсирҙәре, пулеметтары, патронлы йәшниктәре һәм арбалары, аттары, ылауҙары ҡулға төштө*".

83. **Шәйәхмәтов Усман** – 27-се Башҡорт кавалерия полкы-

ның 4-се эскадроны старшинаһы. РВСР-ҙың 34-се фарманы 1922 йылда бүләкләнгән.

84. **Эрадзе Л. С.** – 27-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

85. **Әбдрәхимов** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

86. **Әхмәнабаев С.** – бригада яугиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

87. **Әхтәмов** – бригаданың эскадрон командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

88. **Әшрәпов Шәкир Әшрәф улы** – бригада комиссары, артабан 1-се Башҡорт кавалерия полкының командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: “*Бригаданың әүәлге комиссар ярҙамсыһы, хәҙер 1-се Башҡорт кавалерия полкының командиры Әшрәпов Шәкир иптәшкә - ярым эскадрон башында дошман ҡулындағы Тетерев станцияһына яһаған сая сапҡыны өсөн. Был сапҡын ваҡытында, килеп еткән дошман поезының көслө пулемет һәм мылтыҡ утына ла ҡарамаҫтан, Тетерев йылғаһындағы тимер юл күпере һәм тимер юл полотноһы ҡыйратылды*”.

89. **Яҡшыгилдин Шәмсетдин Ғәләүетдин улы** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 3-сө эскадронында взвод командиры. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

## Ҡулланылған сығанаҡтар һәм әҙәбиәт.

### архив сығанаҡтары:
### Башҡортостан Республикаһының үҙәк дәүләт тарих архивы (ЦГИА РБ)


1. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 146. Л. 118.
2. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 76. Л. 44.
3. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 42. Л. 30.
4. Ф. 395. Оп. 1. Д. 25. Л. 9-10.
5. Ф. 394. Оп. 2. Д. 75. Л. 45.
6. Ф. 1730. Оп. 1. Д. 2.
7. Ф. 1736. Оп. 1. Д. 4. Личный фонд Е.В.Файзуллиной.


### Башҡортостан Республикаһы йәмғәт берекмәләренең үҙәк дәүләт архивы (ЦГАОО РБ)


8. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 9. Л. 112.
9. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 8. Л. 143.
10. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 8. Л. 155.
11. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 8. Л. 132.
12. Ф. 1832. Оп. 2. Д. 122.
13. Ф. 1832. Оп.3. Д. 354. Л. 10–15.
14. Ф. 1832. Оп. 3. Д. 242.
15. Ф. 1832. Оп. 2. Д. 139.
16. Ф. 10287. Оп. 1. Д. 3.

17. Ф. 10287. Оп. 1. Д. 273.
18. Ф. 10287. Оп. 1. Д. 278.
19. Ф. 10287. Оп. 1. Д. 163.
20. Ф. 10287. Оп. 1. Д. 94.
21. Ф.10311. Оп.1. Д.14.
22. Ф.22. Оп.2. Д.492. Личное дело А. Ф.Муртазина.
23. Ф.22. Оп.2. Д.493. Личное дело Д. Л.Муртазина.
24. Ф.22. Оп.2. Д.289. Личное дело К. Х.Ишмухаметова.

1. А.А.Валидов – организатор автономии Башкортостана. У истоков федерализма в России (1917–1920). Документы и материалы. Ч. 1. Уфа, 2005.
2. А.А.Валидов – организатор автономии Башкортостана. У истоков федерализма в России (1917–1920). Документы и материалы. Ч. 2. Уфа, 2010.
3. Из истории Гражданской войны в СССР. 1918–1922 гг. Сборник документов и материалов. В 3-х т. Т.3. М., 1961.
4. Книга памяти жертв политических репрессиий Республики Башкортостан. Уфа.
5. Национальное-государственное устройство Башкортостана (1917-1925 гг.). Документы и материалы: В 4 т. / авт.–сост. Б. Х. Юлдашбаев. Т. 1.– Уфа: Китап, 2002. – 608 с.
25. Национальное-государственное устройство Башкортостана (1917-1925 гг.). Документы и материалы: В 4 т. / авт.–сост. Б. Х. Юлдашбаев. Т. 2. Ч. I.– Уфа: Китап, 2002. – 680 с.
26. Национальное-государственное устройство Башкортостана (1917-1925 гг.). Документы и материалы: В 4 т. / авт.–сост. Б. Х. Юлдашбаев. Т. 2. Ч. II.– Уфа: Китап, 2003. – 696 с.
27. Национальное-государственное устройство Башкортостана (1917-1925 гг.). Документы и материалы: В 4 т. / авт.–сост. Б. Х. Юлдашбаев. Т. 3. Ч. I.– Уфа: Китап, 2004. – 692 с.
28. Национальное-государственное устройство Башкортостана (1917-1925 гг.). Документы и материалы: В 4 т. / авт.–сост. Б. Х. Юлдашбаев. Т. 3. Ч. II.– Уфа: Китап, 2004. – 624 с.
29. Сборник лиц, награжденных орденом Красного Знамени и Почетным революционным оружием. М., 1926.
30. Улар тәүгеләр ине (Ҡаһармандар хаҡында документтар) // Ағиҙел. 1970, №2.

## Әҙәбиәт

31. Горбатов А. В. Годы и войны. М, 1989.
32. Исянгильдин М. Воевал за Петроград // Сельские огни. 2005,

23 февраля.
33. Камалов Г. Х Отдельная Башкирская кавалерийская бригада на фронтах гражданской войны. Уфа, 1972.
34. Кульшарипов М. М. Башкирское национальное движение (1917–1921 гг.). Уфа, 2000.
35. Мортазин М. Л. Әҫәрҙәр. / Төҙ. Һәм руссанан тәрж. Д.Мәһәҙиев. Өфө, 1994.
36. Муртазин М. Л. Башкирия и башкирские войска в Гражданскую войну. М., 2007.
37. Насиров Р. Ҡылыс ҡында килешә. Тарихи очерктар. Публицистика. Өфө, 2000.
38. Насиров Р. Ыласын йөрәклеләр// Муса батыр. Өфө, 1992.
39. Плотников И. Ф. Формирование и боевой путь Отдельной Башкирской кавалерийской бригады (1918-1921) //Вторые уральские военно-исторические чтения. Материалы региональной конференции. Екатеринбург, 2000. С. 168–170.
40. Таймасов Р. С. Участие башкир в гражданской войне. Кн. 1. Уфа, 2009.
41. Трудный путь к правде / Сост. Г.Д.Иргалин, Н.П.Каменев. Уфа, 1997.
42. Үтәғолов Р. Ике орденлы Әбйәлил ҡаһарманы // Башҡортостан. 1995 йыл, 5 февраль.
43. Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттар тарихы. Өфө, 2005.
44. Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Хәтирәләр. Өфө, 1996.
45. Ярмуллин А. Ш. Автономиялы Башҡортостан байрағы аҫтында. Өфө, 2009.
46. Ярмуллин А. Ш. Комбриг М.Л.Муртазин и боевой путь Отдельной Башкирской кавалерийской бригады (к 120-летию со дня рождения) // Проблемы востоковедения. 2011, № 1.
47. Ярмуллин С. Ш. Ике орденлы Шәмсетдин батыр // Башҡортостан. 1996, № 116, 118.

*Научно-популярное издание*

**Ярмуллин Азат Шакирьянович**

# КОМБРИГ МУРТАЗИН И ЕГО СОРАТНИКИ

*(на башкирском языке)*

Редактор С.Ш.Ярмуллин
Дизайн и вёрстка И.З.Туймакаев

Подписано в печать 08.08.2011
Формат 60х84. Бумага офсетная.
Гарнитура "Таймс". Печать на ризографе.
Усл. печ. л. 1,4
Тираж 300 экз. Заказ № 4

Редакционно-издательский отдел
Национальной библиотеки им. А.-З. Валиди РБ
450000, г.Уфа, ул. Ленина, 4.
Тел./факс: (347) 272-04-89
www.bashnl.ru
nbrb@ufanet.ru